ХАТ ЮЛҒА САҠЫРА ........ 6-7

## “Беҙҙә почта эшләмәй”



Районда бер-бер артлы почта бүлексәләре ябылған

ХИКӘЙӘ ........ 16

## Матур көн

Миләүшә Ҡаһарманова



СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ ........ 19

## Үҙегеҙ яһап ҡарағыҙ

Коллагенды өй шарттарында ла әҙерләп була






ПРОГРАММАҺЫ 21-22


# Башҡортостан

Гәзитте ойоштороусылар – Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте

BASHGAZET.RU

1917 йылдың 14 июненән сыға

РЕСПУБЛИКАНЫҢ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ҺӘМ МӘҘӘНИ ГӘЗИТЕ

12+

№ 31 (28033)

2023 йыл, 20 апрель, ЙОМА


**БӨГӨН - МИЛЛИ КЕЙЕМ КӨНӨ** Был байрамды күрше өлкәләрҙә лә билдәләйҙәр

# Халыҡ хазиналары – халыҡҡа



*Айрат Нурмөхәмәтов фотоһы.*

✍ Рүзилә ИҪӘНБАЕВА

**Милли кейем көнө – халыҡ күтәреп алған байрам. Уны республикабыҙҙа 2020 йылдан алып йылына ике тапҡыр билдәләйбеҙ: апрелдең өсөнсө йомаһында һәм сентябрҙең икенсе йомаһында. Башҡортостанда 164 милләт вәкиле йәшәй. Милли кейемдәре аша халыҡтарҙың үҙенсәлекле тарихы, мәҙәниәте менән танышып була.**

Быйыл да 10 апрелдән Милли кейем көнөнә арналған “Милли кейемдә фото” онлайн-акцияһы старт алды. Үткән аҙнала Мәсетле районында милли кейем көнөнә арналған “Һомай” район конкурсы үткән. Районда йәшәүсе башҡорт, рус, татар халыҡтарының милли костюмдары күрһәтелгән, еңеүселәр билдәләнгән.

17 апрелдә “Селтәр” башҡорт халыҡ кейеме студияһының “Ырыуҙар хазинаһы” концерты үтте. “Ете йыл дауамында беҙ яратып милли костюмдар, милли ҡатын-ҡыҙ биҙәүестәре, легендалар, йырҙар, бейеүҙәр, йолалар, уйындар йыябыҙ, һаҡлайбыҙ, ижад итәбеҙ. Башҡорт халҡының ошо хазиналарын тамашасыларға ла күрһәтергә теләнек”, – тип һөйләй “Селтәр” халыҡ кейеме студияһы етәксеһе Фатима Хәйретдинова.

Милли кейем көнөн шулай уҡ күрше өлкәләрҙә лә билдәләйҙәр. Екатеринбург башҡорттары 16 апрелдә милли кейемгә арналған асыҡ ишектәр көнө үткәрҙе. Пермь крайында ла ошондай саралар уҙғарыла. Башҡортостан халыҡтар дуҫлығы йортоноң Ҡурған, Силәбе өлкәләрендәге филиалдарында ла Милли кейем көнөнә ҡарата акциялар үткән.

13 апрелдә "Урал" этноүҙәгендә Милли кейем көнөнә арналған “Башҡортостан Республикаһы халыҡтарының милли кейемдәре” күргәҙмәһе асылды. Ул үҙ эшен 26 апрелгә тиклем дауам итәсәк.

Экспозицияла Башҡортостан Республикаһында йәшәгән халыҡтарҙың милли кейеме, шулай уҡ уның элементтары: хәситә, һарыуыс, ҡашмау, күкрәк кейеме һәм боронғо ювелир биҙәүестәр ҡуйылған. Күргәҙмә халыҡтарҙың йолаларына, тарихына һәм мәҙәниәтенә тағы бер тапҡыр күҙ һалырға мөмкинлек бирә.

Төп байрам сараһы бөгөн Өфөнөң “Планета” сауҙа үҙәгендә үтә. Уны Башҡортостан Республикаһының Халыҡтар дуҫлығы йорто ойоштороған. Сәхнәлә Башҡортостандың төрлө халыҡтарының тарихи өлгөләре һәм сәхнә костюмдары күрһәтелә. Бынан тыш, сарала ҡатнашыусылар төрлө йәшкә иҫәпләнгән оҫталыҡ дәрестәрендә ҡатнашыу мөмкинлегенә эйә: “Белорус кейеҙ ҡурсағы”, “Татар милли баш кейеме һәм орнаменты”, “Сыуаш орнаменты менән алҡалар һәм ике яҡлы сигеү”, “Урыҫ кейеҙ ҡурсағы”, “Этник стилдә башҡорт брошкаһы”, “Башҡорт мини-күкрәк биҙәүесе”, “Беләҙек үреү”, тамбурлы сигеү, кейеҙҙән төрлө әйберҙәр, таҫма менән сигеү һәм башҡа ҡыҙыҡлы саралар бара.

*(Теманың дауамын 11-се биттә уҡығыҙ).*

23031

4 665299 181258

## КӨН ҠАҘАҒЫНДА



### Котлайбыҙ!

Яҡташыбыҙ комиссия составында

Олимпия уйындарында өс тапҡыр призер булған биатлонсы Эдуард Латипов Рәсәй Биатлонсылар союзының спортсылар комиссияһы составына инде. Комиссия дүрт йылға бер ойошторола. Ә уның рәйесе тауыш биреү юлы менән һайланасаҡ.

## Тәнҡитләү түгел, ярҙам итеү

✍ Айһылыу НИЗАМОВА

**18 апрелдә Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров Күмертауҙа ҡаланың социаль-иҡтисади үҫеше буйынса эшлекле кәңәшмә үткәрҙе. Сарала вице-премьерҙар, министрлыҡ һәм ведомство етәкселәре ҡатнашты.**

Андрей Назаров бөгөн ҡала хакимиәте менән булған ҡыйынлыҡтарҙы хәл итеү мөмкинлектәре тураһында һөйләшеүҙең төп мәсьәлә икәнлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды.

– 2021 йылдың февралендә ҡаланың көнүҙәк проблемалары тураһында һөйләшергә йыйылғайныҡ. Ул ваҡытта аныҡ фармандар бирелгәйне. Бөгөнгә барыһы ла үтәлә, – тине Премьер-министр.

Шулай итеп, ЗАГС бинаһында капиталь ремонт атҡарыласаҡ. Бынан тыш, Көйөргәҙе районы менән Күмертау ҡалаһы араһында автобустар йөрөтөү һәм башҡалар тураһында ине. Дөйөм алғанда, барлығы 25 фарман бар һәм улар эштә.

Социаль-иҡтисади үҫеш перспективаларын ҡарағанда, Андрей Назаров Эшҡыуарлыҡ һәм туризм министрлығына Күмертау ҡалаһы эшҡыуарҙары өсөн квартал һайын сығып ҡабул итеү үткәреү, ҡала хакимиәтенә – ағымдағы йылда йылдам үҫеш биләмәһенә өҫтән кәм булмаған резидентты йәлеп итеү, Иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министрлығына – йыл һөҙөмтәләре буйынса инвестициялар буйынса 10 проценттан да кәм булмаған үҫеште, Мәғариф һәм фән министрлығына "Күмертау авиация етештереү предприятиеһы" акционерҙар йәмғиәте менән пилотһыҙ осоу аппараттары операторҙарын уҡытыуҙы ойоштороу мәсьәләһен тәьмин итергә ҡушты. Андрей Назаров иҡтисади һәм сәйәси факторҙар ҡатмарлы булһа ла, "КумАПП"тың тоторокло эшләүе хаҡында һөйләне. Былтыр 9 миллиард һумлыҡ продукция ташылған. Был, 2021 йыл менән сағыштырғанда, 16 процентҡа күберәк. Был йылға ла предприятие заказдар менән тәьмин ителгән.

– Анализ күрһәтеүенсә, авиация техникаһына күс ведомстволары заказ бирә, әммә граждандлыҡ йүнәлешен дә үҫтерергә кәрәк. Тап шуға предприятиеның етештереү ҡеүәтендә "БАС-200" перспективалы пилотһыҙ системаларҙы етештереү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Сәнәғәт, энергетика һәм инновациялар министрлығына Рәсәйҙең Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығына "КумАПП" компанияһы продукцияһын файҙаланыуҙы ҡарау мөмкинлеге менән мөрәжәғәт итергә кәрәк, – тине Хөкүмәт Премьер-министры.

Артабан йәмәғәтселек биләмәләрен төҙөкләндереү һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ системаһы үҫеше тураһындағы мәсьәләләр ҡаралды.

Йылылыҡ менән тәьмин итеүгә килгәндә, Премьер-министр төп теманың береһе Күмертау йылылыҡ-электр станцияһы өлкәһендәге мәсьәләләр икәнлеге тураһында белдерҙе. Эшлекле сәфәргә йомғаҡ яһап, Андрей Назаров вице-премьерҙарға, министрлыҡтар һәм ведомстволар етәкселәренә Күмертау ҡалаһының социаль-иҡтисади үҫешенең төп йүнәлештәренә етди иғтибар бүлергә ҡушты.

# Тыуған яҡҡа иҫән-һау ҡайтығыҙ!

## Өфөнән Башҡортостан егеттәре хәрби бурыстарын үтәүгә оҙон юлға сыҡты





Автор фотолары.

✍ Резеда ШӘНГӘРӘЕВА

**Уларҙы оҙатыу сараһында Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай Рәйесе Константин Толкачев та ҡатнашты:**

**– Илһөйәрлегегеҙ, Тыуған илегеҙгә тоғро хеҙмәтегеҙ өсөн һеҙгә рәхмәт белдерәм. Түҙемлек һәм уңыштар теләйем. Иҫән-һау, геройҙар булып, еңеү менән тыуған ерегеҙгә тиҙерәк ҡайтығыҙ! – тиген теләктәрен әйтте ул һалдаттарға.**

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Ирек Сәғитов та батырҙарса хеҙмәт иткән Башҡортостан егеттәре менән ғорурланыуын белдерҙе:

– Атай-олатайҙарыбыҙ 1812 йылғы Ватан һуғышында ла, Бөйөк Ватан һуғышында ла һынатмаған, бөгөн дә егеттәребеҙ лайыҡлы хеҙмәт итә.





һәм улар менән ғорурланабыҙ. Республика Башлығы Радий Хәбиров хәстәре менән яугирҙәргә аҙна һайын гуманитар ылау оҙатабыҙ. Предприятиелар, урындағы хакимиәттәр, халыҡ – береһе лә был эштән ситтә ҡалмай. Хәрбиҙәргә нимә кәрәк – барыһын да ойоштораbыҙ. Шул уҡ ваҡытта ғаиләләре лә иғтибарҙан ситтә ҡалмай, – тине ул.

Яуаплы һәм ауыр хәрби бурыс үтәргә юлланыуҙарын егеттәр аңлай һәм уларҙың рух ныҡлығы һоҡландырҙы.

– Ғаиләм, яҡындарым һағынып көткәйне, ике аҙна буйы ауылда улар янында булдым. Хәҙер бына ҡабат хәрби хеҙмәт урынына барырға ваҡыт етте, – тине "Жан" позывнойлы егет.

"520" позывнойлы хәрби ҙә уға ҡушылды:

– Яҡшы итеп ял иттем. Әлбиттә, ике аҙна тиҙ генә үтте лә китте. Хәҙер яңы көс менән ҡабаттан хеҙмәт урынына юлланабыҙ. Еңеү беҙҙең яҡта буласаҡ! – тине ул, ышаныслы итеп.

Оҙатыусылар ҙа майҙан тулы ине. Алыҫ райондан ауылдаштарын оҙатырға килгән күмәк торған апай-ағайҙар менән дә һөйләшеп алдыҡ.

– Беҙҙән теләк бер – махсус хәрби операцияға киткән барлыҡ егеттәребеҙ имен-һау тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтһын. Илдә тыныслыҡ урынлашһын, – тиген һүҙҙәр яңғыраны.

Изге айҙа теләгән теләктәр ҡабул булмай ҡалмаç. Ирегеттәрҙең барыһының да күр кәйефтә Башҡортостанға ҡайтып төшкән мәлдәрен ҡабат күрергә яҙһын.

### ФЕКЕР

**"520" позывнойлы хәрби ҙә уға ҡушылды:**

*– Яҡшы итеп ял иттем. Әлбиттә, ике аҙна тиҙ генә үтте лә китте. Хәҙер яңы көс менән ҡабаттан хеҙмәт урынына юлланабыҙ. Еңеү беҙҙең яҡта буласаҡ! – тине ул, ышаныслы итеп.*

## Яҡты киләсәккә ышанып

✍ Гөлүзә ЛАТИПОВА

**Башҡортостан Республикаһының Мәғариф һәм фән министрлығы 2023 йылда республикала белем биреү учреждениелары араһында "Уҡыусыларҙың инициативаһын бюджетлау" проектын тормошҡа ашырыуға субсидиялар бүлеүгә конкурс иғлан итте.**

Был проект Баймаҡ районы Күсей төп дөйөм белем биреү мәктәбе уҡыусыларын да ҡыҙыҡһындырҙы. Уҡыусылар мәктәп өсөн иң кәрәклеһе тип билдәләнгән биш йүнәлештә эш башланы. Биш төркөм "Бейеү студияһы", "Музыкаль студия", "Медиакитапхана", "Тренажер залы", "Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Йәүҙәт Бикбирҙин исемендәге уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен үҫтереү үҙәге" исемле проекттар тәҡдим итте.

5 – 9-сы класс уҡыусылары йыйылышы ҡарары менән һуңғы проект еңеп сыҡты һәм республика кимәлендәге конкурсҡа ҡатнашыуға лайыҡлы тип табылды.

Ошо проект республика кимәлендә лә уңышҡа өлгәшһә, мәктәбебеҙ уҡыусылары яңынан-яңы ижади үрҙәр яулар, ауылыбыҙҙың данлы улҡыҙҙары өлгөһөндә киләсәктә районыбыҙ, республикабыҙ сәхнәләрен биҙәр, әҙәбиәтебеҙ, мәҙәниәтебеҙ күген балҡытыр йондоҙҙар булып үҫеренә ышанабыҙ.

## КӨН ҠАҘАҒЫНДА




### Министрға ялыу итергә була

Граждандарҙы 26 апрелдә ҡабул итәләр

Башҡортостандың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Нияз Фазылов һәм Башҡортостандың тәбиғәтте һаҡлау район-ара прокуроры Евгений Гуслов 26 апрелдә граждандарҙы ҡабул итәсәк. Граждандар ведомство етәкселәренә тәбиғәтте һаҡлау ҡануниәтен боҙоу: законһыҙ сүплектәрҙе табыу, һыу яткылыҡтарының һәм һауаның бысраныу, хәүефле ҡалдыҡтарҙы яндырыу, законһыҙ һунар, ер аҫтын эшкәртеү, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау мәсьәләләрен хәл иткәндә вазифалы кешеләрҙең законһыҙ эш итеүҙәре йәки эшләмәүҙәре тураһында һөйләй аласаҡ. Алдан яҙылыу кәрәк.

● ЭКОЛОГИЯ

# Балыҡҡа бармай тороғоҙ

✍ Ә. ӘЙҮПОВА

**Рәсәй балыҡсылығы Волга-Кама биләмә идаралығының Башҡортостан буйынса һыу биология ресурстарын контролләү, күҙәтеү һәм һаҡлау дәүләт бүлеге хәбәр итеүенсә, 15 апрелдән 15 июнгә тиклем, республикала балыҡ ыуылдырыҡ сәскән осорҙа, уны тотоуҙы тыйыу ғәмәлдә була.**



Түбәнге Кама һыу һаҡлағысы һәм Ағиҙел йылғаһында балыҡ ыуылдырыҡ сәскән ваҡыт 25 апрелдән 5 июнгә тиклем дауам итә. Һәүәҫкәр һәм спорт балыҡ тотоуына килгәндә, сиклəүҙәр барлыҡ ерҙә лә 25 апрелдән 5 июнгә тиклем бара. Бер кешегә ярҙан икенән дә күп булмаған ырғаҡлы бер ҡалҡыуыслы йә иһә һыу төбө ҡармағынан тотоу рөхсәт ителә, ә башҡа төр ысулдар тыйыла. Шулай уҡ ыуылдырыҡ сәсеү урындарында балыҡ ҡармаҡларға ярамай.

Рус бикреһе, ҡумжа (бағыр), ҡыҙыл балыҡ, бәрҙе, уҡбалыҡты тотоу тыйыла.

Һыу биоресурстарының ҙурлығына ҡарата ла талаптар бар. 40 сантиметрҙан ҡыҫҡараҡ ағасаҡ, һаҙан һәм һыла балығы, 28 сантиметрҙан бәләкәйерәк ҡорман, 90 сантиметрҙан бәләкәйерәк йәйен, 10 сантиметрҙан бәләкәйерәк ҡыҫала эләкһә — һыуға кире ебәрергә кәрәк. Тәүлегенә рөхсәт ителгән табыш күләмен арттырырға ярамай, ул биш килограмдан артмаҫҡа тейеш.

Һыу биоресурстарын алыу тыйылған урын тип Ағиҙел йылғаһы иҫәпләнә: был Илеш районының Юлдыҙ һыу алыу ҡоролмаһынан алып Әңгәсәк ауылының административ сигенә (Дүртөйлө районы) тиклем, Өфө районының Ҡыҙылъяр ауылынан алып Тоҙлө тауға (Өфө районы) тиклем.

Ошо осорҙа һыу яткылыҡтарында күҙәтеү-тикшереү эштәре көсәйтелә. Тыйыуҙарҙы боҙған балыҡсыларға штраф һалына. Шулай уҡ һәр балыҡ өсөн айырым хаҡ ҡуйылған, ҡағиҙә боҙоусы уны ла түләргә тейеш була. Балыҡ аулау саралары һәм кәмәләр тартып алына.

Балыҡсыларға был осорҙа уны тотоу ҡағиҙәләрен ентекле белеү мөһим. Республикала балыҡсылыҡ өлкәһендә ҡануниәтте боҙоу осраҡтары булмаһын өсөн, һәр ҡайһыбыҙҙың уяулығы талап ителә.

# Янғындарға юл ҡуймайыҡ

## 17 апрелдән республикала янғынға ҡаршы махсус тәртип индерелде

✍ Әлфиә МИНҒӘЛИЕВА

**Быйыл Башҡортостанға яҙ иртә килде. Иртә яҙ иһә янғындар миҙгелен дә иртәләтте. Алдағы йылдарҙа был ваҡытҡа саҡ тәүге тәбиғәт янғындары теркәлә башлаһа, әле иһә бер нисәү булып та өлгөрҙө. Хәлде контролдә тотоу өсөн 17 апрелдән республикала янғынға ҡаршы махсус режим индерелде. Был мәсьәлә даими рәүештә Башҡортостан Башлығы һәм Хөкүмәте контролендә. Был аҙналағы Хөкүмәт кәңәшмәһендә лә ошо темаға ҙур ғына һөйләшеү булды.**




Хәүефле миҙгелгә әҙерлек тураһында Рәсәй Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының Башҡортостан буйынса Баш идаралығы начальнигы Марат Латипов һөйләне. Уның белдереүенсә, 17 апрелгә ҡарата республикала 2448 янғын булған, уларҙа 94 кеше һәләк булған һәм 74-е төрлө йәрәхәттәр алған. Ошо уҡ ваҡытҡа 484 тәбиғәт янғыны теркәлгән, уларҙың алтыһы – дөйөм майҙаны 498 гектарлыҡ урман янғыны. Бөтә янғындар ҙа ваҡытында һүндерелгән.

Тәбиғи һәм ландшафт янғындарының төп сәбәбе – ут менән һаҡһыҙ эш итеү, был – 448 осраҡ йәки 93 процент. Бөгөн республикала 184 торак пункт, 44 коммерцияға ҡарамаған баҡса ширҡәте һәм 41 балалар сәләмәтләндереү лагеры территорияһы тәбиғи янғындар таралыу ҡурҡынысы янаған биләмәләр тип билдәләнгән.

– Беҙҙең ведомство Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты менән берлектә урындағы үҙидара органдарының тәбиғи янғын хәүефе янаған торак пункттарҙа иҫкәртеү саралары комплексын ойошторҙо. Тәбиғәт янғындарына тиҙ арала иғтибар итеү һәм башланғыс этапта уларҙы һүндереү, янғындарҙың торак пункттарға һәм урмандарға күсеүенә юл ҡуймау өсөн янғын хәүефе миҙгеленә быйыл өс мең кешенән торған 850-нән ашыу ведомство-ара мобиль төркөм ойошторолдо, – тине ул.

Тәбиғәт янғындарын, шулай уҡ янғын сығыу хәүефен кәметеү маҡсатында республика Башлығы бойороғо менән 17 апрелдән 15 майға тиклем төбәктә янғынға ҡаршы махсус режим индерелде.

Был осорҙа янғын хәүефһеҙлеге буйынса өҫтәмә талаптар билдәләнә, шул иҫәптән усаҡ яғыу, граждандарға урманға барыу тыйыла, урман һәм башҡа ландшафт (тәбиғи) янғындарының таралыуына ҡамасаулаусы өҫтәмә саралар күрелә.

Марат Латипов, оҙаҡламай май байрамдары етеүен күҙ уңында тотоп, урындағы үҙидара органдарына торак пункттарҙы һәм урман массивтарына сиктәш территорияларҙы һөрөү буйынса сараларҙы тамамларға, торак пункттарҙа һәм уларҙың эргәһендә урынлашҡан тышҡы янғынға ҡаршы һыу менән тәьмин итеү сығанаҡтарын талаптарға ярашлы хәлгә килтерергә, тәбиғи янғындар сығыу хәүефе янағанда халыҡҡа хәбәр итеүҙе ваҡытында ойошторорға, ирекле янғын формированиелары ойошторорға һәм уларҙың эшмәкәрлеген тәьмин итергә кәңәш итте.

Ағымдағы йылда республика биләмәһендә тәбиғәт янғындары тыуҙырған ғәҙәттән тыш хәлдәрҙе иҫкәртеү һәм бөтөрөү өсөн 30 меңгә яҡын кеше һәм 7,5 мең шәхси техника йәлеп итеү ҡаралған. Дөйөм алғанда, көс һәм средстволар етерлек.

Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Фәрит Ғүмәров иһә үҙ ведомствоһы йәһәтенән әҙерлек эштәре тураһында һөйләне. Тәү сиратта Хөкүмәт кимәлендә махсус программа ҡабул ителгән. Уны тормошҡа ашырыу сиктәрендә Ка-32 янғын-күтҡарыу вертолеты, биш янғын һүндереү автоцистернаһы, республика Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының аэромобиль төркөмө өсөн ике автобус, 1 100 дана артмаҡлы янғын һүндергес һатып алынған. Улар республиканың янғынға ҡаршы хеҙмәтенең алты отряды базаһында урынлашҡан һәм кәрәк булғанда тиҙ арала тәбиғәт янғындары урындарына алып барып еткерелә. Быйыл тағы дүрт янғын һүндереү машинаһы һатып алыу планы бар. Ка-32 вертолеты тәбиғи янғындарҙы һүндерергә әҙер. Уҙған аҙнала вертолетҡа янғын һүндереү системаһы ҡуйылған, ул 17 секундта 1,5 метр тәрәнлектәге һыу яткылығынан биш кубометр һыуҙы һурып алырға мөмкинлек бирә.

Шулай уҡ республикала оператив штаб булдырылған, ул урмансыларға һәм муниципалитеттарға ярҙам итергә әҙер. Янғын хәүефе миҙгеле башланыр алдынан штаб тырышлығы менән 55 муниципалитет сит ойошмаларҙың махсус техникаһы ярҙамында уларҙың биләмәләрендә тәбиғәт янғындарын һүндереүгә йәлеп итеү тураһында килешеүҙәр төҙөгән. Өсөнсөнән, “Урманды һаҡлаусы” урман янғындарын күҙәтеү системаһы” пилот проектын тормошҡа ашырыу йылдам бара. Әлеге ваҡытта янғын сығыу хәүефе ҙур булған алты муниципаль районда урман янғындарын күҙәткән 14 камера ҡуйылған.

Дүртенсенән, ирекле янғын һағы үҫтерелә. Былтыр уларға 21 берәмек тағылма янғын һүндереү техникаһы тапшырылған, быйыл тағы 13-тө һатып алырға ниәтләйҙәр. Шуның менән бер рәттән, былтыр ирекмәндәргә республиканың янғынға ҡаршы хеҙмәте автопаркын планға ярашлы алмаштырғанда бушаған дүрт янғын һүндереү автомобиле тапшырылған, быйыл йәнә биш берәмек техника биреләсәк. Тағы ирекмәндәргә 80 комплект махсус янғын һүндереүселәр кейеме бүленгән.

Бынан тыш, комитет ирекмәндәр менән эште дауам итергә йыйына. Былтыр янғындарҙы иҫкәртеү һәм һүндереү программаһы буйынса ике меңдән ашыу ирекмәндә уҡытҡандар. Уларҙы, кәрәк булһа, тәбиғәт янғындары менән көрәштә файҙаланырға ниәтләйҙәр.

Тағы бер мөһим эш – яңы янғын һүндереү деполары төҙөү. Быйыл бындай төҙөләш Ғафури һәм Ишембай райондарында башҡарыласаҡ.

– Уҙған йылдарҙа республиканың Шишмә, Күгәрсен һәм Баймаҡ райондарында янғынға ҡаршы хеҙмәттең дүрт яңы бүлексәһен асыу 76 торак пунктта янғынға тиҙ арала иғтибар итеү ваҡытын ҡыҫҡартырға мөмкинлек бирҙе, – тине ул. – Граждандарға республикала барлыҡҡа килгән урман янғыны хәле тураһында мәғлүмәт биреү маҡсатында һәр муниципалитетта булған Төбәк автоматлаштырылған мәғлүмәт системаһының 147 тауыш биреүсе ҡоролмаһы, ОКСИОН терминал комплекстары, телевидение, радио, “Башавтотранс” автобустары мониторҙары, ҡала яны электр поездары, мәсеттәр һәм сауҙа-күңел асыу үҙәктәре йәлеп ителәсәк.

## ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ



### Яңы закон проекты әҙер

Юридик ярҙам бушлай күрһәтеләсәк

Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаттары махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына бушлай юридик ярҙам алыуға хоҡуҡ бирергә уйлай. Юридик хеҙмәттәргә түләүҙәр бюджет средстволары иҫәбенә башҡарыласаҡ.

# Бөрйәндәр изге эшкә әүҙем ҡушылды

## Мәрхәмәтлек концертын һигеҙенсе ауылда ҡуйҙылар

✍ Айһылыу НИЗАМОВА

**Борон-борондан халҡыбыҙ мираҫы булған ғәмәлдәр бар: изгелек ҡылыу, хәленән килгәнсә башҡаларға ярҙам ҡулын һуҙырға ынтылыу. Әле лә республикабыҙҙағы һәр кем ҡулынан килгәнсә махсус хәрби операцияла ҡатнашҡандарға ярҙам итергә тырыша.**



Һәр саҡтағыса республикабыҙҙа йәшәүселәр, шул иҫәптән бөрйәндәр ҙә был изге эшкә әүҙем ҡушылды. Мәҫәлән, сығышы менән Байназар ауылынан булған Айрат Роберт улы Баязитов тыуған районы ауылдары буйлап мәрхәмәтлелек концерты ойошторорға ҡарар иткән.

– "Йәшәү дәрте арта күңелемдә, йөрәгемдә моңдар яралһа!" тип исемләнгән мәрхәмәтлелек концертын эте ауыл мәҙәниәт йортонда уңышлы ҡуйып ҡайттыҡ. 25 мартта Байназар ауылында башлап ебәргәйнек, унда 10 мең һум аҡса йыйылды. Концертта ҡатнашҡан иждаташ дуҫтар дәрт итеп, күрше ауылдарға барайыҡ тип ниәтләп, Мораҙымда – 5500, Мәһәҙейҙә – 6000, Яуымбайҙа – 3500, Яңы Монасипта – 5000, Ғәлиәкбәрҙә 7000 һәм Килдеғолда 6500 һум йыйып, тулайым 43500 һум туплап, махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан районыбыҙҙың ир-егеттәренә ярҙамға күсереп ҡуйыуға өлгәштек, – ти Айрат Роберт улы. – Бөтә яҡтан яҡшы эштәргә йүнәлтеүсе әсәйемә, туғандарыма – Азамат ағайыма, Айһылыу апайыма, Рәсимә еңгәйемә, Гөлназ һеңләмә, концертты музыкаль яҡтан биҙәүсе тауыш операторы Урал Ниязғоловҡа, талантлы йырсы Артур Нәжметдиновҡа, Байназар ауылы биләмәһе ветерандар советы рәйесе Сәғит Алтынбаевҡа, презентация, афишалар менән ярҙам итеүсе Айгүзәл Уразаеваға, Булат Тимерғәлиевкә, йылы алҡыштар менән ҡаршы алған хөрмәтле тамашасыларға ҙур рәхмәт.

Бынан тыш, бер концерттан да ҡалмай ҡатнашҡан "Ағиҙел тулҡындары" инструменталь ансамбле сараға дәрт, дарман өҫтәгән: Дилара Иманғолова, Вәдүт Алтынбаев, Әлфир Хәсәнов, Рәмзиә һәм Фаил Үтәбаевтар, Әнүзә Ибраһимова, Әлфирә Сөләймәнова, Зәлиә Тулыбаева, оҫта ҡурайсы Ғәзим Ғәлиуллин һәм һүҙ оҫтаһы, ансамбль етәксеһе Нажиә Ишкыуатованың сығышы һәр кемгә оҡшаған.

– Коллектив дәррәү йыйылды, кәрәк саҡта машиналары, үҙ юлы менән дә ихлас күңелдән барып ҡатнаштылар, – ти Айрат Баязитов.

Тамашасылар республика бәйгеүконкурстары лауреаты Дилбәр Хәкимованың сығышын йылы алҡыштар менән ҡаршы алған. Моңло йырсылар Таңһылыу Нурғәлина, Мәйсәрә Миндеғолова һәм Садиҡа Вәлиеваның сығышы ла һәр кемгә оҡшаған.

– Ауылдар буйлап турҙарҙа йөрәгән осорҙа йәм өҫтәп өр-яңы "Моңло шишмә" ҡатын-ҡыҙҙар вокаль ансамбле барлыҡҡа килде, – тип ҡыуаныслы яңылығы менән уртаҡлашты Айрат Роберт улы.

Республика конкурстары лауреаттары баянсы, ҡурайсы, йырсы, композитор Хәйҙәр Нәҙершин һәм оҫта бейеүсе Фәнис Үтәбаев, сараның һәр бер өлөшөнә тура килтереп шиғыр, матур һүҙҙәре менән биҙәгән Нурзилә Исмәғилева – ана шундайҙарҙан. Фәтих Миндеғолов үҙенең машинаһы менән музыкаль аппаратура алып барышҡан.

Сараны хуплап, Бөрйән районы хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Клара Теләүбаева, район мәҙәниәт һарайы директоры Гөлнур Нәҙершина, Ветерандар советы рәйесе Олег Ғәлиев, юл төҙөүтөҙәкләндереү идаралығы мөдире Руслан Динисламов һәм башҡалар һәр йәһәттән булышлыҡ итә.

– Ошо концерттарҙы ойоштороуҙа күрһәткән ярҙамдары өсөн һәммәһенә лә оло рәхмәтемде еткерәм, – ти Айрат Баязитов.

Һәр башланғысҡа нигеҙ ғаиләлә һалына. Айраттың атаһы Роберт Ишдәүләт улы ла йырларға яратҡан. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бынан дүрт йыл элек ул яҡты донъяларҙан китеп барған. Әсәһе Әминә Тимерғәҙыҡ ҡыҙы, апайҙары Айгөл, Айһылыу, ағайҙары Азамат менән Салауат та сәнғәткә ғашиҡ.

Мәҡәлә әҙерләнгәндә "Йәшәү дәрте арта күңелемдә, йөрәгемдә моңдар яралһа!" тип исемләнгән концерт Яңы Усман ауылында ла булды. "Тағы 9500 һум аҡса йыйылды. Был аҡсаны ыңғай күсереп ҡуйҙыҡ", – тип хәбәр итте Айрат Баязитов. Ул иждаташ дуҫтары менән тағы бер нисә ошондай концерт ойоштормаҡсы. Был мәҙәни сараларҙан йыйылған аҡса махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан Бөрйән районы егеттәренә ярҙамға китәсәк.

# Яҡташыбыҙ Вәсил ялға ҡайтты

## "Балаларҙың хаттарын күкрәк кеҫәһендә һаҡлап йөрөтәм..."

✍ Гөлназ ХУЖИНА

Борай районы

**Бөгөн ил өсөн бик мөһим ваҡиға – махсус хәрби операция барған төбәктән ҡыҫҡа ваҡытлы ялға ҡайтҡан егеттәр араһында яҡташыбыҙ Вәсил Ҡорбанов та бар. Уның менән осрашыу яҡташыбыҙҙың холоҡ-фигелендәге бығаса күҙгә салынмаған күркәм сифаттарҙы нығыраҡ асты. Борай районының Иҫке Ҡарағош ауылында тыуып үҫкән Вәсилде оҫта ҡуллы, тырыш егет тип белә инек. Ғаиләлә үҫкән дүрт малайҙың икенсеһе ул.**



Автор фотоһы.

Мәктәптә IX класты тамамлағас, Нефтекамаға, машина төҙөлөшө колледжына уҡырға йүнәлә. Маҡсаты – яңы технологияларҙы үҙләштереү, программист булыу. Уҡыу йортон уңышлы тамамлау менән хәрби хеҙмәткә алына. Булдыҡлы егет унда ла һынатмай, ефрейтор званиеһында тыуған яғына әйләнеп ҡайта. "Башнефтегеофизика" ойошмаһына эшкә урынлаша. Бында ҙур тәжрибә туплап, һөнәре буйынса "Иң яҡшы геофизик" исеменә лә лайыҡ була. Тормош иптәше Динара менән ике ул үҫтерәләр. Эҙләнеүсән, эшһөйәр ғаилә башлығының ҡулынан бөтә эш килә, ниндәй материал ҡулына эләкһә лә, унан ҡойоп ҡуйғандай йыһаздар, әйберҙәр тыуа. Иң беренсе белөҙеген хәләл ефете Динараға бүләк итә, шунан башлап ул төрлө биҙәүестәр эшләүгә илһамланып тотона...

Өлөшләтә хәрби мобилизация башланғас, Вәсил хеҙмәткә саҡырыла. Ҡазан янындағы полигондарҙа хәрби күнекмәләр үткәс, иптәштәре менән Донбасска оҙатыла. Егет, тыуған республика менән бәйләнештең ныҡ булыуын, яҡташтарҙың ярҙам итеүен билдәләп, етәкселәргә һәм ауылдаштарға ихлас рәхмәтен белдерҙе.

– Беҙҙе бөтә кәрәк-яраҡ менән Рәсәй Ҡораллы Көстәре тәьмин итһә лә, тыуған яҡтан килгән һәр хәбәр, ризыҡ беҙҙең өсөн бик ҡәҙерле. Йылы мөнәсәбәтте һәм иғтибарҙы тойоу беҙҙе көслөрәк, ҡыйыуыраҡ итә, – ти ул. – Гуманитар ярҙам килеүен ишетһәм, "балаларҙан хаттар юҡмы?" тип һорайым. Бында тыуған яҡтарҙан ҡош теләндәй генә булһа ла һөйөнөслө хәбәр алыу күңелде күтәреп ебәрә. Был тулҡынландырғыс хис-тойғоларҙы аңлатыуы ла ауыр. Уҡыусылар ҡулы менән яҙылған хаттарҙы ҡатҡат уҡыйым, ырғытмайым, ә күкрәк кеҫәһенә һалып ҡуям, улар минең өсөн яуыз көстәрҙән һаҡлаусы бетеү кеүек. Көшкәләү мәктәбенән килгән посылка минең өсөн әйтеп бөтөргөһеҙ шатлыҡ булды. Яҡташтарымдың мине онотмауына, хәтерҙә тотоуына балалай һөйөндөм. Егеттәребеҙгә хаттар яҙығыҙ, улар хәрби яланда бик ҡәҙерле, тыуған яҡтарҙан ышаныс һәм көс биреүсе хаттар яуып торһон ине!

– Борайҙар ниндәй ярҙам күрһәтте? – тигән һорауымдан Вәсил шатланып, йәнләнеп китте.

– Райондан ебәрелгән автомунса барыбыҙ өсөн һәйбәт бүләк булды. Мин дә ялға ҡайтыр алдынан мунса инеп сыктым. Шәп эшләгән егеттәр. Беҙҙе хәстәрләгән оҫталарға, тепловизор ебәргән бөтә райондаштарыма хәрбиҙәр исеменән ҙур рәхмәт! – тине егет.

Ҡорбановтар ғаиләһен, ниндәй генә байрам булмаһын, эш урынынан килеп, ярҙам итеп, балаларына ҡыҫтәнәсен ебәреп торалар. "Геофизиктар – берҙәм халыҡ, ай һайын посылка һалалар, хатта тепловизор алырға 100 мең һум аҡса бирҙеләр", – ти Вәсил.

Хәләл ефете Динара тәү ҡарауға йомшаҡ холоҡло, баҙнатһыҙ тойолһа ла, сабырлығы, үткерлеге һәм ярҙамсыллығы менән таң ҡалдыра. Гуманитар ярҙамды хәрбиҙәргә илтеүҙә беренселәрҙән булып йөрөй.

– Ике бала менән ҡалһам да, яңғыҙлыҡты тоймайбыҙ, бер үтенесебеҙҙе лә иғтибарһыҙ ҡалдырмай етәкселәр. Район хакимиәте утын менән тәьмин итте, Баҡалы ауылы фермеры Фидаил Сахаев ашлыҡ менән, ә Көшкәләү ауыл биләмәһе башлығы Дамир Әхмәтов мунсаға электр сымы һуҙыуҙа ярҙам итте. Гуманитар ярҙам менән юлға сыҡҡас, алдан һөйләшеп, ваҡытын билдәләп, райондан алып барған бөтә посылканы Борай егеттәренең ҡулына тапшырып ҡайтам. Автомунсаны ла шулай итеп тапшырҙыҡ, – тип һөйләне Динара Динарик ҡыҙы.

– Иремде ата-әсәһе ғаиләлә хеҙмәтте һәм бер-береһен яратырға өйрәтеп үҫтергән, шуға күрә унда кешеләргә ярҙам итеү, туғандар менән аралашыу хисләре бик көслө. Иремдең бер туған ағаһы ла үҙ теләге менән хәрби операцияла ҡатнаша. Илебеҙ һағына беренселәрҙән булып баҫҡан иргеттәребеҙ өсөн бик ғорурланабыҙ, – ти йугирҙең тормош иптәше.

"Вәсил – бик хәстәрлекле, балаларын яратҡан атай. Ул эшһеҙ һис ултыра белмәне, уға һәр ваҡыт нимәнелер төҙәтергә йәки яһарға кәрәк. Малайҙар араһында үҫһә лә, уның таҙалыҡты, бөхтәлекте яратыуы билдәле", – ти ауылдаштары. Егеттең оҫта ҡулдары менән иждад ителгән биҙәүестәр, шкатулкалар Ҡорбановтарҙың өйҙәрен йәмләй. Ҡатыны уның ҡул эштәрен күҙ ҡараһындай һаҡлап тота. Матур итеп үрелгән алҡа, муйынсаҡ һәм беләҙектәр күҙҙең яуын алырлыҡ.

Ҡыйыу егеттәребеҙҙең иҫән-һау, еңеү менән ҡайтып, барыбыҙҙы һөйөндөрөүен теләйбеҙ. Ә киләсәктә оҫтаның яңы ҡул эштәрен район күләмендә уҙғарылған күргәҙмәләрҙә күреп, һоҡланырға яҙһын!

## ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ




### Юридик ярҙам – бушлай

Ул яугирҙәргә һәм уларҙың ғаиләһенә күрһәтеләсәк

Башҡортостан депутаттары апрель аҙағындағы пленар ултырышта махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар һәм уларҙың ғаилә ағзаларына бушлай юридик ярҙам күрһәтеүҙе күҙ уңында тотҡан законды беренсе уҡыуҙа ҡабул итергә уйлай. Күрһәтелгән юридик хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр бюджет средстволары иҫәбенә башҡарыласаҡ, ә уларҙы дәүләт юридик бюроһы күрһәтәсәк. Хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм уларҙың ғаилә ағзалары был бюрола консультация ғына түгел, ғаризалар, ялыуҙар һәм үтенестәр тултырғанда да ярҙам аласаҡ.

# Бер ғүмер етмәй икән...

## Сая Фәнис Хөсәйенов хаҡында очерк

✍ Мөнир ҠУНАФИН

– Сентябрь айында батырлыҡтарын ишеттем. Был минең уҡыусым тип ғорурландым. Ғәҙәти ябай ауыл малайы – шундай ҙур герой. Әле лә ғорурланам. Һуңғы тапҡыр 28 сентябрҙә күрештек. Һалдаттарҙы оҙатҡанда, халыҡ араһында күреп ҡалдым да бара башланым. Әллә ҡайҙан танып ҡалып, Айһылыу апа, тип ҡосаҡлап алды. Балаҡайым, тағы китеп бараһың икән, иҫән-һау ғына йөрөп ҡайт инде, тинем. Фотоға төштөк. Үлгән хәбәрен ишетеп... ҡойолоп төштөм, бик ауыр булды. Әле лә ышанғым килмәй.

*... Раббым, Аллам, ожмах ишеген ас*
*Фәнис атлы изге балаға.*
*Күпме генә ғүмер йәшәп китте,*
*Оло даны ҡалды донъяға.*
*Раббым, доға ҡылып һорайым һинән,*
*Сабырлыҡ бир Фәриҙә апайға.*
*Шундай ҡыйыу батыр үҫтергән ул*
*Беҙҙең илгә, бөйөк Ватанға!* – үҙе яҙған шиғырҙы уҡытыусы ҡалтыранып-ҡалтыранып китеп уҡыны.

– Эй, сабырлыҡтар бирһен Хоҙайым, – тип ҡуйҙы Мөнирә апай.

Мин уның янына ултырам. Шулай уҡ яҡшылап танышам.

Мөнирә Муллахмәт ҡыҙы Саяпова. Бер йорт аша күршеһе.

– Олатаһы, өләсәһе менән ут күрше булып йәшәнек. Фәриҙә бәпәй алып ҡайтҡас, барыбыҙ ҙа мөғжизә көткәндәй һөйөндөк. Фәнисте беренсе булып мунсала үҙем йыуындырҙым.

Хәлил абзыйҙың ҡалын тауышы тағы ла һиҫкәндереп ебәрә:

– Тарихи ваҡиға был.

Апай дауам итә:

– Ҡыйыу бул, үткер бул, етеҙ бул, аталы-әсәйле бул, тәүфиҡлы бул, тип изге теләктәр менән йыуындырҙым. – Бер аҙ тынлыҡтан һуң: – Оҙон ғүмерле бул, тип тә теләгәнмендер. Әйткәнмендер-ер, – тип һуҙҙы. – Хоҙайымдың амин тигән сағына тура килмәнеме? Әйләнә лә тулғана, әллә ниҙәр булды шул донъяға... Күҙ алдында үҫте. Беренсе бала булғас, янына йыш инә инек. Үҫә башлағас, беҙҙең балаларға эйәрә башланы. Уның тураһында нимә әйтергә инде, ысынлап та ҡыйыу, үткер, етеҙ, мөләйем, ауыҙы ябылмай ине инде. Ихлас, ярҙамсыл ине, картуф алыу тиһеңме, бесән мәле булһынмы, көрәк йә һәнәк тотоп килә һалып етә. Үҙ балабыҙ кеүек булды инде беҙгә. Шуға бигерәк ауыр. Әрмегә бергә оҙаттыҡ. Ҡаршы алыуҙар...

– Ҡайҙа хеҙмәт иткән ул?

– Абхазияла Цхинвалиҙа хеҙмәт иткән, снайпер ине. – Ирҙәр тауышы тағы ла яңғырап китте. – Унан да дан менән ҡайтҡан ул. Туғыҙ класлы малайға кесе сержант званиеһын юҡҡа бирмәгәндәр инде ул. Әрменән ҡайтҡас СПТУ-ны бөтөрҙө. Характеристикаһы бик һәйбәт ине.

– Никахтарында булдыҡ, бер ваҡиға ла беҙҙе ситләп үтмәне. Бергә йәшәнек. Эй, йәшәүгә өмөтө ҙур ине. Өй ҙә карайым, беренсеһе йәшлек хатаһы булдымы, яңынан



көләш алам, донъя көтәм, тигән ышанысы ҙур ине...

Мөнирә апай Фәнисте яратып күп һөйләне. Улар араһында хәтерҙә ҡалырҙай, киләсәктә егетте ҙур батырлыҡтарға алып килер бер һәләтен телгә алды: техника телен аңлауы.

– Уның иҫ киткес бер шауҡымы, тылсым көсө бар инеме икән, оҫталыҡмы, белмәйем, ул һис ҡуҙғалмаҫ тракторҙы ла көйләп, терелтеп алып китер ине. Матаймы ул, трактормы, машинамы, ултырып сыға ла китә ине. Техниканы ныҡ белде, һис тә аптыраманы. Ремонтларға булһа ла, телен белә, асҡысын таба ине. Колхозда комбайнда ла, тракторҙа ла эшләне.

Юҡтан ғына дошман БТР-ын йүгәнләмәгән икән, тигән уй үтә башымдан.

Хәлил абзый менән танышам. Егет тураһында нимә беләһең, һөйләйһеңме, ағай, тигәйнем, ул:

– Бында түгел, хәҙер МТМ-ға менгәс, унда булыр "мужской разговор". Ҡатынҡыҙҙар араһында түгел, – тигәс, һағайып киттем. Фәнис тураһында төрлө хәбәрҙәр йөрөнө, интернетта ла, былай ҙа: төрмәлә ултырған, шуға һуғышҡа ҡасҡан, герой исемен шуға бирмәйҙәр...

– Ярай, – тим, – ярай, ирҙәрсә һөйләшербеҙ.

Фәриҙә бушап тағы беҙҙең янға килеп ултырҙы. Телевизор тейешле каналдарға барып тоташты ахыры, унда йәнһүрәт башланды. Әминә менән Ынйы зәңгәр экранға текләлды. Эй, сабый, диванға ултырып, бар донъяһын онотто. Беҙҙә – башҡа хәстәр, башҡа хәсрәттәр.

– Мин дә интернеттан, башҡа сығанаҡтарҙан Фәнис Хөсәйеновҡа ҡағылышлы яңылыҡтарҙы күҙәтеп барҙым. Уның фотоһына ҡарап, былдай нур һибеп торған ҡояштай ир һис тә үлмәҫ, уға пуля үҙе тейергә оялыр, тип фаразланым. Беҙҙең еңеүҙең, беҙҙең эштең хаҡлы икәнен аңғартҡан бер символ кеүек ине ул миңә, – тинем барыбыҙ ҙа тынысланғас.

– Беҙ ҙә ышанманыҡ. Уны уҡ алыр кеүек түгел ине. Ҡайтып кергәнсе ышанмаҫыҡ, беребеҙ ҙә, – Мөнирә апай тағы тәҙрәгә ҡарап алды.

– Әллә ул булманы микән. Айһылыу Мөҙәрисовна менән әле фотоларын яҡынайтып ҡарап ултырҙыҡ. Миңә ул яҡта түгел кеүек. – Эй, әсә. Һаман ышана, һаман мөғжизә көтә.

– Беләгенә "Наилә" тип яҙылған, ныҡлап ҡараныҡ, тинеләр бит, – Мөнирә апай, ғәҙәттәгесә, тын ҡала алманы. Шулайҙыр ҙа бит, их, күрше апай, кешене һаман шул өмөт йәшәтә бит.

– Йөрәк яһап, ҡатынының исемен яҙғайны. Яратышып ҡауышҡайнылар ҙа... Таныр өсөн билдә булып сыҡты.

Ысынлап та, әрменән ҡайтҡас, Наилә исемле ҡыҙ менән танышып, яратышып өйләнешәләр. Илмәк ауылында йәшәйҙәр. Әминә исемле ҡыҙҙары тыуа. Тик... юлдары айырыла йәштәрҙең, хәҙер ҡатын башҡа ирҙә. Мөнәсәбәттәре бик һәйбәт, Фәриҙә киленен яратып һөйләй: "Әни тип кенә тора. Шылтырата, хәлде белә. Әни, үҙеңде ҡара, һин миңә, Әминәгә кәрәкһең әле, тигән була. Йыназа ваҡытында өс көн бында булды. Йүнле йоҡо ла эләкмәне. Рәхсәт иткәс, иптәше һәйбәттер, тип ҡуйҙым инде".

– Үҙем күрҙем, аурынында ГРУ билдәһе ҡара ябалаҡ төшөрөлгәйне, Фәриҙә, икеләнеп ултыраһы түгел, – Хәлил ағай шым ғына әйтеп ҡуйҙы.

Мөнирә апай Фәнисте күҙ алдына килтереп ултырҙымы:

– Ул ана шул ярғанат кеүек етеҙ булды. Ултырып һөйләшмәне, тик тора алмай торғайны. Беҙгә лә биш минутҡа ғына инеп сыҡты. Һәр саҡ ҡабаланды. Ғүмере ҡыҫҡа булырын тойғандыр, – тип ҡуйҙы.

– Йәне бигерәк тынғыһыҙ ине. Беҙҙә лә өҫтәл артында тыныс ҡына ултырып ашай алмай ине.

Үҙ-ара һөйләшеп, иҫкә алып ултырыу шулай ҙа күңелде тынысландыра ла икән. Фәриҙә апайҙың күҙҙәре бер сама янып киткәндәй булды. Юлдан килгәндәр, сәй эсерәйек әле, тип бер нисә тапҡыр ҡалҡынды. Сәйенә өлгөрөрбеҙ, тип туктатып ҡуям. Йәнле әңгәмәне һис тә өҙгөм килмәй, Фәнис хаҡында, киреһенсә, күберәк белгем килә.

– Видеоларын ҡарай инегеҙме?

– Тәүҙә миңә күрһәтмәнеләр ҙә. Һуңынан үҙе беренсе барыуынан ҡайтҡас ҡына, кемдер анау атышҡан видеоһын күрһәтте. Аллам, Хоҙайым, әллә ысынлап унда атышып ятаһыңдыр, тинем аптырап. Юҡ, әнекәү, мин мультикта йөрөнөм, анекдот тыңлап шунда, тип көлә. – Әсә кеше, ниһайәт, йылмайып ебәргән булды. – Үҙе миңә видеофәләндәрен күрһәтмәне. Бына шундай ерҙән иҫән ҡайттым, тине генә. Яу тураһында ла һөйләмәне. Мин дә алай һорашманым.

Мөнирә апайҙың да йөҙө теремекләнеп китте.

– Минең малай ҙа, Фәнистең әсәһенә күрһәтмә, тине. Ул БТР тигәнендә йөрөгәнен генә күрһәтте. Эсендә, бик майламағандар быны, майлап алаһы бар әле, тип ултыра ине. Ул БТР эсендә ултыра, уны төшөрәләр. Ҡурҡыныһыраҡтарын күрһәтмәй ине. Бер "Жигули"ҙа китеп бара. Үҙе көйләп алғанмы инде униһын. Унда ла машиналарҙы ремонтлап хитланған ҡый.

– Шуныһы үкенес, ҡотҡарған генералын төшөргән видеоһын юғалттым. Был баланы нисек таптың, ҡайҙан таптың, был бит кеше кеүек түгел, кеше-үрмәксе, тип шаҡ ҡатып илап ултыра инде ҡотҡарған генералы.

– Һеҙ уны күрҙегеҙме ни?

– Телефонымда бар ине. Видеола Фәнисте оҙатырға әҙерләнәләр ине унда. Үҙҙәренсә өҫтәл әҙерләгән булғандар.

– Генералдың исем-шәрифе билдәлеме ул?

– Кем генә белһен инде. Ана шул генералдың видеоһы бар ине. Хәҙер юҡ. Әллә Фәнис үҙе алып ташланы, әллә үҙем телефондың хәтере тулып киткәс, таҙартҡанмын. Хәҙер үҙенең телефонын көтәбеҙ инде.

– Телефон, әйберҙәре ҡайтып етмәгән инде?

– Юҡ. Ҡайтып етерме инде. Паспорты ла юҡ әле.

Түҙмәне, юлдан килгән кешеләрҙе тотмайыҡ әле, һүҙ менән туйындырабыҙ әтеү, тип мейес артындағы бүлеккән кухняға инеп китте Фәриҙә. Тиҙ үк өҫтәл әҙерләне. Беҙҙе саҡырҙы. Хәлил ағай тартырға сыҡты, уҡытыусы менән күрше, беҙ һуңынан ултырырбыҙ, тип беҙгә ҡамасауламаҫҡа булдылар. Тамаҡта – төйөр, ашарға дәрт булмаһа ла, ризыҡтан оло булып, әсә кешенең һүҙен йығып булмай. Эй, әсә кешенең наҙлы хәстәре, әсә ҡулынан һалған сәй. Шунан да ҡәҙерле ни бар донъяла. Өҫтәл һыйҙан тулы ине. Фәнистең әсенетеһен уҡытҡан ризыҡтар ҙа булғандыр. Билмән ҡуя һалды. Фәнис ошо өҫтәл артына ултырып ашағандыр.

(Дауамы. Башы 25, 27, 29-сы һандарҙа).

## ХАТ ЮЛҒА САҠЫРА



### Пенсияны почта таратасаҡ

Федераль Совет быны хупланы

Федерация Советы Рәсәй Почтаһының пенсияларҙы ҡулаҡса менән таратыуға айырым хоҡуғы тураһындағы законды хупланы. Үҙгәрештәргә ярашлы, страховка пенсияларын кредит ойошмалары аша ҡулаҡсаһыҙ таратыу, ә ҡулаҡса түләү һәм уларҙы таратыу федераль почта элемтәһе ойошмалары аша ғына гәмәлгә ашырыу күҙаллана, тип билдәләй сенаторҙар.

# “Беҙҙә почта эшләмәй”

## Районда бер-бер артлы почта бүлексәләре ябылған

✍ Рәмилә МУСИНА

**“Рәсәй почтаһы” 2023 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһын рәсми рәүештә асыҡ тип иғлан итте. Ул 1 апрелдән 30 июнгә тиклем дауам итә. Әммә бөгөн Белорет районының ҡайһы бер ауылдары ваҡытлы матбуғатҡа яҙылыуҙан мәхрүм, сөнки уларҙа күҙ терәп торған почта бүлексәләрен япҡандар, ҡайһы берҙәрендә хатта почтальондар ҙа юҡ. Шуға ла халыҡ ҡайҙа барып яҙылырға һәм кем гәзит-журналды алып килерен белмәй.**

### Йөйәктә почта бүлексәһе эшләмәй

“Почта ауыл ерендә бик кәрәк. Телефон, электр уты, һалымды күптәр почта аша түләй. Гәзит-журналдарға яҙылалар ине, быйыл яҙылыусы юҡ кимәлендә. Посылка, хат ебәреү өсөн 150 километр юл үтеп, Белорет ҡалаһына барырға кәрәк. Почта хеҙмәткәрҙәренең хеҙмәт хаҡы бәләкәй тип, унда эшкә барырға теләүселәр юҡ. Шулай уҡ почта бүлексәһендәге файҙаланыу ваҡыты үткән әйберҙәр менән тулған магазиндар ҙа беҙгә кәрәкмәй. Хәҙер элекке кеүек түгел, ауыл һайын кибет бар.

Гәзиттәрҙе ауыл почтальоны йыш ҡына адрес буйынса килтереп еткермәй тип, һуңғы йылдарҙа мин генә түгел, күптәр яҙылыуҙан баш тартты. “Башҡортостан”, “Йәшлек”, “Урал”, “Диләфрүз”, “Өмет”, “Ағиҙел”, “Башҡортостан ҡыҙы”, “Шоңҡар” һәм башҡа баҫмаларҙы алдырҙым. Быйыл “Ағиҙел” журналына һәм “Йәшлек” гәзитенә яҙылғайным...” – тип хәбәр итте Хәлиса Ғәлләмова.

Урындағы хәл менән яҡындан танышыу маҡсатында Белорет районының Йөйәк ауылына юлландыҡ. Беҙ барғанда, ысынлап та, Йөйәк почтаһында йоҙаҡ элеүле тора ине. Хәлгә асыҡлыҡ индереү ниәтендә ауыл хакимиәтенә барҙыҡ. Хакимиәт башлығы Рифат Ғилманов белдереүенсә, Йөйәк ауылы биләмәһендә, ошондай һәр кемгә кәрәкле шарттар булмағас, йәштәр күпләп ситкә күсеп китә башлаған.

– Беҙҙең Йөйәк ауылы биләмәһендә былтырғы көҙҙә 1210 кеше иҫәпләнһә, әле 1116 кеше. Ярты йыл эсендә 50 кеше күсеп китте, барыһы ла тиерлек йәш ғаиләләр. Әле Ғәбдәк ауылынан тағы өс ғаилә ситкә китергә йыйына. Улар: “Ауылдың киләсәге юҡ, газ да үткәрмәйҙәр, почта ла эшләмәй”, – тип аңлата үҙҙәренең был аҙымын. Ауылда йәшәгән ҡатындар кәрәк-яраҡты, косметиканы, кейемде почта аша алдырта ине. Рәйсә Шәйхислам ҡыҙы Хәсәнова оҙаҡ йылдар почта таратты. Хаҡлы ялда булһа ла эшләне. Әле лә почта бүлексәһе яңынан асылһа, эшләргә риза, – ти ул.

“Ә ниңә ауылда почта бүлексәһе ябылды?” – тип һораныҡ, мәсьәләне асыҡлау маҡсатында.

– Ауылдың почта бүлексәһе начальнигы Ғәбдәктән йөрөп эшләй ине, китапханасы булып күсте. Был өстән көтөп торған кеүек кенә булды, беҙ хатта белмәй ҙә ҡалдыҡ. Бүлексә ябылыр алдынан Белорет почтамтынан: “Почта бүлексәһе начальнигы вазифаһына кеше эҙләгеҙ”, – тигән йөкмәткеле иҫкәртеү хаты килеп төштө.

Эш хаҡы ярты оклад тәшкил итә, шуға ла кеше килмәй. Эшкә урынлашырға теләгән ике кешене алманылар, конкурстан үткәрмәнеләр. Әле Ғәбдәктә мәктәп, китапхана һәм биш-алты кеше генә гәзит алдыра, Йөйәктә унға яҡын кеше матбуғат баҫмаһына яҙылған, – тине ауыл хакимиәте башлығы.

Беҙ быға тиклем почта бүлексәһе начальнигы булып эшләгән Нурсилә Закирова менән дә аралаштыҡ.

– Мин Ғәбдәк ауылынан һигеҙ саҡрым юл үтеп, Йөйәккә эшкә йөрөнөм, 0,5 ставка ғына түләнеләр. Беҙҙә ике почтальон эшләй ине, улар ҙа эштән китте. Йөйәк почтальоны ғаиләһе менән Өфөгә күсте. Рәйсә апай, Йөйәк ауылында ла почтальон булмағас, “0,5 ставкаға – алты мең һумға ике ауылды хеҙмәтләндермәйем” тип, башҡаса эшкә сыҡманы. Уларға гәзит-журнал, хат ташыуҙан тыш, әйбер һатырға ҡушалар. 10 килограммлыҡ он, консервалар һәм башҡа әйберҙәрҙе урам буйлап йөрөп һатырға мәжбүрҙәр. Мин уларҙы йәлләйем. Почта түгел, ә магазинға әйләнде. Страховкалау хеҙмәтен дә ҡушалар. Халыҡ ризалашмай, шуға ла үҙебеҙҙең кеҫәнән сығарып түләп, план үтәргә тырышабыҙ. Тауар һатҡан килем дә окладҡа ҡушыла ине. Етәкселәр беҙҙән иң тәүҙә тауар һатыуҙы талап итте. Гәзит-журналдарға яҙылыуҙы былай ҙа ойоштора инек. Элек һәр ғаилә матбуғат баҫмаларын алдыртты, бөгөн хатта район гәзите “Урал”ды ла уҡый алмайҙар, – тине Нурсилә Рәйес ҡыҙы.

Шулай итеп, район үҙәгенән 150 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан ике ауыл инде биш ай почтаһыҙ көн күрә. Уның эшләмәүе халыҡтың тормошон ауырлаштырған: кешеләр гәзит-журнал уҡыуҙан мәхрүм, шулай уҡ хат, посылка алыу ҙа мең бәләгә әйләнгән.

Ғөмүмән, “Белорет почтамты” хат, посылка ташыу кеүек хеҙмәттәр күрһәтеүгә аҡса алһа ла, тәғәйен адресатҡа тапшырыу



Йөйәк ауылы хакимиәте башлығы Рифат Ғилмановтың бүлмәһендә хаттар таратылмай ята.

кәрәклегә тураһында онотҡан. Шулай булмаһа, хат, квитанцияларҙы, белдереү ҡағыҙҙарын беренсе осраған ергә ҡалдырып китмәҫтәр ине. Мәғлүм булыуынса, Йөйәк ауылына почта машинаһы килә лә барлыҡ корреспонденцияларҙы, хаттарҙы, квитанцияларҙы ауыл хакимиәтендә ҡалдырып китә. Ә ауыл хакимиәте уны ҡайҙа итергә лә белмәй, шуға ла тау булып йыйылып киткән. Аптыраған көндән, таратыу өсөн магазиндарға алып барып ҡалдыралар икән.

– Беҙ өй һайын йөрөп, почта тарата алмайбыҙ бит. Беҙҙең бурысҡа инмәй, әммә аптыраған көндән ошондай аҙымға барабыҙ. Ғәбдәктә лә магазиндарға, мәктәпкә ҡалдырабыҙ, – ти Рифат Ғилманов.

Ауыл хакимиәтенең эштәр идарасыһы Әлфиә Баһауетдинова ла һүҙгә ҡушылды.

– Ауылдың ватсаптағы төркөмөнә “хат, квитанцияларҙы килеп алығыҙ” тип иғлан һалабыҙ. Халыҡ беҙҙе быныһ өсөн әрләй. Пенсионерҙар һалым, электр уты өсөн түләргә Асы йәки Инйәр почта бүлексәләренә йөрөй. Почта машинаһы ҡайһы ваҡытта посылкаларҙы ла, хаттарҙы ла Асы бүлексәһенә ҡалдырып китә. Унда тимер юлы аша барһаң, 20 километр үтергә кәрәк, ә автомобилдә – 70 километр. “Белорет почтамты”нан беҙгә: “Почта хеҙмәткәрҙәренә кандидат эҙләгеҙ” тигән яуап килә. Әммә алты мең һум эш хаҡына кеше табыуы ҡыйын, беҙ ебәргән кешеләрҙе алманылар. Ауыл халҡы, ул аҡсаға йөрөгәнсе, “Асы” шифаханаһында эшләп, айына 25 мең һум хеҙмәт хаҡы алам, ти. Махсус хәрби операциянан килгән хаттарҙы үҙебеҙ шунда уҡ алып барып тапшырабыҙ. Магазин хужаларына рәхмәт, тыңлайҙар, квитанцияларҙы таратыуҙа ярҙам итәләр, – ти Әлфиә Фәнил ҡыҙы.

Беҙ ауылдың ағинәйе Гөлсирә Салауатованың был хәлгә бәйле фекерен дә ишеттек.

– Элек почтальондар беҙҙе өгөтләп, гәзит-журналдарға яҙҙырта ине. “Урал” гәзитен, “Башҡортостан ҡыҙы” журналын һәм башҡа баҫмаларҙы алдырҙым. Хәҙер матбуғатҡа яҙҙыртыусы юҡ. Мин “Урал” гәзите аша район тормошо менән танышып бара инем... Почтаһыҙ ауылды күҙ алдына ла килтереүе ҡыйын. Уның эшләмәүе арҡаһында беҙҙең кеүек оло кешеләр ыҙалай, – тине ул.

### Бында кешеләрҙең хоҡуғын боҙоуға юл ҡуйыла

Дөрөҫөн генә әйткәндә, Йөйәк ауыл хакимиәтендә хаттарҙың, квитанцияларҙың өйөлөп ятыуын күреп, аптырауға ҡалдыҡ. Улар араһында судка саҡырыу, суд приставтарынан килгән хаттар ҙа бар. Белеүебеҙсә, бындай рәсми хаттарҙы “заказлы” итеп ебәрәләр, йәғни почта уларҙы тәғәйен кешенең ҡулына алып барып тапшырырға тейеш, ә бында ҡайҙа етте шунда ташлап китәләр.

Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенең 2000 йылдың 26 сентябрендәге “Почта элемтәһе хеҙмәттәре күрһәтеү ҡағиҙәләрен раҫлау тураһындағы” 725-се ҡарарында почтаны килтереү һәм тапшырыу, почта ебәреүҙәре һәм почта күсереүҙәре хеҙмәттәре нисек күрһәтелергә тейешлеге хаҡында аныҡ яҙылған.

“II. Почта ебәреүҙәрен һәм почта күсереүҙәрен килтереү һәм тапшырыу

95. Почта ебәреүҙәре һәм почта күсереүҙәре өйгә килтерелә йәки почта элемтәһе объекттарында бирелә.

96. Йәшәү урыны буйынса йортҡа, граждандарға тәғәйен адрестарға килтерелергә тейеш:

а) почта карточкалары, ябай һәм заказлы хаттар һәм бандеролдәр, почта ебәреүҙәре һәм почта күсереүҙәре тапшырыу тураһында белдереүҙәр;

б) түләүле килтереү менән ҡабул ителгән почта күсереүҙәре, хаттар һәм иғлан ителгән ҡиммәтле бандеролдәр;

в) теркәлгән почта ебәреүҙәре һәм почта күсереүҙәре тураһында белдереүҙәр;

г) экспресс-почтаның почта ебәреүҙәре;

д) электрон почта ебәреү.



Илдар Аҡъюлов фотолары.

Инйәр ауылындағы матур почта бүлексәһе лә ябылырмы?

ХАТ ЮЛҒА САҠЫРА



# Бүлексәләр яңырасаҡ

## Ике миллиард һум йүнәлтелә

Башҡортостанда "Рәсәй Почтаһы"ның 1030 ауыл бүлексәһе эшләй, улар республиканың 1,5 миллион кешеһен хеҙмәтләндерә. Ил Президенты Указына ярашлы, 2025 йылға тиклем Башҡортостанда 786 почта бүлексәһе ремонтланасаҡ. Инвестицияларҙың дөйөм суммаһы – ике миллиард һум. Ошо хаҡта "Рәсәй почтаһы" компанияһының генераль директоры белдерҙе.



Инйәр ауылы биләмәһе хакимиәте башлығы Алена Кучербаева.



Айһылыу һәм Зәки Сәмсетдиновтар.



Әҙекәй ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Нәжиә Вәлиева.

97. Почта шкафтары ячейкаларына һәм почта абонент йәшниктәренә, йорттағы почта йәшниктәренә төшөрөлә:

а) ябай хаттар;

б) ябай почта карточкалары;

в) ябай бандеролдәр;

г) почта ебәреүҙәре һәм почта күсереүҙәре тапшырыу тураһында белдереүҙәр;

д) теркәлгән почта ебәреүҙәре һәм почта күсереүҙәре тураһында беренсел белдереүҙәр;

е) ябай почта ебәреүҙәре тураһында тәүге хәбәрҙәр, уларҙың ҙурлығы уларҙы абонент почта шкафтары ячейкаларына һәм почта абонент йәшниктәренә төшөрөргә мөмкинлек бирмәй.

98. Абонент почта шкафы йәки почта йәшнигe боҙолған осракта, почта ебәреүҙәренең һаҡланыуына йөгонто яһаһа, уларға хаттар төшөрөлмәй, ә адресатка уны килтереү мөмкин түгеллеге тураһында хәбәр ителә. Шул уҡ ваҡытта хат-хәбәрҙәр почта элемтәһе объектында адресатка бирелә.

## Инйәрҙәр ҙә почтаһыҙ ҡалырмы?

Инйәр ауыл биләмәһенә 20 ауыл ҡарай, һәм улар төрлө яҡҡа таралып ултырған. Инйәр ауылындағы почта бүлексәһенә лә бөгөн ябылыу хәүефе янай, сөнки эшләргә кеше юҡ. Хәлгә асыҡлыҡ индереү маҡсатында, Инйәр ауылы биләмәһе хакимиәте башлығы Алена Кучербаева менән осраштыҡ.

– Почта бүлексәһе мөдиренә – 25 – 30 мең һум, операторға 20 – 25 мең һум эш хаҡы тәкдим итәләр. Әммә өҫтән ҡуйылған планды үтәмәһәләр, уларҙың эш хаҡынан тотоп алып ҡалалар. Әле беҙгә Межгорье ҡалаһынан оператор аҙнаһына ике тапҡыр килеп, шаршамбы һәм йома көндәрендә 10.00 сәғәттән 14.00 сәғәткә тиклем халыҡтан түләүҙәрҙе ҡабул итә, посылкалар тарата. Бөгөн өс почтальон эшләй. Минималь эш хаҡын арттыралар, ә уларҙың окладтары элеккесә ҡала. Күптән инде тариф сеткаларын яңынан ҡарағандары юҡ. Почтаның ошондай хәлдә ҡалыуынан ололар ныҡ интегә. Улар бит бөтә түләүҙәрҙе почта аша атҡара ине, шулай уҡ гәзит-журналдарға ла яҙылдылар.

Бөгөн Инйәр ауыл почта бүлексәһенә начальник һәм оператор кәрәк, шулай уҡ почтальондар ҙа етмәй. Почтальондар табылыр ине, әгәр эш хаҡтары лайыҡлы булһа.

Әле Инйәр ауыл биләмәһендә 6190 кеше йәшәй, шуларҙың 4330-ы – Инйәр ауылында. Ошондай ҙур ауылда почта булмауын күҙ алдына килтереүе лә ауыр, – тине ул.

Почтаға инеп сығайыҡ тигәйнек, ысынлап та, ул бикле булып сыҡты.

## Аҙналыла ике йыл почтальон таба алмайҙар

Беҙгә Аҙналы ауылынан ветеран уҡытыусы Айһылыу Сәмсетдинова: "Почта таратмайҙар, хат, гәзит-журналдарҙы ауыл магазинына ҡалдырып китәләр, матбуғат баҫмаларын ваҡытында уҡый алмайбыҙ. Ике йыл ауылда почтальонка юҡ", – тип шылтыратҡайны. Шуға күрә Аҙналы ауылына ла барҙыҡ.

Аҙналы – райондың ҙур башҡорт ауылдарының береһе. Бында тырыш, сәмсел, уҡымышлы халыҡ йәшәй, элек һәр ваҡыт гәзит-журналдарға әүҙем яҙылдылар. Әммә ике йыл почтальон булмау сәбәпле, улар ҙа яратып уҡыған "Урал" район гәзитенә, республика баҫмаларына яҙыла алмай.

Айһылыу һәм Зәки Сәмсетдиновтар – хаҡлы ялдағы уҡытыусылар. Улар быға тиклем гәзит-журналдан айырылмаған.

– Мин былтыр уҡ һеҙгә гәзит таратыу мәсьәләһе буйынса шылтыраттым. Өфөгә лә барырға иткәйнем. Ғүмер буйы гәзит-журналға яҙылдыҡ. Нисек инде гәзитһеҙ йәшәргә була?! Быға тиклем "Башҡортостан", "Урал", "Йәшлек" гәзиттәренән, "Бәрәкәт", "Башҡортостан ҡыҙы" журналдарынан өҙөлмәнек. Былтыр ҙа яҙылдым, гәзиттәремде магазинда ҡалдырып китәләр, ә мин көтәм. Гәзит алмағас, "Белорет почтамты" етәкселәренә барҙым, йүнләп һөйләшмәнеләр ҙә. Әҙекәйгә лә барҙым, шулай итеп, гәзиттәремдең саҡ осона сыҡтым. Баҡтиһәң, магазинға ҡалдырып киткән гәзитте бөтөнләй икенсе кеше алып ҡайтып уҡып йөрөгән. Былтыр "Урал" гәзитенә редакцияға барып яҙылдым. Гәзит-журналдарҙы ташымағастар, быйыл яҙылманыҡ. Мәҫәлән, әле мин "Башҡортостан" гәзитенең йома һанына яҙылыр инем. Шул тиклем һәйбәт гәзит, яратып уҡый инем. Ялға ҡайтҡан балалар ҙа: "Әсәй, ниңә гәзит алдырмайһығыҙ?" – тип аптыраны. Хәлде аңлатып бирҙек, – тине Айһылыу Шәһивәлей ҡыҙы.

Бында инде ике йыл ауыл почтальонһыҙ интегә. Уға тиклем почтальон булып эшләгән Люция Нухова: "Эш хаҡы бәләкәй, уға ғаиләмде ҡарай алмайым. Был аҡсаға итек тә килмәй, ә ҡыҙҙы уҡытырға кәрәк", – тип икенсе эшкә күскән, әле вахта ысулы менән Мәскәүгә йөрөй.

– Күпме кеше эҙләп ҡараныҡ, бөтәһе лә "эш хаҡы бәләкәй" тип ризалашмай. Ысынлап та 0,5 ставкаға кем йөрөһөн инде?! Беҙгә гәзит-журналдарҙы ваҡытында, көнөндә алып уҡыр өсөн почтаның яҡшы эшләүе кәрәк. Гәзит "яңы" булһын, иҫкергән яңылыҡтың ҡыҙығы бөтә. Һалым, электр утына һәм газға квитанциялар, судҡа саҡырыу хаттары тейешле адресатҡа тапшырылырға тейеш, ә магазинда һәм башҡа урында ҡалдырылыуы башҡа һыймаҫлыҡ хәл.

"Әйбер һатырға бирәләр, уны һата алмаһаҡ, эш хаҡынан тоталар. Уны ҡалай итеп түләйһең..." тип, хәҙер кеше почтальон булырға ҡурҡып тора", – тип һөйләне Сәмсетдиновтар.

Ошондай уҡ фекерҙе башҡа ауылдаштарҙан да ишеттек.

Әҙекәй ауылында ике йыл элек почта бүлексәһен япҡандар. Уның сәбәптәрен асыҡлау маҡсатында Әҙекәй ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Нәжиә Вәлиева менән дә осраштыҡ.

– Һалым квитанцияларын үҙебеҙ таратабыҙ йәки магазинға һалабыҙ. Әҙекәйҙә почта бүлексәһе ябылғанға өс йыл. Беҙ "Белорет почтамты" етәкселегенә мәсьәләне ыңғай хәл итеүҙәрен һорап, күп тапҡырҙар мөрәжәғәт иттек, әммә улар рәсми яуап менән генә сикләнә, мәсьәлә шул килеш ҡала. Почта бүлексәһенең һәйбәт бинаһы бар, ул йылы, газ тоташтырылған, электр уты ла бар, кеше күп йөрөгән урында урынлашҡан.

Беҙҙә почта бүлексәһе начальниктары йыш алмашынды, сөнки түҙеп торғоһоҙ эш талаптары ҡуйыла. Мәҫәлән, Ҡоҙғон-Әхмәр ауылының почтальоны йәйге эҫе көндә ауыл буйлап тундырылған билмән һатып йөрөнө, өҫтән ҡушалар. Пенсия таратҡанда әйбер һатырға йөкләмә бирелгән, тик ул тауарҙарҙың хаҡы бик ҡиммәт.

Ике-өс йыл эшкә урынлашырға теләүселәр булманы. Аптырағас, үҙебеҙҙең ауыл хакимиәтендә эшләп йөрөгән белгесте "ҡоҙаланыҡ". Ризалашты, тик уны эшкә алманылар – конкурстан үтмәне. Боғанаҡ ауылынан бер ҡатын эшкә урынлашырға теләне, әммә уны ла ҡабул итмәнеләр. Беҙгә почтамт етәкселеге: "Кандидатуралар эҙләгеҙ", – ти. Беҙ почта бүлексәһе начальнигы урынына кеше эҙләйбеҙ, тәҡдим итәбеҙ, тик уларҙы кире бороп ҡайтаралар. Бөгөн почта хеҙмәткәрҙәре алдына ҡуйылған талаптар күптәрҙе өркөтә, "Ас тамағым, тыныс ҡолағым" тип, унда барырға ризалашмайҙар.

Элек Әҙекәй почта бүлексәһендә бер начальник, өс почтальон эшләне, хәҙер берәү генә ҡалды. Ул Әҙекәй һәм Ҡоҙғон-Әхмәр ауылдарын хеҙмәтләндерә, эш күләме бик ҙур. Әле Аҙналы, Ҡаҙыш, Черновка ауылдарында почтальон юҡ. Боғанаҡта әлегә почта бүлексәһе һаҡланып ҡалды.

Иң насары – халыҡ гәзит-журналдар алдыра алмай. Оло быуын гәзиткә өйрәнгән. Улар "Башҡортостан", "Йәшлек", "Башҡортостан ҡыҙы", "Аманат", "Йәншишмә" кеүек республика баҫмаларын яратып уҡый ине. Хәҙер ике-өс йортҡа ғына гәзит-журнал килә.

Почтаның эшләмәүе тағы ла бер насар эҙемтәгә илтә – халыҡҡа мәғлүмәт килмәй, улар деградацияға бирелә. Социаль селтәр аша таратылған мәғлүмәт халыҡты дөрөҫ мәғлүмәт менән тәьмин итә алмай, – ти Нәжиә Динислам ҡыҙы.

Шулай уҡ ауыл хакимиәтенән хеҙмәткәр ҙә гәзиткә яҙылып, бер дананы ла ҡулына алмауын белдерҙе. Ҡоҙғон-Әхмәр ауылы почтальоны 12 километр алыҫлыҡта ятҡан Тимер юл ауылынан почта әйберҙәрен барып ала.

"Белдереү ҡағыҙҙары, судҡа саҡырыу хаттары адресаттарға ваҡытында барып етмәй. Һөҙөмтәлә кешеләр судҡа ла ваҡытында бара алмай. Оло кешеләр аҡса тотоп: "Нисек электр утына, газға түләйек?" – тип хакимиәткә килә. Ауыл биләмәһендә йәшәгән халыҡтың 80 процентын пенсионерҙар тәшкил итә. Шуға ла почтаның эшләмәүе беҙҙең ауылдар тормошон тағы ла ҡатмарлаштырҙы ғына. Беҙҙә әүҙем уҡыусылар бар, улар: "Ҡайҙа почтальон? Беҙҙең гәзит уҡыйбыҙ килә", – тип дәғүәләрен белдерә", – тине Нәжиә Динислам ҡыҙы.

Абҙаҡ ауылынан да "Башҡортостан" гәзитенә яҙылған уҡыусыбыҙ йыл башынан бер гәзит тә алмауы тураһында белдереп шылтыратты.

Мәғлүм булыуынса, Белорет районында һуңғы йылдарҙа Әҙекәй, Йәйәк, Үҙәнбаш, Тирлән, Сосновка, Николаевка, Абҙаҡ ауылдарында почта бүлексәләре ябылған. Шулай уҡ Белорет почтамтына ҡараған Учалы районында ла ошондай хәл күҙәтелә. Почта бүлексәһендә эшләгән хеҙмәткәрҙәр: "Элек беҙҙән гел подписка талап иттеләр, хәҙер почтальондарҙан әйбер һатыуҙы ғына һорайҙар", – ти.

Халыҡ иһә: "Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла бындай хәл булмаған почта эшләгән. Ә бөгөн ниндәй көнгә ҡалдыҡ?" – ти. Аптырарлыҡ шул...

Әйтергә кәрәк, ҙур ҡалаларҙа ла гәзит-журналдарҙы ваҡытында таратыу проблемаһы бар. Мәҫәлән, Өфө эргәһендәге Аҡбирҙе ауылында (Иглин районына ҡарай) "Башҡортостан" гәзитенә яҙылып, бер һанын да алмаған уҡыусыларыбыҙ булды. Был күренештәр почта системаһының көрсөккә төгәрәүе тураһында һөйләйме? Әгәр почтальондарҙың хеҙмәте лайыҡлы баһаланмаһа, тиҙҙән унда эшләргә кеше лә ҡалмаясаҡ. Ғөмүмән, был мәсьәлә хәл итеүҙе талап итә.

## 21 АПРЕЛЬ – УРЫНДАҒЫ ҮҘИДАРА ОРГАНДАРЫ ХЕҘМӘТКӘРҘӘРЕ КӨНӨ



### 185 объект ҡатнаша

Яңы киңлектәргә тауыш бирегеҙ: https://clck.ru/3495Mb

Дүртөйләлә – Мусин скверы, Учалыла – стела янында яңыртылған майҙан, Туймазыла – яңы юл түшәлгән һәм ял итеү өсөн уңайлы эскәмйәләр ҡуйылған Ленин проспекты, Йәрмәкәйҙә – спорт майҙансығы, аттракциондар һәм юл хәрәкәте ҡағиҙәләре менән танышыу өсөн балалар автоҡаласығы, мәҙәниәт һәм ял паркы. Был заманса киңлектәр Башҡортостанда “Торлаҡ һәм ҡала мөхите” милли проектының “Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу” федераль проекты сиктәрендә былтыр барлыҡҡа килде.

# Эше менән абруй ҡаҙанған

## Яугир-интернационалист илһөйәрлекте тәрбиәләүгә тос өлөш индерә

✍ Рәмилә МУСИНА

**Сираттағы сәфәребеҙ Башҡортостандың иң матур райондарының береһе – Ҡариҙелгә булды. Унда беҙгә Ватанды һаҡлаусылар көнө айҡанлы “Башҡортостан” гәзите үткәргән “Ветерандар ойошмаһының иң яҡшы ойоштороусыһы” конкурсында беренсе урын яулаған Рәмил Вәлинуров менән яҡындан танышырға насип итте.**



Рәмил Карам улы Вәлинуров 1968 йылда Ҡариҙел районының Тат-Ҡоҙаш ауылында тыуған. Александровка, Кирҙә ауылдары мәктәптәрендә белем ала. Урта мәктәпте тамамлағас, 1986 йылдың майында хәрби хеҙмәткә алына. Ошо йылдың октябрендә уны һәм хеҙмәттәштәрен Афған һуғышына ебәрәләр. Ул Кундуз ҡалаһында вертолет эскадрильяһында хеҙмәт итә.

– Хәрби хеҙмәткә саҡырылғас, Красноярск крайының Канск ҡалаһында биш ай авиация мәктәбендә уҡыттылар. Унда “МИ-24” вертолеттарын кәрәкле әйберҙәр менән тулыландырыуға һәм осошҡа әҙерләүгә өйрәттеләр. Ошо уҡ йылдың октябрендә Афғанға ебәрҙеләр. Ҡабулға 16 егет килеп төштөк, беҙҙе төрлө частарға бүлделәр. Түҙеп торғоһоҙ эҫе. Вертолеттар көнө-төнө осоп тора, беҙ уларҙы әҙерләп торабыҙ. Шулай уҡ башҡа частарға ла барып, вертолеттарҙы әҙерләйбеҙ. Беҙҙең офицерҙар ысын геройҙар ине. Егеттәребеҙ лайыҡлы хеҙмәт итеп ҡайтты.

Беҙҙең ил Афған халҡына ярҙам итергә барҙы. Халыҡҡа зыян килтергән бандит төркөмдәренә ҡаршы көрәштек. Был илдең халҡы шул тиклем ярлы йәшәй, наҙанлыҡ хөкөм һөрә, тапма ауырыуы таралған ине. Хатта мал егеп, ер эшкәрткәндәрен дә күрергә тура килде. Ундағы халыҡ беҙгә хөрмәт менән ҡараны. Халыҡ милицияһын да беҙҙекеләр әҙерләне. Илебеҙ Афғанға ярҙам йөҙөнән мәктәптәр, дауаханалар, юлдар, заводтар төҙөнө. Шулай бер-беребеҙгә ярҙам итергә, түҙемле, сабыр булырға өйрәндек, – ти Рәмил Карам улы.

Мәғлүм булыуынса, Ҡариҙел районынан 100-ҙән ашыу егет Афғанда хеҙмәт иткән, уларҙың алтыһы һәләк булған.

Старшина Вәлинуров 1988 йылда тыуған еренә әйләнеп ҡайта. 1988 йылда “Хәрби хеҙмәттәре өсөн” миҙалы һәм башҡа бихисап миҙалдар менән наградланған.

Артабан ул Бөрө дәүләт педагогия институтына уҡырға инә. Эшләп тә, уҡып та йөрөй. Институтта уҡыған саҡта буласаҡ биология-химия уҡытыусыһы Роза Миңлефәтих ҡыҙын осратып, ғаилә ҡоралар. Йәш ғаиләгә йәм өҫтәп, улдары Радим тыуа.

Рәмил Карам улы Александровка мәктәбендә биология уҡытыусыһы булып эшләй. Бер аҙҙан уны Ҡариҙелдәге 2-се мәктәпкә директор итеп тәғәйенләйҙәр. Шул йылдарҙа яңы мәктәп бинаһы төҙөлә. “Тәүге Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улына рәхмәт. Төҙөлөштө ул һәр саҡ контролдә тотто”, – ти Рәмил Карам улы.

Булдыҡлы етәксене 2007 йылда Ҡариҙел ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы итеп һайлайҙар. Ул ауылдарҙы төҙөкләндереүгә, урамдарҙы яҡтыртыу, кәртәләрҙе яңыртыу, һыу үткәргестәр һуҙыу кеүек мәсьәләләрҙе хәл итеүгә айырыуса иғтибар бирә. Ҡариҙел ауылында яңы биҫтәләр, урамдар барлыҡҡа килә. Шул йылдарҙа уҡ Рәмил Карам улы йәш быуында илһөйәрлекте тәрбиәләү йүнәлешендә эҙмә-эҙлекле эш алып бара.

– Ҡариҙел ауылында обелисктарҙы яңыртыуға ныҡлап тотондоҡ, беҙҙән күреп, башҡа ауылдарҙа ла халыҡ обелисктарҙы яңыртыуҙы һорай башланы. Райондың һәр ауылында Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына обелисктар асыла. 2013 – 2015 йылдарҙа Ҡариҙел ауылында биш парк барлыҡҡа килде: Ҡарағай урманы, Яр буйы, Геройҙар аллеяһы, Еңеү һәм хәтер паркы, Йәштәр паркы. Геройҙар аллеяһында ике яҡташ геройҙың һәйкәлен ҡуйҙыҡ: Социалистик Хеҙмәт Геройы Василий Семенович Дульцевтың һәм Рәсәй Геройы Владимир Ришадович Алимовтың.

Дульцев бик тыйнаҡ кеше ине. Ҡариҙел районы урманлы төбәк булғас, ошо тармаҡта хеҙмәт иткән батырҙы йәштәр белеп үҫһен тинек. Алимовтан да рөхсәт алып, һәйкәл эшләттек. Былар бөтәһе лә район бюджеты иҫәбенә атҡарылды, – ти Рәмил Карам улы.

Ҡариҙелдә булғанда, хәрби техника ҡуйылған Еңеү һәм хәтер паркы иғтибарҙы йәлеп итте – өс хәрби техника, бер пушка. Ҡариҙелдә бындай экспонаттар нисек барлыҡҡа килгән?

– 2015 йылда, башҡаларҙың тәжрибәһенә ҡарап, ошо эшкә тотондоҡ. Беҙҙең яугирҙәр Афғанда ошондай хәрби техника менән һуғышты. Шуға ла беҙҙең яугир-интернационалистар был фекерҙе хупланы, район етәкселеге лә күтәреп алды. Һөҙөмтәлә Еңеү һәм хәтер паркы барлыҡҡа килде. Һәйкәл бер эш, ә бындай экспонаттар торһа, икенсе күренеш бит. Танктарҙы Свердловск өлкәһенең Ҡамышлы ҡалаһынан, пушканы Ҡурған өлкәһенең Щучье ҡалаһынан алып ҡайттыҡ. Төрлө инстанцияларҙы үтеп, рөхсәт документтарын алыуға һәм районға алып ҡайтыуға ике йыл ярым ваҡыт китте. Үҙебеҙҙең тырышлыҡ менән атҡарып сыҡтыҡ. Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Рифат Ғарипов техника менән ярҙам итте, – ти Рәмил Карам улы.

Әйткәндәй, Рәмил Вәлинуров 1994 йылдан “Рәсәй Афған ветерандары союзы” ойошмаһының Ҡариҙел районы бүлексәһе етәксеһе лә. Ул – ойошма барлыҡҡа килгән көндән алып бөгөнгәсә алыштырғыһыҙ етәксе. Бүлексә 50-гә яҡын Афған яугирен берләштерә.

– Беҙ яугир-интернационалистарға госпиталдә дауаланыу, юридик мәсьәләләр буйынса ла ярҙам итергә тырышабыҙ. Шулай уҡ Афған һуғышында һәләк булған яҡташыбыҙҙың әсәһе Дinә Сафа ҡыҙы Мортазинаны дауаханаларға йөрөтәбеҙ, башҡа йомоштарын да үтәйбеҙ. Ошолай бер-беребеҙгә ярҙам итеп йәшәйбеҙ. Беҙҙең ойошма егеттәре махсус хәрби операциялағы яҡташтарыбыҙға ла ярҙам итә. Мәҫәлән, аҡса йыйып, инструменттар алып барҙыҡ. Ун йыл дауамында республиканың төньяҡ райондары хәрби хәрәкәттәр ветерандары ҡатнашлығында үҙ-ара ярыштар үткәрәбеҙ, аралашып йәшәйбеҙ. Яугирҙәр “Батырлыҡ дәресе”ндә, осрашыуҙарҙа әүҙем ҡатнаша. Еңеү көнө, Ватанды һаҡлаусылар көнө кеүек байрамдарҙан да ситтә ҡалмайбыҙ. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын да ҡотлап торабыҙ, – ти ул.

Рәмил Вәлинуров 2015 йылдан Ҡариҙел районы хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары булып эшләй.

Ул “Башҡортостан Республикаһындағы фиҙакәр хеҙмәте өсөн” маҡтау билдәһе һәм башҡа бихисап наградаларға лайыҡ. Яугир-интернационалист яуҙа ла, тормошта ла һынатмай, бөгөн дә тыуған ил мәнфәғәтенә намыҫлы эшләй. Ул үҙенең фиҙакәр хеҙмәте менән райондаштары араһында ла абруй ҡаҙанған.



Автор фотолары.



## УҠЫУ ЙОРТТАРЫНДА



### Киләсәкте хәстәрләп...

Уҡыусылар эшсе һөнәрҙәр менән таныша

Ишембай ҡалаһының 3-сө мәктәбе уҡыусылары “Иҙел Нефтемаш” йәмғиәтендә, “Витязь” машиналар эшләү компанияһында булып, эшсе һөнәрҙәрҙең үҙенсәлектәре менән танышты. Был башланғыс Ишембай нефть колледжы менән берлектә “Профессионалитет” федераль проектына ярашлы тормошҡа ашырыла. Уҡыусыларға предприятиеларҙың тарихы, үҫеш юлдары, бөгөнгө торошо, ниндәй һөнәрҙәрҙең ихтыяж менән ҡулланылыуы тураһында һөйләнеләр.

# Бында ғәмлеләр һәм сәмлеләр белем ала

## Ишембай нефть колледжы һәр саҡ үҫеш юлында

✍ Гөлдәр ЯҠШЫҒОЛОВА

**Ишембай нефть колледжы Башҡортостанда яғыулыҡ-энергетика йүнәлешендәге тәүге уҡыу йорто булыуы менән әһәмиәтле. Уның тарихы республикабыҙҙа нефть ятҡылыҡтарын үҙләштерә башлау менән туранан-тура бәйле. Ишембай ҡалаһына командировка барышында беҙгә ошо бай тарихлы уҡыу йортонда булып, уның эшмәкәрлеге, яңылыҡтары менән танышыу форсаты тейҙе. Бер ыңғай ғинуар айында “Башҡортостан” гәзитенең социаль селтәрҙәге төркөмөндә барған конкурс еңеүсеһе – ошо колледждың уҡыу алдынғыһы Айһылыу Кинйәбаеваны тәбрикләнек.**






Автор фотолары.






## Уҡыу, үҫеү өсөн шарттар шәп!

Уҡыу йорто алты төрлө йүнәлеш буйынса белгестәр әҙерләй. Көндөҙгө һәм ситтән тороп уҡыу бүлектәрендә 2112 студент белем ала. Берҙәм, ижади коллектив йәш быуынға лайыҡлы белем һәм тәрбиә биреү йүнәлешендә арымай-талмай эшләй. Студенттар республика смотрҙарында, конкурс һәм олимпиадаларҙа, техник ижад күргәҙмәләрендә әүҙем ҡатнаша, призлы урындар яулай. Уларға уҡыу, ижад итеү, сәләмәт йәшәү рәүешен алып барыу, ятаҡта йәшәү өсөн барлыҡ уңайлы шарттар булдырылған, аудиториялар, лабораториялар заманса ҡорамалдар менән тәъмин ителгән.

– Колледж студенттарының һөнәри йәһәттән үсеше үҙебеҙҙәге оҫтаханалар һәм уҡыу полигоны базаһында ойошторолған уҡыу һәм производство практикалары барышында нығына. Шуның һөҙөмтәһе булараҡ, студенттарыбыҙ төрлө ярыштарҙа, Бөтә Рәсәй “Йәш һөнәрмәндәр” чемпионатында, “Профессионалитет” кеүек проекттарҙа лайыҡлы сығыш яһай, – тине Ишембай нефть колледжы директоры, педагогия фәндәре докторы, профессор Хәмит Хәйервара улы Баймырҙин.

Мәҫәлән, былтырғы уҡыу йылында Айгизәр Ҡыҙрасов VII “Йәш һөнәрмәндәр” төбәк чемпионатында беренсе урын яулап, Хабаровск крайында үткән Бөтә Рәсәй һайлап алыу чемпионатында республика данын лайыҡлы яҡлаған. Ошо ярыштарҙа икенсе, өсөнсө урындарға лайыҡ булған студенттар ҙа бар. V курста уҡыған Данил Дудко Бөтә Рәсәй “Йыл студенты” конкурсының “Йыл йәмәғәтсеһе” номинацияһында еңеү яулап ҡайтҡан.

Ишембай нефть колледжы спорт йәһәтенән алдынғылығы менән дә билдәле. Бында ике спорт залы, стадион, тренажер залы, атыу тиры бар, волейбол, баскетбол, футбол, өҫтәл теннисы, шахмат, еңел атлетика, бокс, грек-рим көрәше, гер күтәреү, атлетика гимнастикаһы кеүек спорт секциялары, спорт клубы уңышлы эшләй. Милли көрәш секцияһы колледждың айырыуса ҙур ғорурлығы һанала. Донъя чемпионы Марсель Мырҙағилдин, Донъя чемпионатының бронза призерҙары Ғәли Торошев, Тимур Үлмәновтың исемдәре менән лайыҡлы ғорурлана уҡыу йорто.

Колледжда студенттарҙың үҙидаралығы, профком эшмәкәрлеге яҡшы эшләй, улар ирекмәнлек хәрәкәтендә, “Профессионалитет”, “Ҙур тәнәфес” кеүек Бөтә Рәсәй конкурстарында әүҙем ҡатнаша. “Феникс” студент клубында, “Йондоҙлоҡ”, “Йәшлек” вокаль студияларында, “Юрматы” халыҡ һәм заманса бейеүҙәр ансамблдәрендә шөғөлләнгән йәштәр үҙҙәренең һәләтен төрлө яҡлап аса, республика, ил күләмендәге сараларҙа лайыҡлы сығыш яһай. Дөйөмләштереп әйткәндә, Ишембай нефть колледжы бер урында тормай, һәр ваҡыт үсеш, яңылыҡҡа ынтылыш юлында.

Колледж менән танышыу барышында бында йәш быуынды рухлы, илһөйәр итеп, урындағы традицияларға хөрмәт менән тәрбиәләүгә етди иғтибар биреләүе лә күҙгә ташланды. Дәүләт телдәрен уҡытыу ҙа һәр саҡ иғтибар үҙәгендә. Мәҫәлән, колледждың башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлмәһе республика конкурсында еңеү яулап, иң яҡшы кабинет булараҡ билдәләнгән.

## Үҙе һылыу, үҙе аҡыллы!

Ғинуар айында билдәләнгән Рәсәй студенттары көнө айҡанлы “Башҡортостан” гәзитенең социаль селтәрҙәге төркөмөндә “Иң яҡшы студент” тип аталған конкурс иғлан иткәйнек. Үрҙә әйтеп үтеүебеҙсә, командировка барышында ошо конкурста икенсе урын яулаған Ишембай нефть колледжы студенты Айһылыу Кинйәбаеваны тәбрикләп, уға редакцияның дипломын тапшырҙыҡ.

Айһылыу – Ишембай ҡалаһы ҡыҙы. Бөгөн ул Ишембай нефть колледжында машиналар эшләү бүлегенең 3-сө курсында уҡый.

– Исемем ике мәғәнәүи өлөштән тора: “ай” һәм “һылыу”. Тәүгеһе – ай, ә икенсеһе нәҙәкәтле, һылыу тигәнде аңлата. Бәлки, шуғалыр ҙа матурлыҡ бәйгеләрендә ҡатнашырға яратам, улар миңә көс, дәрт, илһам бирә. Мәктәп йылдарында ла һәр бәйгелә ҡатнашып, лайыҡлы урындар алдым, – ти Айһылыу.

Тырыш ҡыҙ, уҡыу алдынғыһы булыу менән рәттән, колледж тормошонда ла әүҙем ҡатнаша, уҡыу йортондағы “Йондоҙлоҡ” вокаль студияһында, “Шоңҡар” фольклор коллективында, Ишембай ҡалаһының мәҙәниәт һарайында эшләп килгән “Юрматы” фольклор ансамблендә шөғөлләнергә лә ваҡыт таба. Әле күптән түгел иптәштәре менән Салауат ҡалаһында “Салауат варисҭары”, Өфөлә “Мин сәнғәт донъяһына аяҡ баҫам” республика конкурстарында ҡатнашып, призлы урындар яулап ҡайтҡандар. Беҙ барғанда ла колледждың тантаналар залында репетициялар гөрләй ине. Еңеүсебеҙҙе тап шунда осратып, бүләген тапшырҙыҡ.

Айһылыуҙы үҙе уҡыған колледжда “Профессионалитет” проекты амбассадоры итеп һайлағандар. “Был йүнәлештә үҙебеҙ һайлаған һөнәрҙе киңерәк танытыу буйынса аңлатыу эштәре алып барабыҙ”, – ти алдына ҙур маҡсаттар ҡуйып, шуларға өлгәшеп йәшәгән ҡыҙ.

– Айһылыу – һәр йәһәттән маҡтауға лайыҡ студентыбыҙ, ул – минең уң ҡулым, – ти колледждың методика кабинеты мөдире Марина Александровна Игошева. – Бынан тыш, ул – “Ҙур тәнәфес” проектының әүҙем ҡатнашыусыһы ла. Уҡыу алдынғыһы, әүҙем йәмәғәтсе булған Айһылыу Кинйәбаева Рәсәй “Нефтегазстрой-профсоюзы”ның стипендиаты булыуға ла өлгәште. Үҙен төрлө яҡлап үҫтереүгә, белемен киңәйтеүгә лә иғтибар бүлә ул: “Химик анализдар лаборанты” курсын тамамлап, яңы һөнәр үҙләштергән.

Айһылыу татыу, өлгөлө ғаиләлә матур тәрбиә алған. Ата-әсәһенә – ярҙамсы, ике ҡустыһына – Радмир менән Даянға хәстәрлекле апай ул. Әсәһе Зилә ханым – шәфҡәт туташы, атаһы Радик – адвокат. “Ғаиләм – минең иң ҙур таянысым, ҡәҙерле кешеләрем янында үҙемде һәр ваҡыт яҡлаулы, һаҡлаулы итеп тоям. Ял көндәрен бергә уҙғарырға тырышабыҙ, спорт менән шөғөлләнәбеҙ”, – ти уңған ҡыҙ.

Бына шундай шәп ҡыҙ уҡый Ишембай нефть колледжында. Айһылыуҙы еңеүе менән тағы бер тапҡыр ҡотлап, киләсәктә лә уңыш-ҡаҙаныштарға өлгәшеп, хыял-маҡсаттарын тормошҡа ашырып йәшәүен теләйбеҙ!

### АФАРИН!

*Колледж менән танышыу барышында бында йәш быуынды рухлы, илһөйәр итеп, урындағы традицияларға хөрмәт менән тәрбиәләүгә етди иғтибар биреләүе лә күҙгә ташланды. Дәүләт телдәрен уҡытыу ҙа һәр саҡ иғтибар үҙәгендә. Мәҫәлән, колледждың башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлмәһе республика конкурсында еңеү яулап, иң яҡшы кабинет булараҡ билдәләнгән.*

АУЫЛ УҢҒАНДАРЫ



## Фермер һарымһаҡ үҫтерә

“Агростартап” гранты ярҙам итәсәк

Миәкә районының Байтимер ауылында йәшәүсе Фаил Әхмәтов 2021 йылда фермер булырға ҡарар иткән. Яҡшы бизнес-план төҙөп, конкурста еңеп сыҡҡан. Гранттың 2,9 миллион һумын хужалыҡтың матди-техник базаһын нығытыуға йүнәлткән. Егет бер меҢ гектарҙа һарымһаҡ үҫтерәсәк.

# Йомарт ер, уңған кешеләр

Барыбыҙҙы ла ошо ер туйындыра

✍ Динә АРЫҪЛАНОВА

**Яңы ғына Өфөлә агросәнәғәт форумы ҙур уңыш менән үтте, экспозициялар урап сыҡҡыһыҙ, өр-яңы техника, ашлама, ауыл хужалығындағы алдынғы алымдар, химик саралар, орлоҡтарҙы эшкәрткән мәлдән алып уңыш йыйғанға тиклемге етештереү циклы – барыһы ла күргәҙмәлә урын алған.**

“Агрохим-Гарант” яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте лә ғәҙәттәгесә оло форумдарҙа әүҙем ҡатнашыуын дауам итә, продукцияларын тәҡдим итеү, танытыу менән шөғөлләнә. Ул Рәсәй баҙарында ун биш йылдан ашыу ваҡыт эсендә үҙенең лайыҡлы урынын яуланы. Билдәле немец компанияларының ышаныслы дистрибьюторы вазифаһын үҙ өҫтөнә алып, сифатлы рапс, кукуруз, көнбағыш орлоҡтарын хужалыҡтарға һатыу менән шөғөлләнә.

Быйыл баш ҡалала “Агрохим-Гарант” йәмғиәте һәм уның партнерҙары – LIDEA һәм BASF компаниялары менән ойошторолған сираттағы семинар орлоҡ сорттары һәм гибридтарын комплекслы яҡлау һәм эшкәртеү технологиялары буйынса үтте. Был саралар ике яҡ өсөн дә әһәмиәтле. Һәр кем үҙен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарға урында төплө яуап ала. Мәҫәлән, LIDEA менеджеры Виталий Путилин көнбағыш һәм кукуруз гибридтары орлоҡтары менән таныштырҙы. Иҡтисади яҡтан был культуралар өҫтөнлөккә эйә, аграрийҙар өсөн ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. “Агрохим-Гарант” йәмғиәтендә компанияның һаҡлау саралары һәм гибрид орлоҡтарының ассортименты бик ҙур. Белгестәрҙән уларҙы ҡулланыу буйынса кәңәштәр алыу хужалыҡтарға иҡтисади яҡтан уңышҡа өлгәшергә ярҙам итә.

**– Ни өсөн өҫтөнлөктө BASF һәм BAYER компанияларына бирҙегеҙ?** – тип һорайбыҙ йәмғиәт етәксеһе Илдар Исхаҡовтан.

– Европа орлоҡтарының сифатына тел тейҙерерлек түгел, шуға күрә уларҙы хужалыҡтарға тәҡдим иткәндә күңелебеҙ тыныс, йөҙөбөҙ ҡыҙармай. Форумда, эргәбеҙгә килеп, беҙҙән продукция һатып алған хужалыҡ белгестәре рәхмәт әйтеп, күңелде күтәрә. Төрлө кәртәләрҙе үтеп, сертификаттар менән килә орлоҡтар. Ышаныслы партнерҙар булғас, аҡсаны кисектереп түләргә лә рөхсәт итәләр. Ауыл хужалығы өсөн етештерелгән химик препараттарҙың сифаты ла юғары. Был препараттарҙың күп өлөшө тап ошо ике компанияла уйлап табылған. Уларҙы һатыу менән шөғөлләнәбеҙ. Тауар үтемле, даими яңырып тора, шуға күрә агрономдар менән уларҙы ҡайһы баҫыуҙа, ниндәй осорҙа, ҡасан файҙаланыу буйынса рецепт өлгөләрен яҙабыҙ, билдәләйбеҙ.

**– Тимәк, һеҙ – хужалыҡтарҙы орлоҡ һәм препараттар менән тәьмин итеүсе генә түгел, ә тәжрибәле консультант та.**

– Әлбиттә, компанияла эшләгән кешеләрҙең күбеһе – агрономдар. Йәй буйы баҫыуҙабыҙ, үҫемлектәрҙең сирен асыҡлайбыҙ, иген яландарының уңдырышлылығын, төҙөлөшөн өйрәнәбеҙ, дөрөҫ диагноз ҡуйыу өсөн бөтә шарттарҙы тикшерәбеҙ. Үҫемлек тә, кеше организмы кеүек үк, аныҡ диагноз ҡуйылғандан һуң шифалы дауаға мохтаж. Ниндәй “диагноз” ҡуйылыуына ҡарап “дарыу рецебын” үҙебеҙ яҙабыҙ.

**– Һәр баҫыуға ла “табип” кәрәк тимәксеһегеҙме?**

– Һуңғы осорҙа һөрмәй сәсеү буйынса технологиялар ҡулланыла башлағас, ер яралары уңала, уңыш юғарыраҡ була башланы.



Фото: шәхси архивтан.

ЙӘМҒИӘТ БЕЛГЕСТӘРЕ ТӨРЛӨ КИМӘЛДӘГЕ СЕМИНАРҘАРҘА ТУПЛАҒАН ТӘЖРИБӘЛӘРЕ, БЕЛЕМДӘРЕ, ЯҢЫЛЫҠТАРЫ МЕНӘН ИХЛАС УРТАҠЛАША. КУЛЬТУРАЛАРҘЫҢ ЕТЕШТЕРЕҮСӘНЛЕГЕН КҮТӘРЕҮ, ИҠТИСАДТЫ ЯҠШЫРТЫУ МАҠСАТЫНА БАРЫ ШУНДАЙ ЮЛ МЕНӘН ГЕНӘ ЯҠЫНЛАШЫП БУЛА.

Беҙ ауыл хужалығы ғалимдары менән һәр саҡ тығыҙ хеҙмәттәшлектәбеҙ. Бөтә донъяны урап сығып, игенселек серҙәрен биш бармағындай белгән академик, профессор Хәлил Мәсғүт улы Сафин менән кәңәшләшеп эшләйбеҙ. Әбйәлил районының “Красная Башкирия” ауыл хужалығы предприятиеһы менән уңышлы хеҙмәттәшлек итәбеҙ тип әйтә алабыҙ, сөнки һөҙөмтә ҡыуаныслы. Һөрмәй сәсеү ысулы ҡулланыла башлағас, тупраҡ эрозияһы бөтә, гумус һаҡлана, ер ҡеүәте арта. Ер үҙ-үҙен туйындыра, тәьмин итә.

Мәләүез районының “Дружба” яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте беҙҙән алған рапс, көнбағыш культураларын сәсеп, ярайһы уңышҡа өлгәште. Ҡайһы баҫыуға ниндәй препарат ҡулланыу, сүп үләндәренә, ҡорттарға ниндәй дарыу файҙаланыу кәрәклеген бергәләп хәл итәбеҙ. Был препаратты үҫемлектең ҡайны үҫеш фазаһында файҙаланғанда тәьҫирле булыуын асыҡлайбыҙ. Беҙ ҙә оҫта ҡуллы, аҡыл менән уйлап эш иткән “табип” булырға тейешбеҙ, дозаны кәрәгенән тыш арттырһаң йәки, киреһенсә, биреп еткермәһәң, даими күҙәтмәһәң, препараттың сифатлы булып та иҫке техника ҡулланһаң, бөтә тырышлыҡтың юҡҡа сығыуы ихтимал.

**– Ниндәй препараттарға ихтыяж ҙур?**

– BAYER компанияһының бал ҡорттарына зыян килтермәй торған яңы төр дарыуҙарын алдыҡ. Уның сифатын яҡшы баһаланылар. Немецтар экологияға, тәбиғәт байлыҡтарына, халыҡ сәләмәтлегенә үтә ныҡ һаҡсыллыҡ күрһәтә. Тағы ла “Престиж” тип аталған тәьҫирле препарат тураһында әйтмәй булмай. Колорадо ҡуңыҙынан һаҡлай торған дарыуҙың картуфҡа зыяны юҡ. Уның менән орлоҡтоң үҙен эшкәртергә кәрәк.

**– Баҫыусылыҡ, үҫемлекселек, ер кешеләре хаҡында сәғәттәр буйы һөйләй алаһығыҙ. Тәбиғәткә, ергә булған һөйөү һеҙгә ҡайҙан “йоҡҡан” икән?**

– Моғайын, атайымдан – ғүмер буйы ерҙә эшләгән, кукуруз үҫтергән, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры Фән Исхаҡовтан мираҫ булып күскәндер. Бәләкәй саҡтан баҫыуҙан ҡайтмай уның эргәһендә өйөрөлдөм, ерҙе, хеҙмәт кешеләрен хөрмәтләргә унан өйрәндем. Кем булыуыбыҙға ҡарамаҫтан, барыбыҙҙы ла ошо ер туйҙыра. Үҙ ерен һөйгән кеше уның етмеш төрлө эшен дә хәл итә ала. Бураҙнаға төшкән сифатлы орлоҡ серемәй ул, тупраҡтан көс-ҡеүәт алып, тамыр ебәрер, күҙән уңышы менән ҡыуандырыр.

“Үҙәк” МТС дәүләт ауыл хужалығы предприятиеһының баш агрономы Илдар Шиһапов “Агрохим-Гарант” йәмғиәтенән рапс, кукуруз һәм “Новамис КЛ” көнбағышы гибриды алып файҙаланыуҙарын һәм уңышынан ҡәнәғәт булыуҙарын һөйләне. “Көнбағыш гибриды айырыуса беҙҙең урман-дала зонаһы өсөн бик ҡулайлы булып сыҡты. 2021 йылда Архангел районында гектар ҡеүәте 35 центнерға етте”, – тип ҡыуанысы менән дә уртаҡлашты Илдар Фән улы.

“Красная Башкирия” ауыл хужалығы кооперативы агрономы Илһам Әхмәтйәнов компанияның бик ышаныслы, үҙ һүҙендә тора белгән, уртаҡ фекергә килеү мөмкин булған партнер икәнлегенә баҫым яһаны. “Предприятие белгестәре йылына бер нисә тапҡыр килеп, консультация бирә, тығыҙ хеҙмәттәшлектән барыбыҙ ҙа отабыҙ ғына. Йәмғиәттән һатып алған үҫемлектәрҙе һаҡлау саралары һәм гибридтар орлоғо сифатлы, уңдырышлы. Беҙҙәге ҡырыҫ тәбиғәт шарттарында ла “BAYER” компанияһының көнбағыш гибриды үҙен тик яҡшы яҡтан күрһәтте. Йыл һайын тотороҡло уңыш алабыҙ. Бик тиҙ өлгөрөүе беҙҙең өсөн үтә мөһим, майлылығы ла юғары”, – тине агроном.

Цюрупа исемендәге совхоз директоры Рим Зөбәйеров һыналған партнерҙарға рәхмәтле. “Бөгөнгө баҙар мөнәсәбәттәрендә көслө конкуренция хакимлыҡ итә. Нимә һәм нисек сәсергә, нисек үҫемлектәрҙе һаҡларға, нимә менән туйындырырға, сәсеү әйләнешен нисек ойошторорға – ҡәтғи баҙар шарттары был мәсьәләләрҙе уйлап хәл итеүҙе талап итә. Тап ошо эштә партнерҙарыбыҙ ҙур ярҙам күрһәтә. Төрлө компаниялар менән эшләйбеҙ, һайлап алыу мөмкинлеге бар. Шундай ышаныслы поставщиктарҙың береһе – “Агрохим-Гарант”. Улар орлоҡто һатҡас та беҙҙең менән хеҙмәттәшлекте өҙмәй. Республикалағы компаниялар араһында ул лайыҡлы урынды яуланы. Яуаплы, ышанычлы партнер”, – тип ул йәмғиәт хеҙмәткәрҙәрен бары яҡшы яҡтан ғына телгә алды.

“Беҙҙең “Агрохим-Гарант” менән танышыуыбыҙ “ЕС Генезис” көнбағышы гибридынан башланды, – тип һөйләне “Рощинский” акционерҙар йәмғиәтенең баш агрономы Ришат Әхкәмов. – Семинарҙа ҡатнашып, ҡыҙыҡһынып киттек. Былтыр көнбағыштың “Новамис КЛ”, быйыл “Белфис КЛП”, рапстың “Белинда” орлоҡтарын алдыҡ. Сифаттары яҡшы, шуға күрә партнерҙар менән бәйләнеште нығытабыҙ ғына. Бик оператив эшләйҙәр. Былтыр ҡыҙыу сәсеү осоронда шылтыратыуыбыҙ булды, шунда уҡ орлоҡто килтереп еткерҙеләр. Ҡышҡы бойҙай һәм яҙғы арпа майҙандарын “Абакус ультра” фунгициды менән эшкәрттек. Ҡатмарлы тәбиғәт шарттарына ҡарамай, препарат тулыһынса бурысын үтәне, һәйбәт уңыш алып ҡыуандыҡ”.

“Агрохим-Гарант” йәмғиәте үҫемлектәрҙе һаҡлау, ашлау һәм орлоҡтар менән тәьмин итеү буйынса Рәсәй баҙарында 15 йылға яҡын эшләп, игенселәрҙе «Bayer CropScience», «BASF», ЗАО «Изагри», «Кирово-Чепецкая Химическая Компания» йәмғиәте кеүек донъяла танылған етештереүсе предприятиелар продукцияһын тәҡдим итә. Яҡшы сифат, ассортимент төрлөлөгө, белгестәрҙең ғилми ҡеүәте, партнерҙарға яуаплы ҡараш уға республикала уңышлы старт алырға һәм ырамлы аҙымдар менән алға барырға ярҙам итте. Компания үҙ абруйының ҡәҙерен белә һәм уны төшөрмәү, иseme есеменә тап килһен өсөн алға ынтылып йәшәй. Орлоҡтар бөтә стандарттар талаптарына яуап бирергә, ашламалар һәм һаҡлаусы саралар һыналған һәм ышанычлы булырға тейеш. Продукцияны һатыу менән эш бөтмәй әле, дөрөҫөрәге, башлана ғына. Баҫыуҙарҙы тикшереү, культуралар торошона мониторинг үткәреү, тейешле препараттарҙы һайлау, хужалыҡ белгестәре, ғалимдар менән хеҙмәттәшлек итеү – компания белгестәре хеҙмәтенең алыштырғыһыҙ өлөшө. Башҡортостан биләмәһендә яңы гибридтарҙы теркәү йүнәлешендә лә әүҙем эш дауам итә. Йәмғиәт белгестәре төрлө кимәлдәге семинарҙарҙа туплаған тәжрибәләре, белемдәре, яңылыҡтары менән ихлас уртаҡлаша. Культураларҙың етештереүсәнлеген күтәреү, иҡтисадты яҡшыртыу маҡсатына бары шундай юл менән генә яҡынлашып була. Ул бөгөн йөҙәрләгән препараттар, сорт һәм гибридтар тәҡдим итә. Тулы мәғлүмәт менән agrohim-garant.ru (QR-коды өҫтәргә) сайтында танышырға мөмкин.

**• Российская Федерация,**
**Республика Башкортостан, Уфимский район, с. Булгаково, ул. Свободы, 1**
**• E-mail: agro_ufa@mail.ru**
**• Тел.: +7 (917) 774-06-00,**
**факс: +7 (347) 652-56-16.**

*Реклама.*

## ЙОМА ҠУНАҒЫ



### “Беләҙектәр сыңы”

Фәйзи Ғәскәров исемендәге ансамбль күргәҙмә ойошторған

Өфөлә Ф. Ғәскәров исемендәге ансамбль үҙенсәлекле этно-коллекция менән таныштыра. Күргәҙмә сиктәрендә ғәскәровсылар ансамбль репертуарындағы бейеүҙәргә Рәсәй халыктары биҙәүестәре һәм костюмдары коллекцияһын тәҡдим итә. Фәйзи Ғәскәров ҡуйған көршәк менән бейеүҙәге боронғо уникаль биҙәүестәр экспозицияла айырым урын биләйәсәк. Күргәҙмә ансамбль оркестрының музыкаль биҙәлеше менән үрелеп бара.

# Башҡорт халыҡ кейеме – бик боронғо ҡомартҡы

## “Милли хазинабыҙҙы өйрәнеү – минең тормош мәғәнәһе”

Рүзилә ИСӘНБАЕВА

**Башҡорт милли кейем өлгөләрен, төрлөлөгөнә ҡарап, ете комплексҡа бүлеп йөрөтәләр. Башҡорт милли кейеме өҫтөндә ентекле тикшереү эше алып барған, ғилми яҡтан өйрәнгән “Башҡорт кейеме. Технологияһы. Конструкцияһы. Декоры”, “Башҡорт тамбуры тылсымы” китаптары авторы, технология фәндәре кандидаты Айгөл КАМАЛИЕВА менән әңгәмәлә һүҙ ошо хаҡта.**




Айрат Нурмөхәмәтов фотоһы.

**– Башҡорт милли кейемен өйрәнеүселәргә һеҙ яҡшы таныш. Был өлкә менән ҡыҙыҡһынмаған кешенең һеҙҙе белмәүе лә ихтимал. Гәзит уҡыусыларҙы үҙегеҙ менән яҡынданыраҡ таныштырһағыҙ ине.**

– Сығышым менән Шишмә районының Ҡара Яҡуп ауылынанмын. 10-сы һөнәрселек лицейын тамамлағас, Рәсәй туҡыу һәм еңел сәнәғәт институтының Өфө филиалына уҡырға индем. Филиал Башҡорт дәүләт университетының дөйөм инженер факультеты тип үҙгәртелде, уны 90-сы йылдар аҙағында тамамланым, инженерлыҡ белеме алдым. Һуңынан Мәскәүгә аспирантураға индем һәм 2005 йылда “Башҡорт халыҡ кейеме өлгөһөндә милли кейемде проектлау” тигән темаға диссертация яҡлап, техник фәндәр кандидаты булдым. Һуңыраҡ Мәскәүҙә докторантураға үттем, әлеге ваҡытта башҡорт халыҡ кейеменә ҡағылышлы ғилми тикшеренеүҙәр алып барам һәм китаптар яҙам.

Милли кейем традицияларын өйрәнеү минең өсөн тормош мәғәнәһенә әйләнде. Костюмдарыбыҙҙың серҙәрен күберәк өйрәнгән һайын, уның тураһында ни тиклем аҙ белгәнебеҙҙе аңлайым. Бынан тыш, халыҡ кейеменең тәрәнлеген һәм фәлсәфәүи мәғәнәһен төшөнөр өсөн ғалимдарҙың халыҡ сәнғәте теорияһы һәм практикаһы өлкәһендәге фундаменталь ғилми хеҙмәттәрен өйрәнергә кәрәк. Ә уның үҙ ҡанундары.

**– Ни өсөн милли кейемде һайланығыҙ? Был өлкәгә килеүегеҙ осраҡлы булдымы, әллә аныҡ сәбәбе бар инеме?**

– Был, моғайын, миңә бирелгән иң популяр һорауҙыр. Ғәмәлдә барыһы ла ғаиләнән килә. Бөтә йәйҙәрҙе лә беҙ апай-һеңле һәм ағай-энеләребеҙ менән ауылда үткәрҙек. Ауыл байрамдарында башҡорт йырҙарын, туған телде тыңлап, башҡорттарҙың традицион шөғөлдәрен күреп һәм үҙебеҙ ҙә эшләп үҫтек. Быларҙың барыһы ла беҙгә бала саҡтан һеңгән. Миңә нәнәйем мираҫ булараҡ боронғо сулпылар, беләҙектәр, алҡалар бүләк итте. Ул ҡомартҡыларҙы күҙ ҡараһылай һаҡлайым. Һөнәр һайлағанда миңә ата-әсәйем ярҙамлашты, бының өсөн уларға рәхмәтлемен. Беҙ бергәләп республика буйлап башҡорт халыҡ кейемдәрен эҙләп йөрөнөк, һуңғы аҡсаларыбыҙҙы сарыф иттек, әммә йәнә юлға йыйынып, муниципаль музейҙарға, ауылдарҙағы халыҡ кейеме хужаларына бара инек. Ошо материалдар нигеҙендә диссертация яҙҙым. “Башҡорт кейеме. Технологияһы. Конструкцияһы. Декор” китабы ата-әсәйем Әлфиә Миңлебай ҡыҙы менән Салауат Тимерхан улының ҙур ярҙамы һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килде. Һәр кешенең тормошонда күп нәмәне ғаилә хәл итә, бала саҡтан тәрбиәләнгән ҡиммәттәр миңә был йәһәттән ҙур бәхет килтерҙе, Аллаға шөкөр.

**– Кейем тегеүселәр һеҙҙең китаптарҙы ихлас ҡабул итте. Элек бындай китаптар булманы, эшләүе ауыр ине, тигән һүҙҙәр ишетергә тура килде. Башҡорт милли кейеме быға тиклем ниндәй кимәлдә өйрәнелгәйне? Һеҙ ниндәй мәғлүмәттәргә таянаһығыҙ?**

– Костюмдарҙы өйрәнеүемә тиҙҙән 30 йыл була. Милли кейемдәребеҙ тураһында бөтә белгәндәребеҙ – уның үҫешенең ҙур тарихының бик бәләкәй өлөшө генә, тип әйтә алам. Башҡорт халыҡ кейеме – бик боронғо ҡомартҡы. Селтәр, һаҡал, сәсүрмес кеүек башҡорт биҙәүестәренең барлыҡҡа килеүен ғалимдар Көньяҡ Уралда йәшәгән бронза быуаты ҡәбиләләре менән бәйләй. Ә бит был биҙәүестәр беҙҙең көндәргә тиклем килеп еткән һәм, археологик табылдыҡтарҙан күренеүенсә, шул уҡ композицияла һәм формала һаҡланған.

Башҡорт кейемендә мифология, рухтарға боронғо ышаныуҙар, Йыһан һәм Ғаләм тураһында боронғо күҙаллауҙар сағылдырылған. Ул әйбер генә түгел, ғөмүмән, донъя картинаһы ла. Бөгөн Көньяҡ Уралдың боронғо ҡәбиләләре тарихы тураһында күп фәнни һығымталар яһайбыҙ, улар һуңынан башҡорт халҡының тарихын байыта. Уларҙың мәҙәни үҙенсәлектәре костюмда теге йәки был традицияларҙы күрһәтә. Орнаменттың, декорацияның һәм кейемдең йәшерен мәғәнәһен аңлар өсөн халыҡ тормошоноң бөтә өлкәләрендә лә, рухи һәм матди өлкәләрҙә лә киң белем спектры кәрәк, сөнки костюм халыҡтың көндәлек тормошон, уның донъяға ҡарашын һәм ҡиммәттәрен сағылдыра, шуға күрә башҡорт кейеме традицияларын өйрәнгәндә мин фольклорға, этнографияға, тарихҡа, мәҙәниәткә, хужалыҡҡа, сауҙа мөнәсәбәттәренә, башҡорт мифологияһына һәм башҡа күп мәғлүмәттәргә арналған фәнни әҙәбиәттең киң даирәһенә таянам.

**– Кейемдәребеҙ ғәйәт киң байлығы һәм төрлөлөгө менән айырылып тора. Шундай төрлөлөк ҡайҙан килә?**

– Был һорауға бер-ике һөйләм менән генә яуап биреү мөмкин түгел. Башҡорт костюм комплекстарындағы айырмалар башлыса бер нисә факторға, күпселек осраҡта тәбиғәт-климат шарттарына, Көньяҡ Уралдың теге йәки был өлөшөнөң үҫеш тарихына, шөғөлдәргә, йәшәү рәүешенә һ.б. бәйле. Мәҫәлән, Көньяҡ Уралдың таулы өлөшөндә өҫ кейеме, йылы әйберҙәр өҫтөнлөк итә, уларһыҙ ҡышҡы ҡаты һыуыҡтарҙа йәшәү мөмкин түгел. Шулай уҡ әҙерләү материалындағы айырмалар сеймалдың булыуы менән бәйле, ул тире, йөн, етен һәм башҡалар. Тышҡы төрлөлөгөнә ҡарамаҫтан, костюмдарҙы берләштергән төп һыҙат – халыҡтың донъяға ҡарашы, ул орнаментта, биҙәү принцибында, донъя төҙөлөшө тураһында боронғо күҙаллауҙарҙы сағылдырған композицияла, хатта костюмдың композицияһында ла баш кейеменән алып аяҡ кейеменең табанына тиклем күренә.

Ҡабатлауҙан арымайым. Башҡорт кейеме – бик боронғо, уникаль ҡомартҡы һәм башҡа мәҙәниәттәрҙә аналогы юҡ. Күп быуаттар дауамында үҫешкән күренеш булараҡ, башҡорт кейеме төрлө тәбиғәт-климат шарттарына яраҡлашҡан, яңы үҙенсәлектәргә эйә булған, әммә бөгөн бөтә ете комплексты берләштергән сигеү, технология, биҙәү схемаларында нигеҙен һаҡлаған. Шулай уҡ был һорауға тулы яуап биреү өсөн башҡорт ырыуҙары тарихын өйрәнергә кәрәк, күп хәҡиҡәт тап шунда йәшеренгән.

**– Һуңғы ваҡытта милли кейемдәргә иғтибар ныҡ артты. Был нимәнән килә тип уйлайһығыҙ? Милли үҙаң уяныуымы?**

– Һуңғы йылдарҙа милли кейемгә ҡыҙыҡһыныу арта, өҫтәүенә, юғарынан төшкән мәжбүри талап түгел, ә халыҡтан килгән ҡыҙыҡһыныу – ул феноменаль күренеш. Бында, моғайын, социологик тикшеренеүҙәр, феноменды сисеүгә фәнни ҡараш кәрәк. Әммә ғәҙеллек өсөн халыҡтың башҡорт кейеменә ҡыҙыҡһыныуы һәр ваҡыт булған, юғиһә боронғо кейем өлгөләре, биҙәүестәр һаҡланмаҫ ине, тип әйтергә кәрәк. Һуңғы йылдарҙа ғына ул киң ҡолас ала һәм, моғайын, Милли кейем көнө быны берләштергәндер. Әлбиттә, һуңғы йылдарҙа парад үткәрелмәүе үкенесле хәл. Республикабыҙҙағы бөтә халыҡтарҙың берҙәмлеге һәм дуҫлығы символы булараҡ, был ғәйәт ҙур сара. Дөрөҫөн әйткәндә, милли кейемдәрҙә урамға күмәкләп сыҡҡан сара кәрәк, бигерәк тә Рәсәй рекордтар китабына ингәндән һуң. Халҡыбыҙ билдәле глобалләшеүҙән һәм зыянлы Көнбайыш мәҙәниәтенән бай тәбиғәткә, ауылға яҡын булыуы менән ҡотҡара, тип уйлайым, сөнки беҙҙең көс тап шунда тупланған, унда милли йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр һаҡланған. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: хаҡлы ялға сыҡҡас, күптәр тарихи тамырҙарына яҡыныраҡ ауылдарға ҡайта. Моғайын, бының да ғилләһе барҙыр.

**– Кейемдәребеҙҙе тергеҙеүсе оҫталар ҙа артты. Уларға һәм яңы өйрәнә башлағандарға ниндәй кәңәш бирер инегеҙ?**

– Йәш оҫталарға боронғо образдарҙы күсереп эшләүҙән башларға кәңәш итер инем. Һәр хәлдә, был оҫталыҡҡа беренсе аҙым, “ҡулды шымартыу” булыр ине. Бер элементты йөҙ тапҡыр ҡабатларға кәрәк һәм шул саҡта ҡул үҙе билдәле бер һыҙыҡҡа, һыҙымға һ.б. күнегә, ә күҙ һиҙелмәгән деталдәрҙе тоя башлай. Ә инде оҫта теге йәки был элементтың үҙенсәлектәрен өйрәнгәндән һуң, бындай әйберҙәрҙе үҙе лә булдыра ала, әммә халыҡ традициялары нигеҙендә эшләй. Һәм, әлбиттә, халыҡ тормошо, тарих менән бәйле бөтә мәғлүмәтте өйрәнеү, музейҙарға, бигерәк тә бәләкәй ҡалаларҙағы муниципаль музейҙарға йөрөү, билдәле оҫталар менән аралашыу мотлаҡ. Улар серҙәрҙе ҙур ҡәнәғәтлек менән һөйләй. Хәҙерге заман оҫталарына халыҡтыҡын ижад итеүе ауырыраҡ, сөнки беҙ традицияларға урын ҡалмаған икенсе донъяла йәшәйбеҙ. Ә бит борон әйберҙәрҙе ошолай теккәндәр: милли кейемдәрҙәге ҡыҙҙар аулаҡ өйҙә, йәғни традицион келәмдәр, таҫтамалдар менән биҙәлгән йортта йыйылған, йырҙар йырлап, әкиәттәр һөйләп, бөтә мәсьәләләр буйынса кәңәшләшеп, матурлыҡ өлгөләре тыуҙырған. Был – коллектив ижади хеҙмәт һәм оҫталыҡ өлгөһө. Хәҙер ҙә уны тергеҙергә кәрәктер.



## ИҒТИБАР ҮҘӘГЕНДӘ – ИГЛИН РАЙОНЫ

**Ихлас һөйләшеү**

Яугирҙәр башлыҡ менән фекер алышты

Иглин районы хакимиәте башлығы Гүзәл Насирова махсус хәрби операцияла ҡатнашып, әле ҡыҫҡа ваҡытлы ялға ҡайтҡан хәрбиҙәр менән осрашты. Улар эштәрҙең нисек барыуы тураһында фекер алышты, егеттәргә гуманитар йөктө булдырыуға халыҡтың нисек әүҙем ҡатнашыуы, М.Шайморатов исемендәге ирекмәндәр штабының эше тураһында һөйләне. Тылдағы төп маҡсат – уларҙың ғаиләләре тураһында хәстәрлек.

# Баллы төбәк

## Умартасылар төйәк иткән йәмле һәм “тәмле” яҡтарҙа халыҡ нисек йәшәй?

✍ Әлфиә МИНҒӘЛИЕВА

**Башҡортостаныбыҙ күркәм, тәҙәк ауылдары менән дан тота. Илдә күп ауылдар юҡҡа сығыу менән янағанда, беҙҙекеләр үҫешә, уларҙа халыҡ тырышып донъя көтә. Күптән түгел ошондай ауылдарҙың береһендә беҙҙең редакция хеҙмәткәрҙәре лә булып китте.**

### Ярышып донъя көтәләр

Иглин районының Түбәнге Ләмәҙ ауылы М-5 трассаһынан ун километрға төптәрәк, Силәбе өлкәһе менән сиктәш ерҙә урынлашҡан. Шау-шыулы федераль юлдан ауыл яғына китә башлаһаң, бер урында асфальт юл юғала. Ошо сәбәпле Ләмәҙгә тәүге тапҡыр килгән кешеләр уны төпкөл генә ауыл тип иҫәпләй, әммә ныҡ яңылыша. Көтмәгәндә тәбиғәттең иҫ китмәле матур, экологик яҡтан таҙа урынында ҙур ауыл хасил була. Унын эсе тулыһынса асфальтланған, тәҙәк дәү йорттар, ныҡлы хужалыҡтар ҡаршы ала, йәшәү өсөн кәрәкле барлыҡ учреждениелар бар.

Беҙ барған көн бик ҡояшлы һәм йылы ине. Тирә-яҡта иртә яҙға ҡыуанып бал ҡорттары оса, алыҫта мал мөңгөрләгәне ишетелә. Ауыл таҙа һәм тәҙәк. Беҙҙе ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Раил Мирхәйҙәров ҡаршы алды һәм ауыл советы менән таныштырҙы.

– Райондың алыҫ урынлашҡан ауылдарының береһе беҙ, Иглиндән 65 километр йыраҡлыҡта ятабыҙ. Ауыл биләмәһенә алты ауыл ҡарай, уларҙа бөтәһе 1005 кеше йәшәй. Төп халыҡ – башҡорттар, 95 процент тәшкил итә. Төп шөғөл иһә – ҡортсолоҡ, малсылыҡ, урман әҙерләү, – тине ул.

Ысынлап та, республика халҡы Түбәнге Ләмәҙҙе умартасылар ауылы булараҡ белә. Хужалыҡтарҙа 5167 баш умарта булһын әле! Тәбиғәттең бындай хозур, баллы урынында башҡаса мөмкин дә түгелдер шул. Раил Ғәлимйән улы әйтеүенсә, бында барыһы ла ҙур пасекалар тотмаған хәлдә лә, өй һайын тиерлек үҙе өсөн генә булһа ла бал ҡорттары аҫрай. Дөйөм алғанда, биләмәлә 12 крәстиән (фермер) хужалығы ғәмәлдә.

Бында 16 шәхси эшҡыуар барлығы тураһында ла әйттеләр. Бер һүҙ менән әйткәндә, кешеләр “ауылда эш юҡ” тип ятмай, ә тырышып, бер-береһен уҙҙырып донъя көтә. Әйткәндәй, 2021 йылда улар “Айыҡ ауыл” республика конкурсында ҡатнашып, өсөнсө урынға лайыҡ булған. Еңгән аҡсаларына ауылда кәрәкле хужалыҡ эштәрен башҡарыу өсөн трактор һатып алғандар.



Ауыл биләмәһе хакимиәте башлығы Раил Мирхәйҙәров.

### Күңел өсөн генә башлағайным...

Хакимиәт башлығы беҙҙе Түбәнге Ләмәҙ менән таныштырҙы, матур урындарын күрһәтте. Мәҫәлән, ауылды йәмләп торған урын – аҫылмалы күпер бар. Үҙәктә нур һәм иман өҫтәп мәсет ултыра. Мәҙәниәт йорто тирәһе лә йәмле, һәйкәл ҡуйылған, сәскәләр үҫә. Әммә нисек кенә ауыл матур булмаһын, ул тәү сиратта унда йәшәгән уңған кешеләре менән күркәм. Шундай егәрле оҫтабикәләрҙең береһен күреп сығырға булдыҡ.

Түбәнге Ләмәҙҙә Лена Әхмәтйәнованы белмәгән, уның өйөндә булмаған кеше юҡ, сөнки ул ауылдың иң оҫта тегенсеһе. Кемгә үҙе генә теләгән дизайн буйынса кейем, йә булмаһа, кейем-һалымды йүнәтеү кәрәк – барыһы ла Лена апайға күҙ төбәп бара. Уның өйөнә килеп инһәң, бер аҙ аптырап та ҡалаһың: өймө ул, тегеү цехымы? Ҙур бүлмәлә стена буйлап төрлө техника теҙелгән. Унда төрлө тукыма өсөн тегеү машиналары ла, пар генераторы ла, беҙ белмәгән башҡа профессиональ ҡорамалдар ҙа бар. Ике яҡ ситтә манекендар, ә уларҙа матур кейемдәр, түшелдеректәр тора.

Лена апай үҙенең ҡатмарлы яҙмышы тураһында һөйләне. Бәхеткә, ул тегенсе булып осраҡлы ғына эш башлай. Ауылда мәктәпте тамамлағас, юрист булам тип баш ҡалаға уҡырға китә. Тик уҡырға инә алмай, ә ауылға буш ҡул менән ҡайтҡыһы килмәй. Шуға күрә бер йыл ваҡытты әрәм итмәйем тип, 52-се училищеға тегенселеккә уҡырға инә. (Алға китеп шуны ла әйтәйек, ул Өфөләге Эске эштәр министрлығы мәктәбенә уҡырға инеп, унда дүрт йыл уҡый, тик тамамларға теләге булмай). Торабара һөнәре үҙенә бик оҡшап китә, Өфөләгә ательела эш башлай.

– Миңә һөнәремә Ташкент ҡалаһының иң оҫта модисткаһынан өйрәнергә тура килде. Ул апай ғаилә хәле буйынса Өфөгә ҡайтала беҙҙең ательела эшләй, шул тиклем оҫта ине, белмәгән бер эше лә булманы. Унан бик күпкә өйрәндем, тәжрибә тупланым. Шул саҡта был һөнәргә әҫәнеп киттем, – ти Лена Наил ҡыҙы.

Уларҙың ательеһына бик билдәле йырсы ҡатын (исемен әйтмәүҙе үтенде) килеп йөрөгән була. Ул оҫта ҡыҙҙарҙан үҙенең концерт күлдәктәрен үҙгәртеп тектергән. Тап шул саҡта башҡорт милли орнаменттар менән кейемдәр, биҙәүестәр тегеү идеяһы барлыҡҡа килә. Улар барыһын да ныҡлап өйрәнә, буласаҡ коллекцияны әҙерләп бөтә яҙа. Тик шул саҡта алһыҙ-ялһыҙ эшләгән Лена апайҙы инсульт һуға. Ул сирҙе ауыр үткәрә, шул саҡтан уң ҡулы эшләп китә алмай. Һәҙәмтәлә ғаиләһе менән баш ҡаланы ҡалдырып, дүрт йыл элек кире ауылға әйләнеп ҡайтырға ҡарар итәләр.

Әшһеҙ ҡалған ҡатын бик моңһоҙлана, үҙенә урын таба алмай. Быны күргән тормош иптәше һәм балалары уға Яңы йылға бүләккә тегеү машинкаһы алып бирергә була. Лена Әхмәтйәнова бүләккә шул тиклем ҡыуана һәм йәйлап ҡына яңынан яратҡан эшенә тотона. Һул ҡулы менән эшләргә өйрәнеп ала.

Тик ҙур ательеларҙа, тегеү цехтарында эшләп өйрәнгән ҡатын бер машинка менән генә ҡәнәғәт булмай. Шул саҡта адреслы социаль ярҙам программаһы тураһында ишетеп ҡала һәм хакимиәткә барып белешә. Унда уға бизнес-план төҙөргә ҡушалар, һәм, барыһы ла эшләнгәс, Лена апай 250 мең һум аҡса ала. Был аҡсаға өс төрлө тегеү машинкаһы, манекендар, пар генераторы ала.

– Хәҙер рәхәтләнеп тегәм. Бер машинкам еңел трикотаж әйберҙәр өсөн, икенсеһе менән пальто кеүек ауыр әйберҙәр тегергә була. Ауыл кешеләре заказ менән килә. Кемгәләр кейем, постель тегеп бирәм, башлыса әйбер йүнәтәм. Һәр ваҡыт ҡыҫҡартырға, киңәйтергә, тарайтырға кәрәк бит. Ямайым да ҡыуанам, тип көләм үҙем, – ти ул.

Өфөлә саҡтағы хыялы ла онотолмаған уның. Йәйләп түшелдеректәр тегә башлай. Килеп сыға башлағас, заказдар ҡабул итә. Хәҙер ярты ауыл ул теккән милли орнаментлы түшелдеректә йөрөй. Әхирәттәренә бүләк итеп тә эшләй уларҙы. Хәҙер иһә эш даирәһен киңәйтергә, милли камзулдар тегә башларға йыйыны ул.

– Ирем өйгә төкәтмә эшләй башланы, ул әҙер булһа, ысын бер цех килеп сығасаҡ. Балалар ялға ҡайтһа, машиналар янында тығынараҡ булып китә, шуға үҙемдең махсус бүлмә-цехым буласаҡ, – тип хыяллана ул.

Лена апай тормош иптәше менән өс бала үҫтергән, улар башлы-күҙле инде, ейән-ейәнсәрҙәр бүләк итеп өлгөргәндәр. Шулай һәүетемсә генә үҙ һөнәренә үҙе ҡыуанып йәшәп ята Әхмәтйәновтар ғаиләһе.

– Ниндәй генә шарттар булмаһын, кешегә һәр ваҡыт ашарға һәм кейенергә кәрәк. Шуға күрә ҡатынҡыҙҙар бешерә йә тегә, аҙаҡ уны һата белергә тейеш, тип иҫәпләйем. Һөнәрле кеше юғалып ҡалмай ул, – тип оҙатып ҡалды ул беҙҙе.

### Ә мәктәптә тормош гөрләй

Түбәнге Ләмәҙ ауылының мәктәбенә беҙ төштән һуң ғына барып етә алдыҡ. Был ваҡытта балалар әллә ҡасан ҡайтышып бөткәндер инде тип килһәк, гөрләп торған мәктәп ҡаршы алды беҙҙе. Бәхеткә, был ауыл мәктәбенең икенсе ҡатында интернат урынлашҡан икән. Күрше ауылдан килеп йөрөгән балалар ошонда йәшәп уҡый. Беҙ уларҙың өйгә эш әҙерләп йөрөгән мәленә тура килдек.

Мәктәп ҙур, тәҙәк. Уның иҫке өлөшөнә Башҡортостандың беренсе Президенты Мортаза Рәхимов төкәтмә төҙөткән булған. Уны тамамлаған кешеләр араһында билдәле шәхестәр ҙә күп. Мәҫәлән, мәғариф министры булған Зөһрә Рәхмәтуллина, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Рафаил Зинуров һәм башҡалар уҡыған. Хәҙер мәктәптең яңы геройҙары ла бар – махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы яугирҙәр. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, былтыр ике егеттәре батырҙарса һәләк булған, мәктәптә улар иҫтәлегенә таҡтаташ аҫылған.

Мәктәп директоры Таңһылыу Әсфи ҡыҙы Харунова ла урынында ине.

– Быйыл мәктәптә 98 уҡыусы белем ала, шуларҙың 17-һе IX класты тамамлай. Балалар хәҙер Берҙәм дәүләт имтиханынан ҡурҡа, шуға артабан ҡалғылары килмәй, һөнәр алыу яҡлылар. Күрше ауыл-



Умартасы эшҡыуар Рәшит Аҙнабаевтың пасекаһында.

# ИҒТИБАР ҮҘӘГЕНДӘ – ИГЛИН РАЙОНЫ



## Мөмкинлектәре киң

### Конгресс-холда районды турист ҡеүәте күрһәтелде

Баш ҡаланан ни бары ярты сәғәтлек юл алыҫлығында булыуына ҡарамаҫтан, Иглин районы туризм күҙлегенән баһаланып бөтмәгән. Башҡортостан Хөкүмәте ике йыл элек Иглин районын социаль-иҡтисади йәһәттән үҫтереү буйынса махсус саралар планын әҙерләргә тигән ҡарар ҡабул иткәйне. Саралар планы киң, ул сәнәғәтте лә, социаль өлкәне лә, юлдар төҙөүҙе лә, социаль өлкә объекттарын яңыртыуҙы ла үҙ эсенә ала. Иглин районының туристик йүнәлештә республикабыҙ картаһында сағыу йондоҙ булыу өсөн бөтә мөмкинлектәре лә бар.


Мирхәйҙәровтарҙың татыу ғаиләһе.


Оҫта тегенсе Лена Әхмәтйәнова.


Мәктәп директоры Таңһылыу Харунова.

дан балалар бишенсе класҡа килә, улар өсөн махсус интернат бар, – ти ул.

Интернат 34 урынға иҫәпләнгән, быйыл унда 37 бала йәшәй. Ике тәрбиәсе һәм ике төнгө тәрбиәсе ҡарай уҡыусыларҙы. Дөйөм алғанда, коллективта 16 педагог эшләй икән. Бынан тыш, мәктәптә биш йәшлек балалар өсөн ҡыҫҡа ваҡытлы тороу төркөмө ойошторолған. Көн һайын өс сәғәткә киләләр, уҡытыусылар уларҙы мәктәпкә әҙерләй.

– Ул төркөмгә әле 12 бала йөрөй, ә беренсе класҡа туғыҙ бала килер тип көтәбеҙ. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, балалар һаны яйлап кәмей шул, тик бер нимәгә ҡарамай мәктәбебеҙ тулы тормош менән йәшәй, – ти директор.

Ысынлап та, мәктәп ҡала балалары көнләшерлек. Улар төрлө программалар, шул иҫәптән "Үҫеш нөктәһе" проекты буйынса заманса ҡорамалдар, техника алып кластарын йыһазландырған, физика һәм химия дәрестәре өсөн махсус лабораториялар эшләгән. Информатика класында һәр кемгә етерлек яңы ноутбуктар тора.

Мәктәптә ике агрокласс эшләй. Береһендә балалар ҡортсолоҡ, икенсеһендә үҫемлекселек менән шөғөлләнә. Уны төштән һуң дәрестән тыш сара итеп ойоштороғандар. Директор әйтеүенсә, уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныуы бик ҙур, теләк менән йөрөйҙәр. Ҡортсолоҡ класында шөғөлләнгән балалар бал ҡорттарын үрсетергә өйрәнә. Ауылдың умартасы эшҡыуары Рәшит Аҙнабаевтың пасекаһында мәктәптең ун баш умартаһы ултыра. Тәжрибәле ҡортсо балаларҙы һөнәр нескәлектәренә өйрәтә, улар йәйен бал ҡорттары ҡарап, үҙҙәренә ҡыш буйы ашханала ашарлыҡ бал һығып ала.

Үҫемлекселек класы ла популяр. Мәктәп янында участка бар, унда балалар үҙҙәре әҙерләгән орлоҡтан үрсетмә үҫтерә, уларҙы ултыртып, көҙөн ҙур уңыш ала һәм ҡыш дауамында картуф, кәбеҫтә, кишер кеүек йәшелсә ашап ҡыуана.

Таңһылыу Әсфи ҡыҙы әйтеүенсә, мәктәптә түңәрәктәр ҙә күп. Көрәш, волейбол, шахматты ярата балалар, фольклор ансамбле, театр, вокал, оҫта ҡул түңәрәктәре эшләй. Балалар район кимәлендәге ярыштарҙа ихлас ҡатнаша һәм призлы урындар алып ҡайта.

Интернатта йәшәгән балалар менән дә танышып сыҡтыҡ. Кемдер тәрбиәселәре Динара Ҡотләхмәтова менән бергә өйгә эш әҙерләй, кемдер ял итә ине. Балаларҙы ашханала дүрт тапҡыр тәмле итеп туҡландыралар. Улар шулай уҡ буш ваҡыттарында түңәрәктәргә йөрөй. Ә ял көндәрендә мәктәп автобусы уларҙы өйҙәренә илтеп ҡуйып, дүшәмбе кире килтерә.

## Ауылды ғаиләләр йәмләй

Ауылдарға командировкалар барышында мотлаҡ рәүештә күмәк, өлгөлө ғаиләләрҙе барып күрергә тырышабыҙ. Был юлы ла шулай иттек. Тәүҙә Түбәнге Ләмәҙҙә йәшәгән Рәсимә Хәлитова менән Наил Шәйхетдиновтарҙа булып киттек. Йәш ғаиләлә өс һәм бер йәшлек ике бәләкәй бала үҫә. Рәсимә йорт эштәре, балалар ҡарау менән мәшғүл булһа, ғаилә башлығы – оҫта. Ул ағас менән эш итергә ярата.

Ғаилә күптән түгел генә иркен өй һалып ингән. Бында хужаның оҫта ҡулы тейгәне күренеп тора. Йортта төҙөлөш эштәре тамамланмаһа ла, уның киләсәктә бик күркәм буласағы аңлашыла. Наил өҫтәл-карауаттарҙы, башҡа йыһаздарҙы үҙе эшләгән. Үҙенең оҫтаханаһында заказ буйынса кешеләргә лә әҙерләп бирә. Ауылда умартасылар күп булғас, был шөғөл өсөн дә күп кәрәк-ярaҡты ул үҙ ҡулдары менән яһай.

– Бәләкәйҙән ағас эшен ярата иптәшем. Үҙенә кәрәкле инструменттар һатып алды ла эш башланы. Хәҙер өйҙө бөтәйтеп бөткәс, ауылда ныҡлап төпләнергә, умарта тоторға, күп итеп мал-тыуар аҫрарға йыйынабыҙ. Ауыл тормошо ҡурҡытмай, бында рәхәтләнеп көн итергә була, – ти хужабикә.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йорт хужаһын тап итә алманыҡ. Яҙғы эштәр гөрләп торған саҡ булғас, ул малайы менән сүп-сар ташларға киткәйне. Әммә уның ҡулы йылыһы тейгән әйберҙәрҙе күреп, һоҡланып киттек.

Икенсе ғаилә ауыл биләмәһенең Оло Ҡарамалы ауылында йәшәй. Бында беҙҙе биш балаға ғүмер биргән Мирхәйҙәровтар ҡаршы алды. Үкенескә, бында ла ғаилә башлығы эше буйынса Өфөгә киткән булып сыҡты. Өлкән ҡыҙҙары Гөлназ баш ҡалала медицина колледжында уҡып йөрөй. Өйҙә хужабикә Римма Мирхәйҙәрова һәм дүрт бәләкәй бала ҡаршы алды. Айназ – һигеҙенсе, Айҙар – алтынсы класта уҡый, Гөлдәр беренсе класҡа барырға әҙерләнә. Бәләкәй Хәйҙәргә иһә өс кенә йәш. Ғаилә башлығы Ғәлей Ғәлимйән улы Түбәнге Ләмәҙ урта мәктәбендә водитель булып эшләй.

Бынан тыш, улар ҙур хужалыҡ та тота икән. Егермеләп баш аты, 30 баш һыйыр малы, ҡош-ҡорт, ваҡ мал аҫрай егәрле ғаилә. Ит, әҙләп булһа ла, һөт-май һата улар. Хужалыҡта тракторҙар һәм башҡа кәрәкле техника бар. Шулай уҡ Ғәлей Ғәлимйән улы урман менән дә шөғөлләнә, уның ҙур булмаған пилорамы бар. Унда өс эшсе эшләй, бура бурайҙар, ағас яралар. Һәм был яҡтың йолаһы буйынса умарта тотоп, бал ҡортон бағырға ла ваҡыт таба улар.

– Һәр эштә балалар ярҙам итешә, малайҙар ҡул араһына инеп бөттө. Тик уларҙан күпте талап итмәйбеҙ, әле иң мөһим эштәре уҡыу, белем алыу, төрлө яҡлап үҫешеү, – ти Римма ханым.

Был күркәм йорттан йылылыҡ бөркөлөп торған кеүек. Татыу балалар бер-береһенә ярҙам итә, әсәләренең ныҡлы терәктәре икәне лә күренеп тора. Бәләкәйҙәре иһә ата-әсә ҡосағында иркәләнеп кенә үҫә. Бер һүҙ менән әйткәндә, был ғаиләнән, ғөмүмән, ауылдан йылы, матур тойғолар менән ҡайтырға сыҡтыҡ.


Мәктәп-интернат уҡыусылары дәрес әҙерләй.


Махсус хәрби операция геройҙарына арнала.

Айрат Нурмөхәмәтов фотолары.


Аҫылмалы күпер – ауылдың йәме.

СПОРТ



## Азалияға уңыштар теләйек!

Ул быға лайыҡ!

Яҡташыбыҙ Азалия Әминева Венесуэлала үткәрелгән V Боливариан (ALBA) ярыштарында Рәсәйҙең ҡатын-ҡыҙҙар командаһы составында ҡатнаша. Сара 27 апрелгә тиклем Каракас ҡалаһында бара.

# Ринаттың еңәсәгенә ышаныс ҙур

**“Беҙ бергә. Спорт” йәйге сурдлимпия уйындарында үҙ көсөн һынаясаҡ Ринат Ҡадиров – Стәрлетамаҡ ҡалаһынан. Ул – Рәсәйҙең дзюдо, самбо буйынса спорт мастеры. Спортсы насар ишеткәндәр араһында дзюдо буйынса Рәсәй чемпионатында бронза (2009), көмөш миҙал (2014) яулаған. Ринат Ғаяз улы шулай уҡ күп тапҡыр Рәсәй, донъя, Сурдлимпия уйындары, Европа чемпионы.**

Ринат Ҡадиров Физик культура институтының өсөнсө курсында белем алғанда насар ишеткәндәр араһында Көнсығыш алыштары буйынса XIV донъя чемпионатында еңеп сыҡҡан һәм дзюдо буйынса халыҡ-ара класс спорт мастеры нормативтарын үтәгән. Был ярыштар Венесуэлала үткәрелгән. Ул ваҡытта Стәрлетамаҡтағы дзюдо мәктәбе, Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры Юрий Зубковтың тәрбиәләнеүсеһе 90 килограмға тиклемгә ауырлыҡ үлсәмендә үҙ көсөн һынаған.

Ринат Ҡадиров – 2009 йылдан алып Рәсәйҙең йыйылма команда составында. 2013 йылда Болгарияның София ҡалаһында үткәрелгән Сурдлимпия уйындарында шәхси һәм командалар араһындағы ярыштарҙа берәр алтын миҙал яулағайны. Тағы ике йылдан Ереван ҡалаһында ойошторолған Европа чемпионатында алтын миҙалға лайыҡ булды. Тағы дүрт йылдан һуң Бельгияла үткәрелгән ошондай уҡ ярыштарҙа шәхси беренселектә – икенсе, команда составында беренсе булғайны, 2017 йылда Төркиәлә шәхси беренселектә иһә – алтын, ә ил командаһы составында көмөш миҙал яуланы. Ике йыл элек Францияның Версаль ҡалаһында һаңғырауҙар араһында дзюдо буйынса донъя чемпионатында ир-егеттәр араһында 90 килограмға тиклем ауырлыҡ үлсәмендә Ринат Ҡадиров икенсе урынға сыҡты.

Бөгөн Ринат Өфөлә Сурдлимпия уйындарына әҙерләнә. Хәҙер уның тренеры – Рәсәйҙең дзюдо буйынса халыҡ-ара спорт мастеры, Башҡортостандың атҡаҙанған физик культура хеҙмәткәре Валентин Пегов. Ул – Башҡортостан дәүләт аграр университетының (Ринат Ҡадиров ошо юғары уҡыу йортон да тамамлаған. – **А.Н.**) тренер-уҡытыусыһы, Рәсәйҙең Сурдлимпия командаһы тренеры. Ул Өфө районының Рус Юрмашы ауылында тыуып үҫкән.

Белгестәр әйтеүенсә, дзюдо – техник йәһәттән ҡатмарлы ғына спорт төрө. Шуға уның менән шөғөлләнгән спортсы ныҡышмал, сәмсел, сабыр һәм маҡсатлы булырға тейеш. Тағы был – “аҡыллы” спорт төрө, йәғни ярыш ваҡытында физик әҙерлек менән бергә аҡыл менән эш итеү ҙә мөһим. Ошо сифаттарҙың барыһы ла Ринат Ҡадировҡа хас.

– Спортсыларҙың төрлө ярыштарҙа үҙен даими һынап ҡарауы мөһим. Әле Өфөлә үткәреләсәк Сурдлимпия уйындарына әҙерләнәм, – ти республикабыҙ спортсыһы.

Яҡташыбыҙға мәртәбәле ярыштарҙа уңыштар теләйек. Тыуған ереңдә үткәргән спорт бәйгеһендә алтын миҙал яуларға яҙһын! Спортсы өсөн ошонан да ҙур бәхет бармы икән?!



Фото: Ринат Ҡадировтың шәхси архивынан.

## Сағыу халыҡ-ара спорт сараһы буласаҡ

**Быйыл 23 июлдән 2 августҡа тиклем Өфөлә беренсе тапҡыр “Беҙ бергә. Спорт” йәйге сурдлимпия уйындары була. Ярыштарҙа 2,3 меңдән ашыу атлеттың ҡатнашыуы көтөлә.**

Илебеҙҙең бөтә төбәктәренән һәм дуҫ дәүләттәрҙән спортсылар 21 дисциплинала миҙалдар өсөн көрәшәсәк. Улар өсөн ярыш тәжрибәһен һаҡлау маҡсатында әлеге күләмле ярыштарҙы үткәреү бик мөһим.

Әйткәндәй, Башҡортостанда сурдлимпия уйындарының 14 йүнәлеше үҫешкән, шуларҙың 11-е – йәйге спорт төрө. Беҙҙең вәкилдәр бадминтон, дзюдо, каратэ, тхэквондо, спорт ориентиры, йөҙөү, атыу, шашка, шахмат буйынса алдынғылыҡты бирмәй.

“Беҙ бергә. Спорт” йәйге сурдлимпия уйындары алты майҙансыҡта үтәсәк, улар араһында иң ҙурҙары – Рима Баталова исемендәге Спорт әҙерлеге үҙәге, “Динамо” спорт комплексы һәм Спорт һарайы. Уйындарҙы асыу тантанаһын “Өфө-Арена”ла уҙғарыу күҙаллана.

Шуныһы иғтибарға лайыҡ: һаулыҡ мөмкинлектәре сикләнгән булыуға ҡарамаҫтан, спорт менән шөғөлләнеүселәр йылдан-йыл күбәйә, тулы ҡанлы тормошта йәшәй. Уларға рух көсө һәм ныҡлы ихтыяр, ҡыйыулыҡ һәм һәләт кеүек сифаттар хас. Сираттағы уйындар ҙа спортсыларҙың һәм спорт һөйөүселәрҙең күңелендә иң сағыу ярыштарҙың береһе булараҡ хәтерегеҙҙә ҡалыр, тигән өмөттәбеҙ.

## Депутаттар ҙа үҙ көсөн һынаны

**Урындағы үҙидара көнө алдынан Стәрлебаш ауылындағы балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәбендә урындағы үҙидара хеҙмәткәрҙәре араһында Бөтә Рәсәй “Хеҙмәткә һәм оборонаға әҙер” физкультура-һауыҡтырыу комплексы фестивале ойошторолдо.**

Муниципаль хеҙмәткәрҙәр һәм депутаттар спорт күнекмәләрен эшләне һәм үҙ көсөн һынап ҡараны. Улар, үҙҙәренең йәш категорияларына ярашлы, төрлө физик күрһәткестәр буйынса тест үтеп кенә ҡалманы, яҡшы кәйеф һәм дәрт-көс тупланы.

Әйткәндәй, бынан өс йыл элек Стәрлебаш балалар һәм үҫмерҙәр спорт мәктәбе биләмәһендә ГТО нормативтарын тапшырыуға үҙаллы әҙерләнеү өсөн урам майҙансығы булдырылғайны. Унда ҡуйылған ҡоролмаларҙа стәрлебаштар нормативтарҙы тапшырыуға әҙерләнеп кенә ҡалмай, бушлай физик күнекмәләр ҙә эшләй. Тимәк, сәләмәт тормош алып барыуға тағы бер аҙым яһала.



Фото: vk.com/rakhmangulov.ru

## “Амфибия” ишектәрен асасаҡ

**Нефтекамала яңы спорт комплексына нигеҙ һалынды.**



Фото: sport.bashkortostan.ru

Унда йөҙөү бассейны һәм уйын залы буласаҡ. Был спорт комплексының быйыл декабрҙә асылыуы көтөлә. “Амфибия” тип исемләнгән был объект былтыр “Бизнес-спринт” федераль проектына ярашлы тормошҡа ашырылған дәүләт-шәхси партнерлыҡ тураһында концессия килешеүҙәре проекттары араһында еңеү яулаған. Һөҙөмтәлә төҙөлөш өсөн 269,653 миллион һум күләмендә федераль грант яуланған. Майҙаны дүрт мең квадрат метр булған спорт комплексының инвесторы – “НефтеГазСтрой” яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте.

Белеүебеҙсә, “Бизнес-спринт” проектына ярашлы, Башҡортостанға бер миллиард һумдан ашыу аҡса йәлеп ителгән. 2023 йылдың 28 февраленән 1 мартына тиклем Мәскәүҙә “Беҙ бергә. Спорт” күргәҙмәһе барышында “Бизнес спринт (Мин спортты һайлайым)” федераль программаһы нигеҙендә дәүләт-шәхси партнерлыҡ тураһында тәүге концессия килешеүҙәренә ҡул ҡуйылған. Республикабыҙ был проект буйынса яңы спорт объекттары төҙөүгә федераль бюджеттан 748 миллион һум аласаҡ.

## Ирекмән булырға теләйһегеҙме?

**Рәсәйҙә һәм дуҫ илдәрҙә һаңғырауҙар спортын лайыҡлы үҫтереү һәм ойоштороу күп ғәмәлдәргә бәйле. Уларҙың береһе – ирекмәндәр ярҙамы. Уйындарҙы лайыҡлы үткәреү өсөн ирекмәндәрҙе әҙерләү ҙә бик мөһим.**

Унда ҡатнашыусыларҙың береһе – Ольга Вячеславовна Шевнина. Ул – Бөтә Рәсәй Һаңғырауҙар йәмғиәтенең Башҡортостан буйынса бүлексәһенең беренсе ҡатын-ҡыҙ рәйесе, Рәсәйҙең хоккей буйынса атҡаҙанған тренеры Вячеслав Шевниндың ҡыҙы. Уның командаһы ярыштарҙы әҙерләүҙә әүҙем ҡатнаша.

Түбәндәге платформала “Беҙ бергә. Спорт” йәйге сурдлимпия уйындарында ирекмән булып теркәлергә мөмкин:

Добро.ру:

https://dobro.ru/event/10314495

**Махсус битте Айһылыу НИЗАМОВА әҙерләне.**

ӘҘӘБИ ИЖАД



## Сабир Шәрипов: белешмә

Иң уҡымлы авторҙарҙың береһе ине

Башҡорт прозаһын яратып уҡыусылар араһында иң популяр авторҙарҙың береһе Сабир Шәрипов ине. Оҫта журналист булараҡ та абруй ҡаҙанған ине ҡәләм оҫтаһы.
Сабир Нәгим улы Шәрипов (20 март 1948 йыл – 31 август 2018 йыл) – яҙыусы, журналист һәм тәржемәсе, 1986 йылдан – СССР-ҙың Яҙыусылар һәм 1991 йылдан Журналистар союздары ағзаһы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре (1997).

# Артылған артылыштар

## Сабир Шәрипов өс жанрҙа берҙәй оҫта эшләнә

✍ Әмир ӘМИНЕВ

**Сабирҙың ижадына беренсе булып Фәрит ағай Исәнғолов иғтибар итте булһа кәрәк. Билдәле яҙыусы үҙенең “Прозабыҙҙың йәш көстәре” тип атаған, уның “Тауҙарҙағы эҙ”, Таңсулпан Ғарипованың “Ялан сейәһе”, минең “Ҡайын япрағы” исемле тәүге китаптарыбыҙҙы, Мирас Иҙелбаевтың хикәйәләрен анализлаған күләмле мәҡәләһен 1983 йылдың февралендә “Кызыл таң” гәзитендә баҫтырҙы. Мәҡәлә Сабир хикәйәләренә генә түгел, үткән быуаттың 80-се йылдар башында прозаның “йәш көстәре” исәпләнгән дүртебеҙ өсөн дә тәүге һүҙ, тәүге иғтибар булғандыр ҙа әле.**



Нәсих Хәлисов фотоһы.

ӘЙТКӘНДӘЙ

**Сабирҙың журналистикаһы ла художестволы әҫәр кеүек мауығып уҡырлыҡ ине. Уның теге йәки был күренекле шәхес тураһындағы очерктары, һүрәтләмә-портреттары – һүҙ менән яҙылған ыҡсым картина ул. Юлйөрөм-сәйәхәттәрен, тарихты байҡаған эҙләнеүҙәрен ал, социаль проблемаларҙы күтәргән сығыштарын уҡы, коллегаларының ижадын юллаған рецензияһы, тәнҡит мәҡәләһе менән таныш – һәммәһе лә ҡағыҙға рәссам ҡулы менән төшөрөлгән.**

### “Яҙыусы булыр өсөн тыуғайны”

Әлбиттә, Сабир ижады әлеге китаптан башланмай, унда инген хикәйәләре, бынан тыш очерктары, тәржемәләре республиканың ваҡытлы матбуғат биттәрендә 70-се йылдар аҙағында ыңлап күренә ине инде. Миңә ҡалһа, аталған әлеге йыйынтығы уның әҙәбиәткә килеүен раҫлап ҡына ҡуйҙы.

Фәрит ағай Сабирҙың был китабындағы бер нисә хикәйәһен ентекле анализлай, табыштарын күрһәтә, тематикаһын, персонаждар характерын асыуҙағы ынтылышын, тасуирлау манераһын, стилен тоҫмалларға тырыша. Мәҡәләлә шундай баһалама бар: “...Ошо йыйынтыҡ буйынса Сабирҙың төп тема йүнәлешен, стилен, художество мөмкинлектәрен бик асыҡ төҫмөрләргә була. Йәш авторҙың туған тәбиғәт, уның байлығын әрәмшәрәм итмәй файҙаланыу, һаҡлау мәсьәләләренә бағышланған әҫәрҙәре бик отошло. Улар яратып яҙылған. Эстәлектәре лә мауыҡтырғыс. Башҡортостандың үҫемлеккә, кейеккә, еләк-емешкә бай урмандары, мөһабәт тауҙары, ташҡын йылғалары, урмансылар, уны һаҡлаусылар, һунарсылар, егерҙар Сабир хикәйәләрендә киң сағылыш таба, тәрән һөйөү менән тасуирлана, кеше һәм тәбиғәт мөнәсәбәттәрендә характерҙар асыла...”

Тапҡыр һүҙҙәр. Унан теүәлерәк әйтеп тә булмайҙыр. Хикәйә жанрын, ғөмүмән, прозаны нескә аңлаған, үҙе лә оҫта хикәйәсе Фәрит Исәнғолов йәш ҡәләмдәшенең ғүмерлек ижади темаһы булып ҡаласаҡ урман, урманда эшләүселәр, уны һаҡлаусылар темаһын уның тәүге хикәйәләрендә үк күргән һәм ижадҡа үҙ темаһы менән килгәнлеген хуплаған. Әлбиттә, Сабир артабанғы ижад юлында был теманан ситкә лә сыҡҡыланы, уныһы шулай уҡ тәбиғи, гел генә бер ҡылда уйнап булмай, әммә, ҙурҙан ҡупҡанда, ул тема барыбер ҙә уның төп ҡиблаһы булып ҡалды.

Сабир Шәрипов ижады Фәрит Исәнғолов һүҙенән һуң өлкәнерәк быуындың, тиңдәштәренең, сағыштырмаса йәшерәктәрҙең дә тел осонан төшмәне. Ижад һуҡмағы башланған осоронда уның хикәйәләре, повестары, артабан инде романы хаҡында төрлө йылдарҙа халыҡ яҙыусыһы Н. Мусин, фән докторҙары З. Нурғәлин, С. Поварисов, Г. Гәрәева, М. Нәҙерғолов, В. Псәнчин уның ижадын төрлө аспекттарҙа яҡтыртты, Р. Солтангәрәев, Ә. Вахитов, Р. Хажиев һәм А. Филиппов, Я. Хамматов һәм башҡа әҙиптәр яҙҙы. Уларҙың барыһы ла авторҙың алған материалының ерлекле, тормошсан булыуын билдәләне, геройҙар характеры ваҡиғалар, кисҡен бәрелештәр аша асылғанлығын, уларҙың һәр ҡайһыһының үҙ индивидуаль йөҙә барлығын, иркен тасуирлау манераһын һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ғөмүмән, Сабирҙың бер әйбере лә иғтибарһыҙ ҡалманы, барыһына ла әҙәби тәнҡит ваҡытында үҙ һүҙен әйтә килде.

Шәхсән мин үҙем Сабир Шәрипов ижадын, нигеҙҙә, өс яҫылыҡта күрәм. Ул, шулай тип әйтергә яраһа, ошо өс жанрҙы ла, мисәүҙәге аттар һымаҡ, бергә алып бара алды. Улар – проза, журналистика һәм тәржемә.

Нәфис әҙәбиәткә журналистика аша килгәндәр йыш ҡына байтаҡ ваҡыт журналистиканан сыға алмай “йонсой”, бөтөнләй сыға алмағандар ҙа бар, ә Сабирҙың журналистикаһы ла художестволы әҫәр кеүек мауығып уҡырлыҡ ине. Уның теге йәки был күренекле шәхес тураһындағы очерктары, һүрәтләмә-портреттары – һүҙ менән яҙылған ыҡсым картина ул. Юлйөрөм-сәйәхәттәрен, тарихты байҡаған эҙләнеүҙәрен ал, социаль проблемаларҙы күтәргән сығыштарын уҡы, коллегаларының ижадын юллаған рецензияһы, тәнҡит мәҡәләһе менән таныш – һәммәһе лә ҡағыҙға рәссам ҡулы менән төшөрөлгән. Сөнки ул ябай мәғлүмәт менән әҙәби һүҙ араһындағы айырманы бик яҡшы аңлай ине. Быны аңлар өсөн яҙыусы булып тыуырға кәрәк. Ә Сабир яҙыусы булыр өсөн тыуғайны. Мин уны бүтән һөнәр эйәһе итеп һис кенә лә күҙ алдына килтерә алмайым.

### Яратып яҙҙы

Яҙғандарының һәр ҡайһыһында ла ул ихлас булды, бар күңелен, йөрәген һалды, Фәрит Исәнғолов ағай әйтмешләй, яратып, тәрән һөйөү менән яҙҙы. Һәр ҡайһыһына ниндәйҙер уңышлы деталь, асҡыс таба белде – быныһы шулай уҡ рәссам ҡылығы, халыҡ ижадына, фольклорға таянды. Ижадына шулай уҡ еңелсә юмор, ым-ишара, мәрәкәләү, төрттөрөү һымаҡ мотивтар ҙа хас ине. Шуға ла прозаһы ла, журналистикаһы ла еңел уҡылды, аңлайышлы һәм ябай булды.

Әйткәнемсә, ул төрлө темаға ла яҙа ала торған универсаль журналист та ине. Әҙиптәр тураһында әйтәһе лә түгел, үҙ цехы тигәндәй, театр әһелдәре, артистар, йырсылар, рәссамдар, композиторҙар, фән кешеләре хаҡында профессиональ кимәлдә һүҙ йөрөттө. Уларҙың һәр ҡайһыһы, әйткәнемсә, уҡымлы булды, йылы булды, сөнки ниндәй һөнәр кешеһе тураһында яҙһа ла, уның эске донъяһына инә белде, уй-кисерештәрен, өмөт-хыялдарын, ынтылыштарын ерлекле һәм ышандырғыс тасуирланы. Уларҙа кешенең тышҡы хәрәкәте түгел, күңел хәрәкәте, йөрәк хәрәкәте булды.

Мин уның һүҙ байлығына һәр саҡ һоҡлана торғайным. Ул халыҡтың һөйләш телен, халыҡ араһында йөрөгән лаҡап, ҡыҙыҡ хәлдәрҙе, көләмәстәрҙе яҡшы белә һәм әҫәрҙәрендә урынлы ҡуллана торғайны. Ошо һүҙ байлығы, иркен тасуирлау манераһы, йүгерек стиле, деталдәре уның прозаһын да, журналистикаһын да уҡымлы итте.

Сабирҙың төрлө телдән, нигеҙҙә, әлбиттә, рус теленән, башҡортса яңғыратҡан эштәре китапхананың бер кәштәһен тултырырлыҡ. Улар художестволы әҙәбиәт кенә түгел, төрлө жанрға ҡараған әҫәрҙәр. Был йәһәттән ул һайланып торманы ла буғай – үҙе хеҙмәт иткән редакциялар, китап нәшриәте, Яҙыусылар союзы ҡуша, һорай, үтенә икән, “кәрәкме, тимәк, эшләйбеҙ” тине лә ултырҙы ла эшләне. Йыш ҡына уның был күндәм шөғөлә үҙенең әҫәрҙәрен яҙырға ҡамасауланы ла: ваҡытын да алды, көсөн дә һурҙы. Нишләйһең, ижад ҡорбанһыҙ булмай шул. Ә ҙурҙан ҡупҡанда, шул рәүешле ул әҙәбиәттәрҙе байытты, халыҡтарҙы бер-береһенә яҡынайтты. Һуңынан уның хеҙмәттәре төрлө антологияларға, йыйынтыҡтарға, ғилми йәки фәнни баҫмаларға инеп китте. Һәм улар бөгөн дә мауығып уҡыла.

Бөгөн килеп шуны уйлайым, Яҙыусылар союзы идараһы ниндәйҙер мөғжизә менән художестволы әҙәбиәт өлкәһендә тәржемә эше өсөн премия булдыра ҡалһа, Сабир был бүләккә, һис шикһеҙ, тәүгеләрҙән булып дәғүә итә алыр ине, сөнки оҙаҡ йылдар дауамында рус телендә ижад иткән үҙебеҙҙең әҙиптәребеҙҙең дә, күршеләрҙә, хатта сит илдәрҙә йәшәгәндәрҙең дә күп әҫәрҙәрен башҡортсаға ауҙарҙы. Фәрит ағай Исәнғолов әйтмешләй, уларҙы тәрән һөйөү менән башҡарҙы, үҙ әҫәрен яҙған кеүек башҡарҙы. Ә һәр эш ниндәй форматта булһа ла баһа алырға тейеш.

Тәбиғәт бушлыҡты яратмай. Бер нәмә юҡ булһа, уның урынына икенсеһе хасил була. Тормошта ла шулай: берәүҙәр китә, икенселәр килә, йәғни быуындар алмашынып тора. Ләкин бер яҙыусыны икенсеһе алыштыра алмай. Уларҙың һәр ҡайһыһы ҡабатланмаҫ, алыштырғыһыҙ фекер эйәһе, индивидуаль шәхес. Сабир Шәриповтың да үҙе йәшәгән донъяһы, йөҙ тотҡан ҡиблаһы булды, үҙе генә әйтә алған һүҙе, фекере булды. Шуның менән ул ҡәҙерле лә. Әйтәгүр, уның уҡымлы прозаһы, ихлас журналистикаһы, йылы тәржемәләре бөгөн генә түгел, алдағы көндәрҙә лә уҡылыр. Быға минең иманым камил.

ХИКӘЙӘ



## Ғаиләгә ҡыҫылырға ярамай

Йәштәр үҙҙәренсә донъя көтһөн

Психологтар әйтеүенсә, улын килененән ҡыҙғанған, кәңәштәре менән ялҡытҡан әсәләр сепарация осорон үтеп бөтмәгән. Йәғни физик һәм рухи яҡтан балаһынан айырыла алмай, уны һаман да үҙ ҡанаты аҫтынан сығарырға теләмәй. Был иһә төрлө аңлашылмаусанлыҡтарға, хатта йәш ғаиләнең тарҡалыуына килтерергә мөмкин. Ошоно ваҡытында аңлау зарур.

✍ Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА

# Матур көн



Нәсих Хәлисов коллажы.

– Аҡыл өйрәтмәгеҙ миңә! – тине...

Эйе, тап шулай тине, күҙен дә йомманы. Ауыҙы ла ҡыйшайманы. Теле ҡоро... Тфү! Үсен ҡандырғансы ҡутара һоғондороп ирешә лә алмай бит әле Ғәйшә. Хатта эстән генә ҡарғай ҙа алмай. Алмай, сөнки анауындай һүҙ ташлап ултырған йүнһеҙ бисә – унын килене. Берҙән-бер улының ҡатын булған нәмәһе, йәндәй күргән ейәненең әсәһе. Ошо ике сәбәп тә һәм әлеге кеше араһындағы бит йөҙләгә булған оятсылыҡ та унын ауыҙына йоҙаҡ һала. Ғорур ҡәйнә дәрәжәһен, боронғо ҡанундар аша ҡарағанда, әле ишек төбөнән дә үтеп китер хоҡуғы булмаған йәш килен ишараты менән сар-сор талашып тороу кимәленә төшөргәнә килмәй. Борола ла сығып китә. "Төкөрҙәө ул һиңә" тигән була торғайны әсәһе, атаһы әбейенең хәбәрен һанға һуҡмай китеп барһа. Ғәйшә лә шуны күрһәтте булды киленәнә, хатта ишекте япҡанда ирендәре лә ҡыбырланы:

– Төкөрәйем дә!..

Әйтерен әйтерһең дә быныһын, ә һин уны башҡарып ҡара? Тура мәғәнәһендә тимәйем инде, күсмә мәғәнәһендә лә була торған хәлме һуң әле? Шул бер нәмә арҡаһында улынан, унан да бигерәк ейәненән баш тарта ала буламы? Ә инде тегеләрен – айырырһың! Әллә нимәһенән шул хәтлем генә лә мөкиббән китһән бит улы бисәһенә. "Мәғинетте нәмәһе" тип һүҡрана торғайны әлеге әсәһе улдарын арбаған килендәренә үҙҙәре ишетмәгәндә. Шул көн килде хәҙер Ғәйшәгә лә. Киленен һыртынан әрләп ҡайтып бара. Ә уныһы, мин булмағанда мине туҡмаһағыҙ ҙа ярай, тигән шикелле ирәйеп ултырамы икән? Ҡәйнәнә урынына ҡуйҙым әле, ҡайһы яр унының, ҡайһыһы минеке икәнде күрһәттем, тип кинәнәләр...

Ауыр кисерҙе был сыйышты ҡатын. Эйе-эйе, дөрөҫ уҡынығыҙ – ҡатын. Өләсәй булһа ла, әбей түгел әле ул. Олораҡ инде ололоғон, алтын юбилейҙың алмаһын ашаған, әммә үҙен ҡарсыҡтар сафына индермәй. Шартлата баҫып эшләп йөрөй, пенсияға алыҫ әле. Туҡта... барыһы ла үтә генә лә яҡшы һымаҡ ине лә баһа. Нимәнән сыҡты, ҡайҙан башланды һуң әле был аңлашмаусанлыҡ?..

Ғәйшә улы менән бер ҡайғыһыҙ, бер низағһыҙ йәшәп ята ине. Унын тормошона ҡыҫылмай ҙа ине һымаҡ. Улы институтты тамамланы ла бер фирмала хеҙмәт юлын башланы. Беренсе йыл өйрәнде, икенсе йыл күренде, өсөнсө йыл һеҙөмтәләргә өлгөште, тигәндәй. Унан үҫтерҙеләр. Эш хаҡы ла ярайлы ғына, тотошлайы менән үҙаллы булды. Әсәһен ҡыуандырып шулай йөрөп кенә ятҡанда... Юҡ, бәлә килде, тип тә әйтә алмай ул. Әммә шатлыҡ та тип алдаша алмай. Көтөлмәгән хәл. Быны шулай дөрөҫөрәк булыр. Көтөлмәгән хәл сығып ҡуйҙы: улы ҡыҙ эйәртеп ҡайтты. Фирмаға яңы килгән йәш белгес икән. Улы шулай тип кенә таныштырһа ла, Ғәйшәнең мейеһен сыйып ҡына бер һиҙемләү үтте. Быны иҫкәртеп ҡуйыйм әле тип уйлап ҡына йөрөй ине, улы отпуск тураһында һүҙ сығарҙы:

– Быйыл ялға мине көтмә, әсәй. Минеке көҙгә ҡала.

– Ниңә? – тип һораны әсә кеше аптырап, сөнки улар йәйге ялды бергә үткәрергә өйрәнгән.

– Самираның отпускыһы көҙгә генә.

– Кемдең? – Кем икәнен бик яҡшы хәтерләнә лә, ҡабатлап һораны. Һәм артабанғы һорауы менән үҙен һатты ла: — Ә Самираның бында ни ҡыҫылышы бар?

Улы аҙ ғына өндәшмәй торҙо, әйтерен үлсәне, ахыры:

– Беҙ дуҫлашабыҙ, әсәй. Теге юлы аңлағанһыңдыр тип уйлағайным. Ялды бергә үткәрергә һөйләштек... һәм бергә йәшәргә.

– Ә?

– Һинең фатихаң менән, әлбиттә. Өйләнешеп.

Фатиха ҡасан бирелгән дә, улының өйләнеүе нисек үткәнен аныҡ ҡына хәтерләмәй ҙә инде Ғәйшә, йәштәргә тантана ла ҡунаҡтарға байрам булһа ла, яңғыҙ ул үҫтергән ҡатынға тауҙай мәшәҡәттәр ине был сара. Ярай әле улы үҙе аҡса йыйған. Әммә бит әле ул аҡса үҙе генә барыһын да хәл итмәй.

Баштан уҡ айырым сыҡтылар. Фатирҙа бер бүлмә буш тора, тип бот сапҡайны ла, улы өҙә һуҡты: беҙ шулай хәл иттек. Йә, Алла, берәүҙәр хәл иткән икән. Диван бирәйем тигәйне – баш тарттылар, яңыһы бар. Һаҡлап тотҡан балаҫын һөйрәп сығарғайны – алманылар, хәҙер мода икенсе, ти. Имеш... Картина тотоп барғайны, улы кире алып килде:

– Әсәй, Самира айырым стиль менән биҙәй бит фатирҙы. Унын үҙ зауығы. Һин был картинаңды берәйһенә бүләк итерһең, яраймы.

Иренен ҡымтыны ла, сабырлығын бөрөп тотоп, бер сәнсә ҡарау менән генә сикләнде Ғәйшә. Мәле етер – әйтермен, тип уйланы. Тик мәле етмәне лә етмәне. Килен ауырлы булып, уға кәңәш иткәндәре лә батманы. Хәҙер ауырлыларҙың да әллә ни башҡа тәртиптәре икән. Бала тыуғайны – үҙҙәренсә. Әйтерһең, Ғәйшә бала тапмаған да бәпләп үҫтермәгән. Һалыуы ла, кейендереүе лә, имеҙеү ваҡыттары ла төптә башҡа икән дә. Нимә тип кенә өйрәтһә лә, замана педиатрҙары ла, китаптары ла, хатта интернет та унан аҡыллы булып сыҡты ла торҙо. Был тамам йәнәнә тейҙе өләсәйҙең.

– Һеҙ ниңә минең менән һанашмайһығыҙ ул? – тине ул бер көн улына.

– Әсәй, әйҙә юҡтан проблема яһама? Беҙ баланы ҡарай беләбеҙ, тәрбиәләй алабыҙ. Ейәнең менән күрешеп тораһың, алып ҡалаһың, бер ҡаршылыҡ юҡ бит. Ҡалған барыһын да беҙ үҙебеҙ, зинһар. Яраймы?

– Һине үҫтергән әсәйеңә ышанмайһың, ә барлығы ике йыл бергән бер баймабашҡа аҙмышышны башкөллә тапшырғанһың икән.

– Әсәй?.. – улы көлкөгә һалыштырып ҡына ҡуймаҡсы.

– Көлмә. Егерме өс йәшлек ҡыҙҙа ниндәй аҡыл булһын әле? Ул күңеленә нисек ята – шулай эшләй. Ә әсәйең төптән уйлап...

– Самираға үҙенә әсәй булырға бир. Тығылма шуның донъяһына, мине ике араға ҡуймағыҙ.

– Ата-а-аҡ! Тығылам икән дә мин, ә?

– Әсәй... – улы хәҙер инде ялынғандай ҙа итте. – Үҙ тормошоң юҡмы ни һинең? Аралаш, ана, әхирәттәрең менән. Берәй түңәрәккә яҙыл. Әйҙә, бассейнға абонемент алып бирәйем? Бәлки, шифаханаға барып йөрөп ҡайтыу кәрәктер һиңә? Дуҫ табып ал үҙеңә, театрға йөрөргә, бергәләп сәй эсергә... яңғыҙ ҡартайғансы...

Ындайҙы уҡ көтмәгәйне улынан Ғәйшә. Асыуланып эйәген күтәрҙе лә... өндәшмәне. Улына өндәшмәне, әммә киленәнә әйтте:

– Ниңә улымды миңә ҡаршы ҡуяһың? Һин уға, киреһенсә, әсәйенде тыңла, ул тәжрибәле кеше, тип әйтергә тейешһең. Берәй нәмә башҡарып булһағыҙ, әйҙә, әсәйеңә барып кәңәшләшеп киләйек, тиген. Әле ҡарайым, ат хаҡына өҫтәл алып ултыртҡанһығыҙ. Шуны миңә әйтһәгеҙ, осһоҙораҡын да табыша инем. Баланы ла йәйге кейемгә иртә күсереп тораһың, өшөрөн уйлай алмайһың, ә ирендең ҡолағын да, күҙен дә томалай беләһең. Мин бит...

Баяғы һүҙҙе әйтте лә һалды шунда килене. Тыңлап-тыңлап торҙо ла, ысҡындырҙы бит:

– Аҡыл өйрәтмәгеҙ миңә!

Ҡалғанын беләһегеҙ...

Шул хәлдән һуң ысынлап уйға ҡалды Ғәйшә. Әллә улы менән килене хаҡлы микән? Артыҡ тығыламы ул йәш ғаиләгә? Күп өйрәтәме? Маҙаһыҙлаймы икән? Ялҡытамы? Һуң... шулар өсөн көн итеп ята түгелме ни? Ғүмерен шуларға бағышлап... Унан тағы, кәрәкме һуң уларға был бағышлау? "Үҙ тормошоң менән бул" тип тора бит улы ла. Бисәһенең һүҙенә төшөптәр инде...

Оҙаҡ ҡына эсе бошоп йөрөнө. Үҙен йәлләп илап та алды. Шулай ҙа ул аңһыҙ ҡатын түгел, был хәлваҡиғаларҙың нигеҙендә уға аңлашылып етмәгән, әлегә уға таныш булмаған ниндәйҙер тәбиғи ҡанундар ятыуын да һиҙенә, әммә күңел тигән нәмә уларҙы төшөнөргә теләмәй.

...Ауыр кисерештәр эсендә иғтибарһыҙ ғына үтеп-сүтеп йөрөгәндәрҙе күҙәтте. Ҡала паркында ял иртәһендә лә халыҡ етәрлек. Кемдәрҙер спорт артынан ҡыуа, кемдәрҙер эте артынан. Унын кеүек һауа һуларға сыҡҡандар ҙа етәрлек. Эскәмйәнең осондағы ҡатын, ана, күҙлеген төҙәтә-төҙәтә китап уҡый. Уҡыусыға "ялп" итеп ҡарап алғайны, тегеһе лә ҡарашын күтәрҙе.

– Ғәфү итегеҙ... – тип мығырлаған булғайны, эскәмйәләше шуны ғына көткән, тиерһең:

– Ваҡыт үткәреү өсөн генә ултырам. Бына, бынауындағы йәшниккә һалып кителгән китаптарҙы ҡараштырып.

Өйләнеп баҡһа, ысынлап, парк эскәмйәләре артына махсус йәшниктәр ҡуйылған да, кешеләр уҡыған йәки кәрәкмәгән китаптарын шунда ҡалдырып китә ала икән, ял итеүселәр алып уҡый, үҙҙәренекенә алмаштыра, күрәһең.

– Ҡайһылай шәп уйлап тапҡандар, — тип ҡуйҙы Ғәйшә лә. – Эйе, мин дә алып киләм, өйҙә ҡый булып ятҡанды ошонда ташып бөттөм, алып кителәр.

Ғәйшә нимәләр әйтергә тип хәбәр һайлағансы, телсән танышы яҡынырак шылып уҡ алды:

– Мин – Любовь Михайловна. Люба инде. Ә һеҙ?

– Ғәйшә... Га-и-ша, – тип ижекләп әйтеүенә, Люба артынан ҡабатланы. Унан үҙенсә асыҡлап та ҡуйҙы:

– Аиша тиһәм, еңелерәк әйтелә. Бигерәк матур исем, һинд кинолары һындағы һымаҡ.

Ғәйшә ризалашып баш ҡына ҡаҡты.

– Һеҙ... "һин"гә күсәйемме? Рәхмәт. Һин нимәгәләр борсолоп ултыраһың, эйеме?

– Күренеп уҡ торамы ни?

– Күренмәһә лә, ишетелә. Ауыр һулап ҡуяһың, ҡулдарың урын тапмай, тура ҡарап та күрмәйһең...

(Аҙағы бар).

## ТОРМОШ ҺАБАҠТАРЫ



### Кәйеф күтәренке булһын!

Бының өсөн ризыҡтарҙы белеп ашағыҙ

Кеше организмында серотонин гормоны кәмеһә, ул үҙен бәхетһеҙ тоя башлай, кәйефе төшә. Уның кимәлен күтәреү өсөн ябай углеводтар тупланған аҙыҡтарҙан – аҡ икмәк, дөгө, макарон, кәнфит, торт кеүек ризыҡтарҙан тыйылырға кәрәк. Омега-3 серотонин кимәлен күтәрә, шуға күрә балыҡ, үҫемлек орлоҡтары, сөтләүектәрҙе даими ашағыҙ. Тағы ла был гормон кимәлен арттырыусы төп ризыҡтарҙың береһе – ҡара төҫтәге шоколад, тик сама тураһында онотмағыҙ.

# Бәхеткә хаҡым бармы?

## Үткәндәрем һаман тынғы бирмәй...

✍ Гөлдәр ЯҠШЫҒОЛОВА

**Был тарихты беҙгә Венера исемле ҡатын “Бәйләнештә” селтәрендә ебәргән ине. Уның яҙмышы, бәлки, кемдер өсөн йәлләүес, икенселәргә фәһемле булыр, өсөнсөләр бөтә бәләләрендә ҡатындың үҙен ғәйепләр. Әле ул тормошон яйларға тырыша, тыныс ҡына йәшәгеһе килә, әммә үткәндәре тынғылыҡ бирмәй...**



Фото: primeta24.ru

“Мин бик иртә, 16 йәшемдә, кейәүгә сыҡтым. Иремә 21 йәш ине. Уның ғаиләһе беҙҙең бергә булыуға ҡаршы ине, әммә мине ҡыуып ҡайтарманылар. Минекеләр ҙә риза булманы, шулай ҙа артымдан бер кем дә эҙләп килмәне. Атайым менән әсәйем айырылған, икеһенең дә үҙ тормошо. Ҡайным “никах кәрәк” тигәс, район үҙәгендәге мәсеткә инеп, мулланан уҡытып сыҡтыҡ.

Шулай итеп, ҡайным, ҡәйнәм, иремдең өс ир туғаны менән бергә йәшәй башланыҡ. Башта барыһы ла яҡшы кеүек ине, әммә бер аҙ йәшәгәс, иремдең ҡаты холоҡло, үпкәсел, үҙ һүҙле кеше булыуы асыҡланды. Миңә ҡул күтәреүҙән дә, төрләсә мыҫҡыл итеп, әрләүбитәрләүҙән дә тартынманы. Ҡыҙым тыуҙы, әммә хәлдәр яҡшыға үҙгәрмәне, киреһенсә, бала менән мәшәкәтләнеп, йорт эсендәге эштәргә, ишле мал-тыуарҙы ҡарарға өлгөрмәгән өсөн ныҡыраҡ әрләндем һәм туҡмалдым. Шуныһы ғәжәп: был хәлдә барыһы ла беләкүрә, ләкин уны бер кем дә тыймай. Ҡәйнәм – биш ул тапҡан ҡатын, уҫал, ҡәтғи холоҡло. Ҡайным уға бер ваҡытта ла ҡул күтәрмәгән, әммә ирем туҡмаған мәлдәрҙә хатта йомшағыраҡ холоҡло ҡайным да мине яҡлашмай. Ҡәйнәм өсөн үҙенең улдарынан башҡа кеше кеше түгел, улар ғына донъяла иң һәйбәте, иң шәбе. Балалары ла әсәйҙәренең ауыҙына ғына ҡарап тора, уға ҡаршы бер һүҙ ҙә әйтмәй. Был ғаиләлә әсәйҙең һүҙе – закон. Ирем эш хаҡын тулыһынса әсәһенә алып ҡайтып тотҡора, хатта һуңғараҡ айырым йәшәй башлағас та ошо ғәҙәтен ташламаны.

Күпме ҡыйырһытылһам да, кәмһетелһәм дә, түҙергә тырыштым. Бәләкәй бала менән кәйнәм ҡушҡан һәм ҡушмаған бөтә эштәрҙе йүгереп йөрөп башҡарам, саҡ ҡына оҡшамаһа, ул улына ошаҡлай, ә тегеһе мине туҡмай. Бына ошондай тамуҡ шарттарында биш йыл ғүмерем үтте. Улыбыҙ тыуҙы. Был ваҡытта ҡайны-ҡәйнәмдән айырым йәшәй инек. Бәлки, тормошобоҙ яҡшы яҡҡа үҙгәрер, тигән өмөтөм дә бар ине, әммә улай булманы. Телефондан һөйләшергә ярамай, телевизор ҡарарға ярамай, күлгә ярамай, иларға ярамай... Ирем һыйырҙарҙы ишәйтте, һарай тулы мал-тыуар. Дөрөҫөн әйткәндә, мин шул һарайҙа, мал янында ғына нисектер рәхәтлек таба инем. Тегеләрҙе тәрбиәләйем, һөйләшәм, әммә бер үҙемә көн оҙоно шул тиклем малды ҡарау ныҡ ауыр, кискелеккә хәлдән таям, етмәһә, бәләкәй балам бар.

Ҡәйнәм балалар менән генә аралаша, уларҙы йыш ҡына үҙе янына алып ҡайтып китә. Баштараҡ, ярай, ял итеп ҡалырмын, тип уйлай инем, тик тиҙҙән ике баламдың да миңә ҡарашы үҙгәреүен, өләсәй хәбәрен һөйләүен һиҙә башланым. “Өләсәй әйтте... Өләсәй ҡушты... Өләсәй һине шулай тине...”

Бер мәл ирем, юҡ сәбәпте бар итеп, тағы ныҡ итеп туҡманы. Ҡыҙым был ваҡытта ҡалалағы интернатҡа уҡырға ингән, ә улым ҡәйнәмдә ине. Күп ҡан юғалттым, үлермен, тип уйланым. Хәлемде күргән ҡайным, телефонымдан әсәйемде табып, шылтыратҡан. Икенсе көнө полиция менән килеп, улым менән икебеҙҙе алып ҡайтып китте. Машинала барғанымда әйләнгән һайын артыма ҡарайым, ирем баҫтырып килеләр кеүек тойола. Бына шулай, 15 йыл ҡурҡыу, кәмһетелеү кисереп йәшәп, ниһайәт, ҡотолдом. Суд аша иремдән айырылдым.

Яңы тормош башлау еңел булманы, сөнки тейешле белемем дә, һөнәрем дә юҡ ине, хатта кешеләр менән аралаша белмәйем. Шулай ҙа урамда емеш-еләк һатыусы булып эш башланым. Ирем балаһын күреү һылтауы менән гел килә, шунда ла мине ҡыйырһытырға, эт ашамаҫ һүҙҙәр менән кәмһетергә өлгөрә. Үҫмер ҡорона етеп барған улым да күберәк атаһының, өләсәһенең һүҙен һөйләне, “ауылға ҡайтҡым килә”, тине лә торҙо. Төрләсә уйлағандан һуң, шулай барыбыҙ өсөн дә яҡшыраҡ булыр тип, улыма атаһы менән ауылда йәшәргә рөхсәт иттем. Был ҡарарҙы ҡабул итеү еңел булманы, әммә башҡаса сара юҡ ине.

Ике йыл самаһы ваҡыт үтте. Мин дә бер аҙ тынысландым, кеше араһында үҙемде тоторға өйрәндем, яңы кейемдәр һатып алдым. Бер мәл эш урыныма ҡәйнәм килеп инде. Ҡайным ныҡ ауырый икән, яман шеш диагнозы ҡуйғандар. Был мәлгә ҡәйнәм мал-тыуарҙы ишәйтеп, ерҙе ҙурайтып, улдары менән фермер хужалығы асҡан ине. Ҡайныңды ҡарарға кеше кәрәк, ҡайт инде, тип инәлде. “Уйлармын”, – тип тороп ҡалдым. Уның артынса, күп тә тормай, балалар килде: “Әсәй, ҡайт, элеккесә бергә йәшәрбеҙ”, – тиҙәр. Уларҙың һүҙен кире ҡаға алмай, миңә ярайһы уҡ һәйбәт мөнәсәбәттә булған ҡайнымды йәлләп, барырға булдым. Ҡәйнәм менән иремә, миңә элеккесә мөнәсәбәт булмаясаҡ, тигән шарт ҡуйҙым. Ризалаштылар.

Ҡайным дүрт ай самаһы йәшәне. Түшәктә ятҡан кешене матур итеп ҡарарға тырыштым, йорт тирәһендәге эштәрҙә лә ярҙамлаштым. Ҡәйнәм менән бергә йәшәнем, балалар ҙа эргәмдә булды, ә ирем икенсегә өйләнгән, улар айырым йәшәй ине. Ҡайным мәрхүм булғандан һуң балаларҙы ташлап ҡайтып китә алманым. “Хужалыҡ ҙур, эшсе ҡул артыҡ түгел, йәшәйек әйҙә бергә”, – тине ҡәйнәм дә.

Бер мәл улым телефонымдағы хәбәрләшеүҙәрҙе атаһына уҡытҡан. Ә мин бергә эшләгән ир менән хәбәрләшкәйнем. Ошо яҙмалар тәүге ирем ҡулына эләккәс, ул быны әсәһенә, туғандарына һөйләгән, күрһәткән. Һеҙөмтәлә мин улар алдында донъялағы иң аҙғын, иң әшәке ҡатын рәүешендә ҡалдым. Дүрт ай буйы “килен” тип кенә торған ҡәйнә лә, туғандар ҙа, хатта балалар ҙа йөҙ борҙо. Ә бит сирле ҡайныны ҡарағанда улар өсөн минән дә һәйбәт кеше юҡ ине.

Күптән икенсегә өйләнеп, айырым йәшәп ятҡан элекке ирем әсәһе, балалар алдында ныҡ итеп туҡманы. Икенсе көнө, хәлем яҡшырмағас, ауыл фельдшерына барҙым. Ул райондан “Ашығыс ярҙам” саҡыртып, мине дауаханаға оҙатты. Хәлем бик ауыр ине, хатта бер нисә тапҡыр аңымды ла юғалтҡанмын. Мин дауаханала ятҡанда полиция хеҙмәткәрҙәре барып, иремдән һорау алған, әммә мин был ауыл, ундағы “туғандар” менән араны тулыһынса өҙөргә хәл иткәйнем инде, шуға күрә бер ниндәй дәғүәм юҡ, тип белдерҙем. Башҡа улар яғына әйләнеп тә ҡараманым.

Ҡалала тормошто яңынан яйлап китеү тағы еңел булманы, элекке эшемә алманылар. Әсәйем “ауылға һине мин ебәрмәнем”, тип кенә ҡуйҙы, шулай ҙа үҙе янында йәшәргә рөхсәт итте. Күңелемә ныҡ ҡыйын ине, үҙемде был тормошта бер кемгә кәрәкмәгән кеше итеп тойҙом. “Бөтә бәхетһеҙлектәремдә кем ғәйепле? Үҙемме?” – тип уйландым. Шулай ҙа эшкә төштөм. Ошондай ауыр, күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп йөшәгән осоромда бер кешене осраттым. Миңә уны Аллаһы Тәғәлә үҙе ебәргәндер, тип уйлайым, бөгөн дә шуның өсөн рәхмәттәр уҡыйым. Никах уҡытып, ғаилә ҡорҙоҡ.

Шулай тыныс ҡына йәшәп ятҡанда тәүге ирем улыбыҙҙы алып килеп ҡалдырып китте. Тыңламай, тәртипһеҙ, ти. Атаһын тыңламағанды, мине ҡайҙан һанлаһын, ти инде, өс көн торҙо ла, ауылға барам, тип сығып китте. Тәүге ирем шылтыратып та, башҡа юлдар менән дә мине баланы ташлауҙа, ҡарамауҙа, насар әсәй булыуҙа ғәйепләй, һаман кәмһетә.

Иремдә был ҡаланан күсәйек, тип күндерҙем. 300 саҡрымдағы ҙурыраҡ ҡалаға күстек, йорт төҙөй башланыҡ. Игеҙәк ҡыҙҙарыбыҙ тыуҙы. Бәхетлемен. Әммә барыбер тәүге ғаиләм тынғылыҡ бирмәй. Судҡа биреп, улым өсөн алимент түләргә ҡуштылар. Ризалаштым. Әммә улар быны менән риза түгел, аҙ, тиҙәр. Күпме тейешмен, шуны түләйем. Ә бит ул ғаиләнән бер нимә лә, хатта һүренте еп тә алманым, ә улар мине әле булһа тыныслыкта ҡалдырмай. Эйе, фәрештә түгелмен, тәүге иремдән тыуған балаларымдың мине хөрмәт итмәүендә үҙемдең дә ғәйебем бар, әлбиттә. Әммә минең дә кешесә, тыныс, бәхетле тормошта йәшәргә хаҡым барҙыр бит?

Венера, 38 йәш.

Мәләүез ҡалаһы”.



## Иң яҡшы күрһәткес – беҙҙеке

Ауыл хужалығы кооперативтары үҫешә

Республикала ауыл хужалығы ҡулланыусылар кооперативтары биш йылда дүрт тапҡырға артҡан. Уларҙың һаны 402-гә еткән. Дөйөм табыш күләме 2,9 миллиард һум тәшкил итә. Кооперативтар 70 миллион һумға тиклем федераль гранттар алыу мөмкинлегенә эйә.

# Хеҙмәттәре кешегә ҡыуаныс килтерә

Ойошма башҡарған эштәр ҡолас еткеһеҙ



**Уңған коллектив эш мәлендә.**

✍ Динә АРЫҪЛАНОВА

**Әбйәлил районы үҙенсәлекле матур тәбиғәте, хеҙмәт һөйөүсән халҡы, шифалы ял йорттары менән дан тотҡан төбәк. Объекттарҙың инженер селтәрҙәре торошон үҙ эшенең оҫталары, шулай уҡ “Әбйәлил махсус коммуналь хеҙмәтләндереү” муниципаль унитар предприятиеһы белгестәре даими күҙәтә һәм тәртиптә тота. Уларҙың намыҫлы эше Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров иғтибарынан да ситтә ҡалманы, ул былтыр август айындағы эш сәфәре барышында предприятие директоры Йәлил Насип улы Зәйтүновҡа профессиональ оҫталығы һәм оҙайлы хеҙмәте өсөн Рәхмәт хаты тапшырҙы.**

2004 йылда төрлә объекттарҙа йылылыҡ, һыу менән тәьмин итеү һәм һыу бүлеү эштәрен башҡарыу өсөн булдырылған муниципаль предприятие райондың һәм Ташбулат ауыл советының инвестиция программаларын тормошҡа ашырыуҙа ҡатнаша. Предприятие тораҡтарҙы, Яҡтыкүл эргәһендәге мәҙәниәт, спорт һәм һауыҡтырыу учреждениеларын комплекслы коммуналь һәм инженер-техник хеҙмәтләндереү маҡсатында төҙөлдө. Бөгөн уның төп ҡулланыусылары – “Яҡтыкүл”, “Юбилей” шифаханалары, “Березки”, “Уральские зори” ял йорттары, “Горное ущелье” балалар һауыҡтырыу лагеры, кафе, магазин һәм ҡунаҡханалар. Бынан тыш, предприятие Ташбулат ауыл советына ҡараған тағы бер нисә ауылды хеҙмәтләндерә: Ташбулат, Биккол, Теләш, Ниязғол, Күсем, Зеленая поляна, Яҡтыкүл, Күсем руднигы, Геологоразведка, Ташбулат станцияһы, Айыуһаҙ, Михайловка, Таштимер ауыл советы ауыл биләмәһе.

Ойошма башҡарған эштәр ҡолас еткеһеҙ: һыу менән тәьмин итеү һәм һыу бүлеү; йылылыҡ менән тәьмин итеү; эске инженер селтәрҙәрен ҡороу һәм түбә ябыу, биҙәкләү эштәре; транспорт хеҙмәттәре күрһәтеү; шыйыҡ көнкүреш ҡалдыҡтарын ташыу һәм таҙартыу, төҙөкләндереү һәм башҡа эштәр. “Әбйәлил махсус коммуналь хеҙмәтләндереү” предприятиеһы газ яғыулығында йыл әйләнәһенә эшләүсе ҡаҙанлыҡтан һәм йәйен “Горное ущелье” балалар һауыҡтырыу лагерын әҫе һыу менән тәьмин итеүсе электр ҡаҙанлығынан торған йылылыҡ менән тәьмин итеү хеҙмәтен тәшкил итә. Предприятиела шулай уҡ электр менән тәьмин итеү, механизация һәм транспорт хеҙмәттәре, һыу сифатын контролләүсе үҙ лабораториялары бар. Ойошма тейешле коммуналь һәм махсус техника менән ҡоралландырылған: өс вакуумлы машина, бер “КамАЗ”, МТЗ-80 тракторы, “Терекс” йөк тейәгес-экскаваторы, Т-90 бульдозеры эшкә әҙер тора.

Берҙәм коллективта 80 кеше эшләй, араларында ниндәй генә һөнәр эйәләре юҡ – водителдәр, тракторсылар, операторҙар, хлораторҙар... Йәлил Насип улы тәжрибәле һөнәр эйәһе, яҡшы белгес, предприятиеның баш инженеры Фәнис Нәдир улы Атауллиндың дөйөм эшкә ҙур өлөш индереүен айырыуса маҡтап телгә алды. Ә ундай уңған, башҡаларға өлгө булырлыҡ хеҙмәткәрҙәр бында етерлек. Предприятиеның баш бухгалтеры Надежда Кухаренко, планлаштырыу-иҡтисад бүлеге начальнигы Гүзәл Суфиянова, йылылыҡ менән тәьмин итеү бүлеге начальнигы Айбулат Ҡотоев, йылылыҡ менән тәьмин итеү һәм һыу бүлеү бүлеге начальнигы Ринат Дуланов, механизация бүлеге начальнигы Илгиз Таһиров, мастерҙар Валерий Королев, Йәмил Хәснөтдинов, Аркадий Копытов, Ғәҙел Йомағужин хеҙмәткәрҙәр араһында ҙур абруйға эйә. Коллектив ағзаларының ялын ойоштороу, сәләмәтлектәрен хәстәрләү ҙә көн үҙәгендә торған мөһим мәсьәлә. 2022 йылда предприятие эшселәрен һауыҡтырыу маҡсатында “Березки” ял йорто менән килешеү төҙөлгән. Хеҙмәткәрҙәр район кимәлендә үткәрелгән сараларҙа, йәмғәт тормошонда әүҙем ҡатнашып йөрөй, конкурстарҙа, спорт ярыштарында юл башлап йөрөй. “Әбйәлил махсус коммуналь хеҙмәтләндереү” муниципаль унитар предприятиеһының эше бик күп Рәхмәт хаттары, Почет грамоталары менән баһаланған. 2021 йылғы эш һөҙөмтәһе буйынса “Йылдың иң яҡшы хеҙмәтләндереүсеһе” номинацияһында еңеү яулаған һәм Әбйәлил районы хакимиәте башлығының дипломы менән бүләкләнгән.

Йәлил Насип улы халыҡ араһында эше менән абруй ҡаҙанған, ҙур тәжрибәле етәксе. Профессияһы буйынса – юрист, Башҡорт дәүләт университетын тамамлаған. Предприятиеға өсөнсө йыл уңышлы етәкселек итә. Уға тиклем Әбйәлил юл ремонт-төҙөләш идаралығында эшләй, Байым ауыл советы рәйесе вазифаһын башҡара. “Башҡортостан Башлығының рәхмәте һәм дәртләндереү һүҙҙәре бер минең хеҙмәтемә генә түгел, ә тотош коллективтың хеҙмәткәрҙәре тырышлығына бирелгән лайыҡлы баһа ул”, – тип иҫәплә Йәлил Насип улы.

“Әбйәлил махсус коммуналь хеҙмәтләндереү” муниципаль унитар предприятиеһы районда ғына түгел, ә республикала ла яҡшы иҫәптә. 2021 йылда ойоштороу һәм хеҙмәт шарттары буйынса иң яҡшы предприятиеларҙың береһе тип танылды. Компания йылдан-йыл камиллашыуын, үҫеүен дауам итә, башҡалар менән көнәшләшеп, тәжрибә уртаҡлашып йөшәй. 2023 йылға ҡорған пландары ла ҙур: эш күләмен арттырыу, яңы технологияларҙы үҙләштереү, ышаныслы аҙымдар менән ҡаҙаныштарға юл ярыу.

Реклама



## Үрсетмәләрегеҙ асыҡмаһын!

✍ Дмитрий СКОТНИКОВ

**Тәҙрә төбөндәге, түтәлдәрҙәге үҫемлектәребеҙ ҡеүәтле тәбиғи биопрепараттар ярҙамында көндән-көн ныҡына, шәбәйә бара. Помидор, борос һәм баклажан үрсетмәләрен аслыҡҡа дусар итеп ҡуймағыҙ – тупраҡта туҡлыҡлы элементтар етерлек күләмдә булһын. Үҫемлектәрҙе беренсе туҡландырыу күсереп ултыртҡандан һуң 7–10 көндән, даими япраҡтарының икенсе пары сыҡҡас, башҡарыла. Был саҡта ниндәй ашлама ҡулланырға һуң?**




**Бионекс-Кеми ашламаларының отошло яҡтары**

Өй шарттарындағы үҫемлектәрҙе йомшаҡ органоминераль ашламалар, шулай уҡ һыуҙа иреүсән комплекслы Бионекс-Кеми ашламалары менән туҡландырырға кәрәк. Бионекс-Кеми ашламалары һәйбәт ирей, туҡлыҡлы матдәләре ҙур концентрациялы (18-әр процент азот, фосфор һәм калий), составы баланслы һәм унда хлор юҡ.

Бионекс-Кеми ашламалары магний, бор, молибден, кобальт, баҡыр, тимер, марганец кеүек макро- һәм микроэлементтар менән дә байытылған, ә улар үҫемлектәрҙәге мөһим процестар (фотосинтез, һулыш алыу, күҙәнәктәрҙең бүленеүе һ.б.) өсөн яуаплы. Бар тереклек – үҫемлектәр ҙә, кешеләр ҙә – ошо иң китмәле биоген элементтарҙан тора.

Бионекс-Кеми ашламаларының тағы бер шәп яғы – уларҙа кәрәкһеҙ сит ҡушылмалар, шул иҫәптән зарарлы ауыр металдар юҡ.

**Саманан аштырып ебәрә күрмәгеҙ!**

Бионекс-Кеми серияһындағы комплекслы ашламаларҙа минераль тоҙҙар бик юғары концентрацияла тупланған. Шунлыҡтан миҡдар буйынса талаптарҙы теүәл үтәргә кәрәк. Саманан аштырыу үҫемлектәрҙе һәләк итеүе мөмкин – артығын ҡуйһаң, тамырҙарының тупраҡ иретмәһен осмотик һурыуы боҙола, күп һипһәң, япраҡтар көйә.

Дөрөҫ миҡдарҙы иҫтә ҡалдырыу бик еңел: **1 литр һыуға – 1 балғалаҡ ашлама**. Был күләм бөтә үҫемлектәргә, сәскәләргә, йәшелсәләргә яраҡлы.

**Дөрөҫ ҡулланыу зарур**

Бионекс-Кеми ашламаһы иретмәһен үҫемлек төбөнә ҡойорға, шулай уҡ тамырҙан тыш туҡландырыу өсөн дә тотонорға була. Ике осраҡта ла миҡдар бер төрлө. Әммә үҫемлектең төбөнә ҡойоу 7–10 көнгә 1 тапҡыр эшләнһә, япраҡтарға һиптереү, үҫемлектәрҙең әҫке өлөшө ярайны уҡ ҡеүәтләнгәс, айына 1 тапҡыр ғына башҡарыла.

Һыуҙа иреүсән универсаль Бионекс-Кеми ашламалары 50 һәм 200 грамлы ҡаптарҙа (өй эсендә һәм баҡсала ҡулланыу өсөн) һатыла.

Реклама

## СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!



## Был ғәмәлдең зыяны юҡ

Бөгөн — Рәсәйҙә ҡан доноры көнө

17 – 23 апрелдә Ҡан донорлығы аҙналығы үткәрелә. Был сара 20 апрелдә Рәсәйҙә ҡан донорҙары көнө айҡанлы ойошторола.

500 миллилитрға тиклем ҡан тапшырыу кеше сәләмәтлегенә өсөн зыянһыҙ һәм хәүефһеҙ икәнлеге гилми тикшеренеүҙәр, практик күҙәтеүҙәр тарафынан раҫланған, тип хәбәр итте республиканың һаулыҡ һаҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәте. Даими ҡан биреү организмға ыңғай йоғонто яһай.

# Үҙегеҙ коллаген яһап ҡарағыҙ



Фото һәм сығанаҡ: Гөлфиә Мөхәмәтдинованың "Бәйләнештә"гә сәхифәһенән.

**Блогер Гөлфиә Мөхәмәтдинованан коллаген яһау ысулын тәҡдим итәбеҙ.**

Сәләмәт йәшәү, дөрөҫ туҡланыу һәм комплекслы гимнастикалар буйынса үҙ марафондарын үткәргән блогер Гөлфиә Мөхәмәтдинова үҙе һөйәкле иттән әҙерләгән бик шәп коллаген тәҡдим итә. Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә уны яһап ҡарайыҡ һәм ҡулланайыҡ.

"Хәҙерге ваҡытта коллагендың ниндәй төрө генә юҡ! Желе кеүеген дә, онтаҡлыһын да алырға була. Ә мин һеҙгә үҙегеҙ һөйәкле иттән эшләгән коллаген тәҡдим итер инем! Ни өсөн? Сөнки уны организм тулыһынса үҙләштерә!

Шулай уҡ унда:

1. глицин аргинин, пралин, гутамин кеүек аминокислоталарҙан торған аҡһым бар. Был аҡһым коллаген була. Шул коллаген беҙҙең организмға кәрәк.

2. Кальций, фосфор, магний минералдары һөйәкте ныҡытырға ярҙам итә.

3. Хондроитин сульфаты, глюкозамин һәм МСМ быуындар өсөн файҙалы (кемдең быуыны һыҙлай, мотлаҡ эсергә кәрәк).

4. Коллаген пептидтары һәм желатин эсәктәрҙең һаулығын, дөрөҫ эшмәкәрлеген тәьмин итә.

5. Сәс һәм тырнаҡтарҙың һаулығын, матурлығын һаҡлаусы аминокислоталар бар.

### Тәбиғи коллагенды нисек әҙерләргә?

1. Һөйәкле ит алабыҙ ҙа (тояҡ түгел, ә тубыҡ һөйәге) сайып, сөгөнгә һыу һалып, утҡа ҡуябыҙ.

2. Ҡайнап сыҡҡас, күпереген һеҙеп алып, ике ҡалаҡ алма һеркәһе (һөйәктең туҡлыҡлы мәтдәләрен сығара), тоҙ, бер кишер, бер баш һуған (йомро көйөнсә) һалып талғын утта 7-8 сәғәт ҡайнатабыҙ.

3. Шунса ваҡыт үткәс, һөйәктең елек майы, һеңерҙәрен мөнйәйбеҙ. Ә һурпаһын һеҙәбеҙ.

4. Һөйәкле һурпа һыуыҡкыста ике-өс көн генә һаҡлана. Мин шуға силикон һауыттарға һалып, туңдырғысҡа ҡуям.

### Нисек ҡулланырға?

Ҡаробойҙай йә былау бешергәндә ошо һурпаны һалып ебәрергә. Һурпаның үҙен эсергә. Мин иртән күнекмәгә тиклем асығам, 4-5 кубикка эҫе һыу ҡойоп иретәм дә эсәм. Әҙерәк ҡапҡылап алғанда ла ошолай эсеп алырға мөмкин. Ҡорот һалып ебәрһәң, тағы ла тәмлерәк була.

# Авитаминоз түгел, ә гиповитаминоз

## Йышыраҡ йылмайығыҙ...

**Яҙ миҙгелендә хәлһеҙлек, арыусанлыҡ тойғоһо, кәйеф юҡлығы, йыш баш ауыртыуы, йоҡо баҫыуы, тиҙ ҡыҙып китеүсәнлек – барыһын да йыш ҡына яҙғы осорға бәйләйбеҙ. Күп кенә табиптар был осорҡа "авитаминоз" терминын ҡулланыуҙы урынһыҙ тип һанай һәм гиповитаминоз билдәләре тип атай.**



Фото: zdravkolpino.ru һәм moidiabet.ru

Авитаминоз – туҡланыуҙа теге йәки был витамин тулыһынса булмаған осраҡта ғына барлыҡҡа килгән сир. Витаминһыҙ миҙгелдә халыҡ емешеләк, йәшелсә йәки дарыухананан витаминдар һатып ала. Тик нисек кенә булмаһын, организмға ниндәй ҙә булһа витамин етмәй башлай һәм был гиповитаминозға килтерә.

Гиповитаминоз яҙ йышыраҡ осрай. Кешеләрҙә яҙғы астения, аппетит боҙолоуы, төрлө хроник сирҙәрҙең көсәйеүе күҙәтелә. Был ваҡытта элек ҡулланған дауалау алымдары ла ярҙам итмәй башлай. Уның килеп сығыуының сәбәптәре бер нисә. Иң мөһиме һәм таралғаны — аҙыҡ-түлек менән етерлек кимәлдә витаминдар алып етмәү. Һәр витамин өсөн тәүлек нормаһы бар. Мәҫәлән, С витаминын кеше тәүлегенә – 70 – 80 мг, А витаминын 10 мг ҡабул итергә тейеш. Әммә витаминдар еткән осраҡта ла гиповитаминоз булыуы ихтимал. Быны сәбәптәре күп: мәҫәлән, организм уларҙы ҡабул итә алмай йә, киреһенсә, артығы барлыҡҡа килә. Ашҡаҙан-эсәк сирҙәре, паразиттар менән зарарланыу, дисбактериоз да сәбәп була ала. Ауыр физик эш, көсөргәнешле аҡыл хеҙмәте менән шөғөлләнеүселәр, йөклеләк, нервы-эмоциональ көсөргәнеш тә гиповитаминозға алып килә. Сирҙе нисек асыкларға? Тирегеҙ ҡороп, ярылып торһа, күҙ ҡыҙарып йәшләнһә, һеҙгә А витамины етмәй тигән һүҙ. Сәс ҡойола башлай, төҫһеҙләнә, тиҙ һынысанға әйләнә, ә тырнаҡтар тоноҡлана.

В төркөмөндәге витаминдар етмәһә лә, организм ҙур ҡыйынлыҡ кисерә. Ҡоҫҡо килеү, аппетит кәмеү, хәтер хөртәйеү, стоматит, йоҡо килеү, дерматит, конъюнктивит, эс китеү һәм башҡа бик күп симптомдар буйынса билдәләргә мөмкин. D витаминының етмәүе тәү сиратта сабый балаға йоғонто яһай, халыҡта был сир рахит булараҡ билдәле. С витамины етмәүен хәлһеҙлек, тиҙ ҡыҙып барыу, тиренең ҡороуы, теш ҡаҙналығының ҡанауы, танауҙан ҡан китеү һәм башҡа билдәләрҙән белергә була. Күреүегеҙсә, был ябай ғына сир түгел. Йығылып ятып ауырымаған хәлдә лә кешегә ҙур ауырлыҡ һәм уңайһыҙлыҡ тыуҙыра. Ә нисек дауаларға? Иң мөһим һәм, моғайын, берҙән-бер дөрөҫ юл – бөтә төр витаминдарҙы ла ҡабул итеү. Йә аҙыҡ-түлек аша, йә дарыуханан кәрәкле витаминдар һатып алырға кәңәш ителә. Әгәр дарыуҙар һатып алырға теләмәйһегеҙ икән, иғтибарығыҙға витаминдарға бай аҙыҡ-түлек исемлеген тәҡдим итәбеҙ.

**А витамины:** аҡ май, бауыр, ҡыҙыл һәм һары төҫтәге емеш-еләк менән йәшелсә.

**В витаминдары:**

**$B_1$** – борсаҡ, төрлө ярма, әсе һөт продукттары.

**$B_2$** – эремсек, сыр, ит, бауыр менән бөйөр, ҡарабойҙай һәм һоло бутҡаһы, һөт, ҡуҙаҡлылар.

**$B_6$** – тауыҡ ите, балыҡ, сөтләүек, фасоль, һыйыр ите, борос, бәрәңге.

**$B_{12}$** – майлы балыҡ, ит, бауыр менән бөйөр.

**С витамины** – гөлйемеш төнәтмәһе, ҡара ҡарағат һуты, алма, һырғанаҡ, татлы борос, цитруслы емеш-еләк, йәшел борсаҡ һәм йәшел һуған. Иң мөһиме – бәрәңге тураһында онотмағыҙ. Ундағы С витамины күләме буйынса әфлисундағынан да күберәк.

**D витамины** – майлы балыҡ, треска бауыры, йомортҡа һәм аҡ май.

**РР витамины** – сыр, һөт, арахис, һыйыр бауыры, балыҡ, йомортҡа, бөйөр, тауыҡтың аҡ ите, кишер, бәрәңге, помидор, финик һәм башҡалар.

Гиповитаминозды булдырмаҫ өсөн шуны иҫегеҙҙә тотоғоҙ: иң беренсе сиратта, сәләмәт йәшәү рәүешен алып барығыҙ, күберәк саф һауала йөрөгөҙ, хәрәкәтләнергә, дөрөҫ туҡланыу мөһим. Тормошта оптимист булырға, үҙ-үҙеңә ышанырға кәрәк. Йышыраҡ йылмайығыҙ, сөнки йылмайыу ҙа кәйефте күтәрә, баш мейеләге ҡан әйләнешен яҡшырта, бит мускулдарын йомшарта, стрестан һаҡлай.

**Махсус битте Кәримә УСМАНОВА әҙерләне.**

## Туңдырма менән дауалан

Хәҙерге ығы-зығылы замандa ярһыуҙан, ҡыҙып китеүҙән тыйылыу ҡыйын. Күптәрҙең фекеренсә, шоколад асыуҙы баҫа, ләкин был дөрөҫлөккә тура килеп етмәй. Ҡәһүәләге кеүек, какаола ла адреналинға оҡшаш матдә бар, ул ҡан баҫымын күтәрә, пульсты йышайта.

Стрестан ҡотолоу өсөн иң үтемле сара – туңдырма. Ғалимдар раҫлауынса, һөт һәм һөт өҫтәндәге транквилизатор нервы системаһын бик яҡшы тынысландыра.

Күңел төшөнкөлөгөнән ҡотолғоҙ килһә, туңдырма менән һыйланып дауаланығыҙ.





## МАТУР ҮТҺЕН ЯЛЫҒЫҘ!

### 29-сы һандағы серһүҙ – “Әберсен”

“Я” хәрефе биш һүҙҙә бар: аръяҡ, яҡшылыҡ, шаян, ҡояш, баян

Иң тәүге булып дөрөҫ яуапты Миәкәнән **Мөхәмәтйәновтар ғаиләһе** ебәрҙе. Ҡотлайбыҙ! Шулай уҡ Илештән Гәлимә Гәлиева, Ауырғазынан Миләүшә Муллағәлиева, Дәүләкәндән Гөлфирә Гәскәрова, Сибайҙан Гөлшат Горшенина һәм Ғилман Шәрипов, Ишембайҙан Әнисә Һөйәрголова, Күмертауҙан Фәүзиә Ишкинина, Күгәрсендән Венера Шәйәхмәтова, Йылайырҙан Венера Абдуллина һәм Әминә Лоҡманова, Баймаҡтан Венера Айыткoлованан да дөрөҫ яуап алдыҡ. Афарин!

# Апрель юбилярҙары




Г. Яҡшыголова әҙерләне.

## Хөрмәтле гәзит уҡыусылар!

Сканвордтағы түңәрәктәрҙәге хәрефтәрҙән серһүҙ төҙөп, исем-шәрифегеҙҙе, йәшәгән район-ҡалағыҙҙы күрһәтеп, **8-927-932-69-09** телефонына смс-хәбәр ебәрегеҙ. Дөрөҫ яуапты беренсе булып тапҡан кешенең телефонына 100 һум аҡса күсерәбеҙ.

Бөгөнгө сканвордты тулыһынса сисеп бөткәндән һуң нисә һүҙҙә “ш” хәрефе барлығын һанарға һәм серһүҙгә ҡушып, ошо һанды яҙып ебәрергә кәрәк. Бер шаҡмаҡта ике һүҙҙең “ш” хәрефе тура килгән осраҡта, һәр һүҙ айырым һанала. Еңеүсе ике шартты ла теүәл үтәүселәр араһынан билдәләнә.

## 29-сы һандағы сканвордтың яуаптары

**Горизонталь буйынса:**

“Карабай”. Ахырызаман. Ыбыр. Яҡшылыҡ. Ҡашҡа. Сыйырсыҡ. Асыу. Төйләгән. Ҡарлуғас. Ашағанда. Тырмаға. Торатау. Баян. Бәләсел. Алабуға. Хат. Тана. Тотҡаһы. Аристократ. Һандуғас. Гәм. Ҡояш. Ҡабан. Тамаҡ. Арпа. Аҡҡош. Ашлы. Өмөтбаева. Ашлыҡ. Шаян.

**Вертикаль буйынса:**

Батут. Һабантурғай. Рабиға. Мут. Ҡалым. Баҡта. Ғына. Аръяҡ. Баҫымсаҡка. Ҡаҙна. Өлөш. Ҡарамышева. Кашпо. Шатлыҡ. Ышана. Аласыҡ. Торна. Атыш. Сука. Һаҡал. Нурлы. Тәбиғәт. Ыласын. Атын. Лимон. Рауза. Асыуына. Тәсбих. Ағуна. Ҡасау. Лифт. Сара.

## ЙОНДОҘНАМӘ

**(24 – 30 апрель)**



**ҠУҘЫ**

Етәкселек менән аңлашылмаусанлыҡ килеп сығыр. Шулай ҙа үҙегеҙҙең хаҡлы икәнегеҙҙе дәлилләгеҙ. Барыһы ла асыҡлансаҡ, үрләтеүҙәре ихтимал. Ҙур проекттарҙы тормошҡа ашыра башларға иртәрәк әле, саҡ ҡына сабыр итегеҙ.



**БУҒА**

Етәксе вазифаһын башҡарыусылар, хеҙмәттәштәрегеҙҙең кәңәштәренә ҡолаҡ һалырға кәрәклекте онотмағыҙ! Үҙ-үҙегеҙгә артыҡ ышаныу хатаға килтереүе ихтимал. Дуҫтарығыҙҙан бурысҡа алмағыҙ, үҙегеҙ ҙә аҡса мәсьәләһендә ярҙам итмәгеҙ. Һуңынан үкенерһегеҙ.



**ИГЕҘӘКТӘР**

Хәл итергә уйлаған матди мәсьәләләрҙе тормошҡа ашыра алмаҫһығыҙ. Планлаштырған бөтөн осрашыуҙарға ла өлгөрөп булмаҫ. Шулай ҙа төшөнкөлөккә бирелмәгеҙ. Аралашыу ваҡытында һаҡ булығыҙ: яңылыш һүҙ менән берәйһен йәберләүегеҙ бар.



**ҠЫҪАЛА**

Баҙап ҡалмайынса, үҙ мәнфәғәттәрегеҙҙе яҡлауға тотонорһоғоҙ. Үҙегеҙҙе көсһеҙ итеп тойорһоғоҙ. Ошо мәлдә, бәғзеләрҙең кәңәшенә ҡолаҡ һалып, экстрасенс һәм гипноз менән шөғөлләнеүселәргә мөрәжәғәт итә күрмәгеҙ.



**АРЫҪЛАН**

Һеҙҙе көсөргәнешле аҙна көтә. Ҡасандыр юлығыҙ айырылған дуҫтарығыҙҙы осратырһығыҙ. Һаҡ булығыҙ, уларҙы ҡабаттан тормошоғоҙға индерергә ашыҡмағыҙ.



**ҠЫҘ**

Ниндәйҙер мөһим ҡарар ҡабул итеү алдында тораһығыҙ. Был аҙнала төплө фекергә килергә кәрәк. Яуап менән артабан һуҙмағыҙ. Шәхси мөнәсәбәт ҡороуҙа ауырлашыр. Бәхәсте оҙаҡҡа һуҙмай, уртаҡ тел табығыҙ.



**ҮЛСӘҮ**

Үҙегеҙгә һәр яҡлап иғтибар йәлеп итегеҙ. Һаулығығыҙҙы ҡайғыртығыҙ. Алыҫ юлға сығыуҙан баш тартығыҙ. Һәүетемсә генә йәшәп тороғоҙ.



**САЯН**

Гүзәл булығыҙ! Ихласлыҡ ярҙамында барлыҡ ауырлыҡтарҙы ла еңеп сыға алырһығыҙ. Шәхси тормошта яңы осрашыу көтә. Был мөнәсәбәттәрҙең ныҡлы булыуы ихтимал.



**УҠСЫ**

Бер маҡсатығыҙҙы тормошҡа ашырыу өсөн бар көсөгөҙҙө ҡуллանырға әҙерләнәһегеҙ. Икенсе юлдан китегеҙ. Көсөгөҙ ташып торғанда ҙурыраҡ һөҙөмтәгә өлгәшергә мөмкин. Тормош юлдашығыҙ менән киләсәккә пландар төҙөгөҙ.



**ЫЛАҠ**

Көнәркәшлектән ҡурҡмағыҙ. Ул һеҙгә, киреһенсә, көс туплап, артабан көрәшергә этәргес бирәсәк. Был көрәштән еңеүсе булып сығырһығыҙ. Шулай уҡ һаулыҡҡа иғтибарлыраҡ булығыҙ.



**ҺЫУҒОЯР**

Һеҙҙең аҙна. Бар яҡтан да уңышһығыҙ. Алыҫ юлға сығыу – уңышлы, командировкалар, эшлекле һөйләшеүҙәр һөҙөмтәле булыр. Тик ҙур әйбер һатып алыуҙан баш тартығыҙ. Айырыуса техникаға ҡыҙыҡмағыҙ.



**БАЛЫҠ**

Артыҡ көс һалып эшләргә кәрәкмәй. Һеҙҙең тырышлыҡты баһаламаҫтар, эшегеҙҙе күрмәҫтәр. Яҡындарығыҙға күберәк иғтибар бүлегеҙ.

# ТЕЛЕВИДЕНИЕ ПРОГРАММАҺЫ

| ДҮШӘМБЕ 24 апрель | ШИШӘМБЕ 25 апрель | ШАРШАМБЫ 26 апрель | КЕСЕ ЙОМА 27 апрель | ЙОМА 28 апрель | ШӘМБЕ 29 апрель | ЙӘКШӘМБЕ 30 апрель |
|---|---|---|---|---|---|---|
| +20 +3 | +17 +9 | +19 +9 | +15 +9 | +17 +9 | +17 +8 | +18 +9 |

11.00 Автограф. Расуль Карабулатов (12+)
11.30 Новости (на рус.яз.)
11.45 Интервью (12+)
12.00 Историческая среда (12+)
12.30 Новости (на рус.яз.)
12.45 Счастливый час
13.30 Новости (на баш.яз.)
13.45 Бәхетнамә
14.30 Новости (на баш.яз.)
14.45 Интервью (12+)
15.00 Сулпылар (0+)
15.30 Гора новостей (6+)
15.45 Этно-краса (6+)
16.00 Патриот РФ (12+)
16.15 Специальный репортаж (12+)
16.30 Новости (на рус.яз.)
16.45 Интервью (12+)
17.00 Моя планета Башкортостан (12+)
17.30 Новости (на рус.яз.)
17.45 Криминальный спектр (16+)
18.00 Башҡорттар (6+)
18.30 Новости (на баш.яз.)
19.00 Вечерний телецентр
20.00 Сәңгелдәк (0+)
20.15 Полезные новости (12+)
20.30 Вечерний телецентр
21.30 Новости (на рус.яз.)
22.00 Республика LIVE #дома (12+)
22.30 Новости (на баш.яз.)
23.00 Колесо времени (12+)
00.00 Бәхетнамә (12+)
00.45 Новости (на баш.яз.)
01.15 Х. Зарипов, "Эх, невеста, невестушка!..". Спектакль БГАТД им. М. Гафури (12+)
03.00 История одного села (12+)
03.15 Счастливый час (12+)
04.00, 05.00 Вечерний телецентр (12+)
06.00 "Это моя профессия". Информационно-познавательная программа о среднем профессиональном образовании (12+)
06.30 Новости (на рус.яз.)

## ЙОМА 28 апрель

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро" (0+)
09.00, 12.00, 15.00, 18.00 Новости
09.20 "АнтиФейк" (16+)
09.55 "Жить здорово!" (16+)
10.45, 12.15, 15.15, 16.50 "Информационный канал" (16+)
16.00 "Мужское / Женское" (16+)
18.40 "Человек и закон" (16+)
19.45 "Поле чудес" (16+)
21.00 Время
21.45 "Голос" весны в обновленном составе (12+)
23.55 "Вызов. Первые в космосе" (12+)
00.55 Подкаст. Лаб "20 лет спустя" (16+)
01.40 Подкаст. Лаб "Мелодии моей жизни" (16+)
02.25 Подкаст. Лаб "Неформат" (16+)
03.05 Подкаст. Лаб "АстроУмные" (16+)
03.40 Подкаст. Лаб "Произвольная программа" (16+)
04.15 Подкаст. Лаб "Жизнь замечательных" (16+)
04.50 Подкаст. Лаб "Триггеры" (16+)
05.25 Подкаст. Лаб "Антропология" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00, 09.30 "Утро России"
09.00, 14.30, 21.05 Вести. Местное время
09.30 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+)
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести
11.30, 17.30 "60 Минут". Ток-шоу (12+)
14.55 "Кто против?" Ток-шоу (12+)
16.30 "Прямой эфир" (16+)
21.20 Т/с "Дорога к счастью" (12+)
23.25 Х/ф "Я подарю тебе рассвет" (12+)
03.25 Х/ф "Свой-Чужой" (16+)

### БАШКОРТОСТАН 24

7.00, 7.30, 8.00, 8.30, 10.00, 11.00, 12.00, 13.00, 14.00, 14.30, 15.30, 16.00, 17.00, 18.00, 19.00, 20.00, 21.00 Өфө һәм Башҡортостан хәбәрҙәре
7.05, 7.35, 8.05, 8.35, 11.25 Хәйерле иртә, Өфө! /12+/
9.00, 12.25, 17.25, 18.20, 21.25, 23.10, 0.50, 3.00 Фильм /12+/
9.30, 11.50, 14.45, 16.40, 23.20, 6.30 Өфө мондары/12+/
9.45, 17.55 Балалар өсөн тапшырыуҙар 6+
10.15 Иртәнге тапшырыу “Самауыр” /12+/
13.20, 23.10 Республика лайф 12+
14.15 Кулинар старттар 12+
15.00, 18.40, 1.20 Кинопрофиль 16+
15.15, 1.40, 6.10 Ислам нуры 12+
15.45, 1.45 Мәҙәниәт хәбәрҙәре 12+
16.20, 18.20, 0.30 Өфө хәбәрҙәре 12+
19.00 Өфө ваҡыты интерактив программа /12+/
20.10, 2.00 Рәсәй радиоһы 12+
23.30, 5.10 Өфө тураһында
6.50 РФ һәм БР гимны /12+/

### БСТ

07.00 "Сәләм"
10.00 Атлас Баженова. Башкортостан (12+)
10.30 "Йома". Нравственные ценности ислама (0+)
11.00 Моя планета Башкортостан (12+)
11.30 Новости (на рус.яз.)
11.45 Интервью (12+)
12.00 Слово Земли. 2.0. короткометражные фильмы (12+)
12.30 Новости (на рус.яз.)
12.45 Үткән ғүмер (12+)
13.15 Ҡурай даны (12+)
13.30 Новости (на баш.яз.)
13.45 Аплодисменты. Гульчачак Шарипова (12+)
14.30 Новости (на баш.яз.)
14.45 Интервью (12+)
15.00 "АйТекә!" (6+)
15.15 "КультУра". Медиасеть школьных студий (6+)
15.30 Гора новостей (6+)
15.45 Патриот РФ (12+)
16.00 "Аль-Фатиха". (12+)
16.30 Новости (на рус.яз.)
16.45 Интервью (12+)
17.00 Республика LIVE #дома (12+)
17.30 Новости (на рус.яз.)
17.45 "Ҡурай даны". Проект о героях нашего времени, номинированных на Национальную телепремию "Ҡурай даны" (12+)
18.00 "Йома". Нравственные ценности ислама (0+)
18.30 Новости (на баш.яз.)
19.00 Честно говоря (12+)
19.45 История одного села. С. Утекаево, Саратовская область (12+)
20.00 Сәңгелдәк (0+)
20.15 Полезные новости (12+)
20.30 "Башҡорт йыры-2023". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни (12+)
21.15 Специальный репортаж (12+)
21.30 Новости (на рус.яз.)
22.00 Спортивная история (12+)
22.30 Новости (на баш.яз.)
23.00 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. I тур (12+)
00.00 Т. Миннуллин, "Любовница". Спектакль Сибайского государственного башкирского драматического театра им. А.Мубарякова (12+)
02.00 Новости (на баш.яз.)
02.30 Үткән ғүмер (12+)
03.00 "Ҡурай даны". Проект о героях нашего времени, номинированных на Национальную телепремию "Ҡурай даны" (12+)
03.15 Честно говоря (12+)
04.00 "Ете егет". Реалити-шоу о парнях, обучающихся народным промыслам (12+)
04.45 Вопрос+Ответ=Портрет (6+)
05.30 Тормош (12+)
06.00 Спортивная история (12+)
06.30 Новости (на рус.яз.)

## ШӘМБЕ 29 апрель

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 "Доброе утро. Суббота" (0+)
09.00 "Умницы и умники" (12+)
09.45 "Слово пастыря" (0+)
10.00, 12.00, 18.00 Новости
10.15 "Поехали!" (12+)
11.10 "ПроУют" (0+)
12.15 "Видели видео?" (0+)
14.00 Д/с "Рюриковичи" (16+)
18.20 "Кто хочет стать миллионером?" (12+)
19.20 "Сегодня вечером" (16+)
21.00 Время
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига (16+)
23.50 Х/ф "Эйфель" (16+)
01.50 Подкаст. Лаб "Анекдоты" (16+)
02.35 Подкаст. Лаб "Письма" (16+)
03.15 Подкаст. Лаб "Собрались с мыслями" (16+)
03.50 Подкаст. Лаб "Космические истории" (16+)
04.25 Подкаст. Лаб "Креативные индустрии" (16+)
05.00 Подкаст. Лаб "Легкие деньги" (16+)

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России. Суббота"
08.00 Вести. Местное время
08.20 Местное время. Суббота
08.35 "По секрету всему свету"
09.00 "Формула еды" (12+)
09.25 "Пятеро на одного"
10.10 "Сто к одному"
11.00, 17.00, 20.00 Вести
12.00 "Доктор Мясников" (12+)
13.05 Х/ф "Токсичная любовь" (12+)
18.00 "Привет, Андрей!" (12+)
21.00 Х/ф "Очень плохая невеста" (12+)
00.40 Х/ф "Добежать до себя" (12+)
03.50 Х/ф "Белое платье" (16+)

### БАШКОРТОСТАН 24

7.00, 9.30, 18.00, 21.25, 23.30, 3.00, 5.25 Фильм/12+/
8.00, 12.00, 16.45, 0.00, 5.55 Дежур бүлек/16+/
8.10, 20.00, 23.00 Хит-парад/12+/
8.40, 14.20, 17.40, 1.15 Ислам нуры/12+/
9.00, 13.00 Урындағы ваҡыт/12+/
11.00 Дайджест/12+/
12.20, 14.00, 17.05, 17.40, 20.30, 23.45, 1.45, 2.40 Өфө хәбәрҙәре/12+/
12.40, 16.00, 20.50, 2.05 Кинопрофиль/16+/
13.30, 1.20 Республика лайф 12+
14.35, 21.10, 1.00, 6.15 Мәҙәниәт хәбәрҙәре/12+/
14.50, 2.00 Халыҡ медицинаһы/12+/
15.00 Ихлас күңелдән/12+/
16.15 Минең Өфөм/12+/
17.20, 0.20, 4.45, 6.30 Өфө мондары/12+/
18.45 В. Спиваков концерты 12+
23.00, 4.55 Музыкаль хит-парад 12+
6.50 РФ һәм РБ гимны /12+/

### БСТ

07.00 "Доброе утро!" (12+)
07.30 Новости (на баш.яз.)
07.45 "Ете егет". Реалити-шоу (12+)
08.30 Это моя профессия (12+)
09.00 Мультфильмы (0+)
09.30 Новости (на рус.яз.)
10.00 Елкән (6+)
10.30 "Гора новостей". (6+)
10.45 Этно-краса (6+)
11.00 МуҙКәрәҙ (0+)
11.30 "Байтус" (6+)
11.45 "Семәр". Телеконкурс для юных художников (0+)
12.00 Тәмле. Мы вместе! (12+)
12.30 Новости (на баш.яз.) (12+)
13.00 Үткән ғүмер (12+)
13.30 Башҡорттар (6+)
14.00 Дарю песню (12+)
16.00 Колесо времени (12+)
17.00 ПРЕМЬЕРА НА БСТ! М. Файзи, "Ак калфак". Спектакль Стерлитамакского государственного башкирского драматического театра им. И. Юмагулова (12+)
18.30 Новости (на баш.яз.)
19.00 Вестник "Газпромтрансгаз Уфа" (12+)
19.15 Вопрос+Ответ=Портрет. Светлана Чураева (6+)
20.00 Сәңгелдәк (0+)
20.15 Полезные новости (12+)
20.30 "Байык-2023". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. I тур (12+)
21.30 Новости (на рус.яз.)
22.00 Республика LIVE #дома (12+)
22.30 Новости недели (на баш.яз.)
23.15 Концерт заслуженной артистки РБ Лилии Биктимировой (12+)
02.00 Л.Степанов, З.Исмагилов, "Журавлиная песнь". Балет-спектакль Башкирского государственного театра оперы и балета (12+)
03.30 Новости недели (на баш.яз.)
04.15 "Я ушла на войну". Документальный фильм "АНО ТВ-Новости". (16+)
05.15 Золотой фонд башкирского ТВ. "Млечный путь" (12+)
06.00 Мистический Башкортостан (12+)
06.30 Новости (на рус.яз.)

## ЙӘКШӘМБЕ 30 апрель

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00, 10.00, 12.00, 18.00 Новости
06.10 Подкаст. Лаб "Космические истории" (16+)
06.55 "Играй, гармонь любимая!" (12+)
07.40 "Часовой" (12+)
08.10 "Здоровье" (16+)
09.20 "Мечталлион" (12+)
09.40 "Непутевые заметки" (12+)
10.15 "Жизнь других" (12+)
11.10 "Повара на колесах" (12+)
12.15 "Видели видео?" (0+)
14.00 Д/с "Рюриковичи" (16+)
19.00 "Две звезды. Отцы и дети" (12+)
21.00 Время
22.35 Международный конкурс песни на русском языке "Автора!" (12+)
00.30 "На футболе с Денисом Казанским" (18+)
01.00 Подкаст. Лаб "Антропология" (16+)
01.45 Подкаст. Лаб "20 лет спустя" (16+)
02.25 Подкаст. Лаб "Триггеры" (16+)
03.05 Подкаст. Лаб "Мелодии моей жизни" (16+)
03.40 Подкаст. Лаб "АстроУмные" (16+)
04.15 Подкаст. Лаб "Произвольная программа" (16+)
04.50 Подкаст. Лаб "Пусть не говорят, пусть читают" (16+)
05.25 Подкаст. Лаб "Креативные индустрии" (16+)

### РОССИЯ 1

06.15, 03.10 Х/ф "Личные счёты" (16+)
08.00 Местное время. Воскресенье
08.35 "Когда все дома"
09.25 "Утренняя почта"
10.10 "Сто к одному"
11.00, 17.00 Вести
12.00 Большие перемены
13.05 "Петросян-шоу" (16+)
15.00 Х/ф "Бриллиантовая рука" (0+)
18.00 "Песни от всей души" (12+)
20.00 Вести недели
22.00 "Москва. Кремль. Путин."
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым" (12+)
01.30 Х/ф "Любовь для бедных" (12+)

### БАШКОРТОСТАН 24

7.00, 9.30, 12.50, 20.35, 21.25, 23.50, 1.30, 2.20, 3.00 Фильм/12+/
7.40, 16.30, 21.05, 5.50 Дежур бүлек/16+/
8.00, 12.00, 14.45, 18.00, 0.00, 4.45, 5.45 Өфө хәбәрҙәре/12+/
8.20, 13.40, 16.00, 1.00, 6.05 Ислам нуры/12+/
8.35, 16.20 Халыҡ медицинаһы /12+/
8.50, 1.20, 6.20 Өфө мондары/12+/
9.00, 14.00, 17.00, 20.00 Хәбәрҙәр
11.00 Дайджест/12+/
12.20, 23.00 Республика лайф 12+
13.25, 16.45, 5.00 Мәҙәниәт яңылыҡтары /12+/
15.00, 19.00 Ихлас күңелдән/12+/
17.35 Балалар өсөн тапшырыуҙар 6+
23.30, 2.00 Кинопрофиль /16+/
0.50, 5.35 Телемедицина /12+/
6.50 РФ һәм БР гимны /12+/

### БСТ

07.00 "Доброе утро!" (12+)
07.30 Новости (на баш.яз.)
07.45 "Йома". (12+)
08.15 Тормош. Дер. Москово, Дюртюлинский район (12+)
08.45 "Ҡурай даны". (12+)
09.00 "Бай". (12+)
09.30 Новости (на рус.яз.)
10.00 "Книга сказок". Сказка для малышей (0+)
10.15 "Городок АЮЯ". (0+)
10.30 "Гора новостей". (6+)
10.45 "Сулпылар". (0+)
11.15 Нурбостан сәйәхәте (6+)
11.30 "Кош юлы. Балалар" (6+)
11.45 Вопрос+Ответ=Портрет. Диляра Идрисова (6+)
12.30 Новости недели (на баш.яз.)
13.15 "Алтын тирмә". Телевикторина (0+)
14.00 Дарю песню (12+)
15.30 "Дорога к храму". Православная религиозная программа (0+)
16.00 Историческая среда (12+)
16.30 "Честно говоря". (12+)
17.15 Әлләсе... (6+)
18.00 "Уҡытыусыма" (0+)
20.00 Атлас Баженова. Башкортостан (12+)
20.30 Спортивная история (12+)
21.00 Специальный репортаж (12+)
21.15 Дознание (16+)
21.30 Новости недели (на рус.яз.)
22.15 Республика LIVE #дома (12+)
22.45 Бенефис народной артистки РБ Альфии Каримовой (12+)
01.30 М. Карим, "Страна Айгуль". Спектакль ГАРДТ РБ (12+)
03.45 Республика LIVE #дома (12+)
04.15 Атлас Баженова. Башкортостан (12+)
04.45 Историческая среда (12+)
05.15 Золотой фонд башкирского ТВ. "Млечный путь" (12+)
06.00 Новости недели (на рус.яз.)
06.45 Специальный репортаж (12+)

ИМАН



## Хәтерең бәлып ҡуй

“Ҡөрьән” сүрәһенән өҙөк

***“Арағыҙҙа никахһыҙ кешеләр булһа, уларҙы өйләндерегеҙ. Ярлы булһалар, Аллаһ үҙ йомартлығы менән байытыр. Аллаһтың күңеле киң, Ул белә”.***

**“Ән-Нур” сүрәһенән.**

# Рамаҙан орлоҡтарын башҡа айҙарға сәсәйек

## Ураҙа айы һабаҡтарын артабан нисек файҙаланырға?

**20 апрель ҡояш байығас, изге Рамаҙан айы тамамланды. Бөгөн, 1 шәүүәл, Ураҙа байрамы билдәләнә. Ошо уңайҙан барлыҡ мосолман ҡәрҙәштәребеҙҙе ихлас тәбриклəп, иң изге теләктәребеҙҙе еткерәбеҙ, өммәтебеҙ, иншаллаһ, артабан да киңәйә барыр тигән ышаныста ҡалабыҙ.**

Ай дауамында ғибәҙәттә булған мосолмандың тормошо артабан ниндәйерәк үҙгәрештәргә дусар ителә? Рамаҙанда алған һабаҡты һәр кем дөрөҫ файҙаланамы?

Мосолмандар ураҙаны һағыш менән оҙата. Сауап-бәрәкәтте күпләп алыу мөмкинлеген биргән, мәрхәмәт-шәфҡәткә, күркәм ғәмәлдәргә бай, тимәк, бөтөн кешелектең хыял-максатына тап килгән изге айҙан айырылыу еңел түгел. Диндарҙар әйтеүенсә, был мәлде уҡыусыларҙың мәктәпте тамамлауы менән сағыштырырға мөмкин. Ураҙала алған һабаҡ шул килеш ҡалырға тейеш түгел, уны ғәмәлдә файҙалана башлау, белемде артабан камиллаштырыу, юғарыраҡ үрҙәргә ынтылыу мөһим.

Мәҫәлән, Рамаҙанда мосолмандар мәсеткә күмәкләшеп йыш йөрөй. Ир-аттың ошолай туплаһыуы, бергәләп фекер алышып, кәңәшләшеп, уртаҡ маҡсаттар ҡороп йәшәүе Исламда юғары баһалана. Был ғәмәл ураҙа айында ғына түгел, һәр саҡ башҡарылырға тейеш. Ир-уҙамандары бергә булған халыҡтың иртәгәһе ышаныслы, ундай өммәттең тамыры ныҡлы.

Рамаҙан дауамында мосолман тәрәүих намаҙҙары уҡый, ҡояш сыҡмаҫ борон сәхәр эсә, һуңғы ун төндә ғибәҙәт ҡылыуға айырыуса ҙур урын бирә. Ошолай өйрәнһә, уға артабан да йоҡоно ҡалдырыу, иртә уяныу йәһәтенән ауырлыҡ булмаясаҡ. “Таңдағы доғаларҙы фәрештәләр тыңлай”, тиҙәр. Иртә торғандың юлы уңа, тормошона ҡот-бәрәкәт өҫтәлә. Йоҡоһона баш була алмағандан, ваҡытын бушҡа уҙғарғандан иһә ырыҫ ҡаса.

Изге айҙа күптәр Ҡөрьән аяттарын ятлап ала. Был ғәмәл, әлбиттә, ураҙанан һуң туҡтап ҡалырға тейеш түгел. Мосолмандың һәр көнө – алға ынтылыу. Булған белем менән ҡәнәғәт ҡалыуҙың, үҫешергә тырышмауҙың артҡа тәгәрәүгә килтереүе ихтимал. “Ғилемде бишектән алып гүргә ингәнсе өйрән”, – тигән пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһис-сәләм. Динебеҙҙә белем тормоштоң асҡысы, яҡшы, мул, имен йәшәү нигеҙе тип тәкрарлана.



Фото: islam.ru

Ураҙала әҙәм балаһы ашау-эсеүҙән тыйылып тора. Быйын, мәғлүм ки, файҙаһы бихисап. Асығып, әҙәм балаһы организмын таҙарта. Шул уҡ ваҡытта эсе көндәрҙә лә бер йотом һыуһыҙ йөрөү ихтыяр көсөн нығыта, сыҙамлыҡҡа, ныҡышмаллыҡҡа өйрәтә. Бындай хәлдә әҙәм балаһы ризыҡтың ҡәҙерен нығыраҡ аңлай башлай, сирлеләргә, мохтаждарға ҡарата мәрхәмәт-шәфҡәте арта. Өҫтәүенә асығып өйрәнгән кеше төрлө ҡатмарлы ваҡиғаларҙа, мәҫәлән, ҡара урманда аҙашҡанда, баҙап ҡалмаясаҡ, үҙ юлын табасаҡ. Ризыҡһыҙ тора алмаған, сабыр итә белмәгән ихтыярһыҙ әҙәмдең иһә бындай һынауҙарҙы үтә алмауы ихтимал.

Ғөмүмән, ашау-эсеүҙән тыйылыуҙың һабаҡтары бихисап. Әҙәм балаһы уларҙы артабанғы тормошона нигеҙ итеп алып, туктауһыҙ хаҡ юлға ынтылып йәшәргә тейеш. Әгәр ҙә дөрөҫ ғәмәлдәргә ураҙа тамамланыу менән “нөктә ҡуйыла” икән, Аллаһ Тәғәлә Рамаҙанда ҡылғандарҙы ҡабул итерме? Артабан фарыз ғибәҙәттәрҙән тайпылған кеше изге айҙа “күҙ буяп” йөрөгән кеүек килеп сыҡмаймы?

Бәғзеләр, мәҫәлән, ураҙа тамамланғас, мәсеткә юлды “онота”. Икенселәр доға уҡымай, хәйер бирмәй, мәрхәмәтһеҙлек күрһәтә, ғәйбәт һүҙ йөрөтә, саманан тыш күп ашай башлай. Бындай кешенең ураҙала асығып йөрөгәненән ни фәтүә? Тәҙөй башлағанды үҙ ҡулдарың менән емереү был, икеләтә гонаһҡа батыу. “Илөп бөткән ебен кире тағатҡан ҡатын һымаҡ булмағыҙ”, – тиелгән “Ҡөрьән Кәрим”дә.

Рамаҙан – Аллаһ ҡушыуы буйынса йәшәүҙең ауыр түгеллеген, ихтыяр көсө, сыҙамлыҡ булғанда, барыһын да үтәү мөмкинлеген раҫлаған ай. Арабыҙҙа дини ғилем туплап та, уны ғәмәлдә тормошҡа ашырырға ҡурҡҡандар бар: мәҫәлән, намаҙ уҡый башларға ҡыйыулыҡтары етмәй. Был – сәбәп кенә, ти белгестәр. Ысын күңелдән теләйһең икән, кәс етмәслек ғәмәл юҡ. “Ҡөрьән Кәрим”дә белеме булып та, уның буйынса йәшәмәгән кешеләр китап йөгө менән баҫылған ишәккә сағыштырылған.

Ураҙа айы – ҙур мәктәп. Әҙәм балаһы унан һабаҡ алып, һығымта яһап, тормошта яңы баҫҡысҡа күтәрелергә тейеш. Рамаҙан орлоҡтарын башҡа бөтөн айҙарға сәсеү, таратыу – һәр мосолмандың изге бурысы.

## Перинаталь үҙәктә – намаҙ уҡыу бүлмәһе

**Өфөләге Республика клиник перинаталь үҙәгендә намаҙ уҡыу бүлмәһе асылды. Был эш ураҙа айында Башҡортостан мосолмандары Диниә назараты һәм "Ихлас" мәсете тарафынан атҡарылды.**

Тантанала мөфтөй Айнур Биргәлин, Республика клиник перинаталь үҙәгенең баш табибы Игорь Засядкин, "Ихлас" мәсетенең имам-хатибы Альфред Дәүләтшин һәм башҡалар ҡатнашты.

Мосолман ҡатын-ҡыҙҙары намаҙ уҡыясаҡ бүлмә барлыҡ тейешле шарттарҙы күҙ уңында тотоп йыһазландырылған. Балаҫтар, Ҡөрьән һәм дини әҙәби китаптар ҙа бар. Был бүлмәлә шулай уҡ сабыйға исем ҡуштырырға ла мөмкин. Быйын өсөн "Ихлас" мәсете имамдары менән бәйләнешкә инергә була.

"Беҙҙең перинаталь үҙәк пациенттары араһында Ислам ҡағиҙәләрен үтәгән ҡатын-ҡыҙҙар йылдан-йыл арта. Улар өсөн дини ғәмәлдәрҙе үтәүҙең ни ҡәҙәр мөһим икәнен аңлап, шундай уҡыу бүлмәһе булдырырға тәҡдим иттек, башланғысты ихлас ҡеүәтләгән дини ойошмаларыбыҙ вәкилдәренә ҙур рәхмәт", – ти перинаталь үҙәк етәкселеге.

**Махсус битте Дилбәр ИШМОРАТОВА әҙерләне.**

“Республиканский информационный центр” – филиал ГУП Республики Башкортостан Издательский дом “Республика Башкортостан”.
Учредители: Государственное Собрание — Курултай, Правительство Республики Башкортостан.
Издатель: ГУП Республики Башкортостан Издательский дом “Республика Башкортостан”. Адрес издателя: 450079, Республика Башкортостан, г. Уфа, ул. 50-летия Октября, 13.
Выходит во вторник, пятницу на башкирском языке.
Газета основана в 1917 году.

Баш мөхәррир – Вәдут Ғәйфулла улы ИСХАҠОВ.

ТЕЛЕФОНДАР: баш мөхәррир — 272-05-43, яуаплы секретарь – 272-08-48, баш мөхәррир урынбаҫарҙары – 272-83-87, 272-86-29, 273-49-92.
Бүлектәр: дәүләт һәм хоҡуҡ – 272-16-24; иҡтисад — 272-16-24; социаль өлкә — 272-35-20; мәғариф һәм тәрбиә — 272-96-90; мәҙәниәт һәм әҙәбиәт — 272-16-24; хаттар — 272-35-11; бухгалтерия —273-40-49; реклама, матбуғат таратыу — 273-83-92, 272-62-61, 273-55-16; тәржемә — 273-90-66; рәссам һәм фотохәбәрселәр — 272-24-43; корректорҙар — 272-72-26.
ҮҘ ХӘБӘРСЕЛӘР: Сибайҙа — 8-927-357-36-00.
Беҙҙең адрес: 450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13.
Адрес редакции: 450079, г. Уфа, ул. 50-летия Октября, 13.
E-mail: bashgazet@mail.ru Беҙҙең сайт: www.bashgazet.ru 12+
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.

“Башҡортостан”дың индекстары: П 2729, П 3030.
Дөйөм тиражы: 3711 дана.
Баҫма версия – 3653. Электрон версия – 58.
Гәзит Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм киң коммуникациялар өлкәһендәге күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан 2008 йылдың 11 сентябрендә теркәлде. ПИ ФС77-33205-се таныҡлыҡ.
● *Ҡулъяҙмалар, фотолар, рәсемдәр рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.*
● *Мәҡәләләрҙә килтерелгән факттарҙың дөрөҫлөгө өсөн уларҙың авторҙары яуаплы. Редакция, автор фекерен уртаҡлашмаһа ла, уның мәҡәләһен баҫа ала.*
● *Реклама материалдарының йөкмәткеһе өсөн уларҙы биреүселәр яуаплы.*
● *Материалдарҙы “Башҡортостан”дан күсереп баҫҡанда редакциянан рөхсәт алыу һәм гәзиткә һылтанма яһау мотлаҡ.*

Банкта беҙҙең реквизиттар: Республиканский информационный центр – филиал ГУП Республики Башкортостан Издательский дом “Республика Башкортостан”, ИНН 0278066967, КПП 027843012, БАШКИРСКОЕ ОТДЕЛЕНИЕ №8598 ПАО СБЕРБАНК г. Уфа р/с 40602810306000000166; к/с 30101810300000000060; БИК 048073601; ОГРН 1020203229892.
“Башҡортостан Республикаһының “Республика Башкортостан” нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһы филиалы – “Башҡортостан” республика нәшриәтендә баҫылды. (450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, тел.: 272-88-73).
Отпечатано в Республиканском издательстве “Башкортостан” – филиале ГУП Республики Башкортостан Издательский дом “Республика Башкортостан”. (450079, г. Уфа, ул. 50-летия Октября, 13, 2-й этаж. Тел.: 272-88-73).
График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты – 16.00. Ҡул ҡуйылды – 16.00.
*Һатыуҙа хаҡы ирекле.*
*“Башҡортостан”, № 31 (28033), 2022.*
511-се заказ.

## РУХИӘТ

## Шиғыр уҡыусылар конкурсы башлана

Еңеүселәр “Китап-байрам”да бүләкләнә

“Тыуған ерем тарихы – шиғырҙарҙа” тигән республика конкурсының муниципаль этабына ғаризалар ҡабул ителә башланы. Конкурс М. Шайморатов исемендәге кластар уҡыусылары араһында үткәрелә, унда тыуған яҡ тураһында шиғыр һөйләп төшкән видеояҙмалар ҡабул ителә. Муниципаль этап – 14–28 апрель, ә республика этабы ике өлөштән тора. 2–25 май – видеороликтарҙы ҡарау, ә 26-27 майҙа үткән “Китап-байрам”да финалға сыҡҡан 50 уҡыусы көс һынаясаҡ.

# Туған телде ситтә лә һаҡлайыҡ

Нижневартовск ҡалаһындағы милләттәшебеҙ туған тел курсын башлап ебәргән



Фото: фондтан.

**“Сит ергә күскәс, туған башҡорт телемдә аралашыу етмәй башланы. Мин – өс бала әсәһе, шуға ла балаларымдың телде онотмауы, халҡының тарихын, мәҙәниәтен белеүе үтә лә мөһим. Шулай итеп башҡорт телен өйрәнеү түңәрәге асыу идеяһы тыуҙы”, – тип һөйләй Роза Мәжит ҡыҙы Һатыбалова.**

Ул Нижневартовск ҡалаһында йәшәй, бында 2017 йылда күскән. Ҡалала ете меңләп башҡорт халҡы вәкиле ғүмер итә, был ҡала халҡының яҡынса өс процентын тәшкил итә. Улар Башҡортостанды тыуған ере итеп һанай һәм нефть сәнәғәте өлкәһендә эшләп туҡтағас, республикаға йәшәргә ҡайта.

– Иң башта социаль селтәрҙәр аша Нижневартовскиҙа йәшәгән башҡорттар берләшмәһен – “Югра башҡорттары”н таптым, уның әүҙемсеһенә әйләндем, ә бер аҙҙан мине рәйес итеп һайланылар. Балалар өсөн башҡорт теле түңәрәге ойоштороrға тигән тәкдимемде коллегаларым да хупланы, һәм 2021 йылдың сентябренән китапханала йәмәғәт башланғысы менән тәүге дәрестәрҙе үткәрҙек, – тип бәйән итә Роза Мәжит ҡыҙы.

Түңәрәк бик популяр булып китә. Дәрестәрҙе киңәйтергә теләп, “Хазина” башҡорт теле курстары” тигән проект менән Башҡортостан Башлығы грантына конкурста ҡатнашалар. Һәм уларға уңыш йылмая!

Курста башҡорт телен өйрәнеү халыҡтың мәҙәниәтен, йолаларын өйрәнеү менән бергә үрелеп бара. Уҡтан атыу, милли аш-һыуҙы өйрәнеү, бейеү, йыр, урындағы башҡорттар менән әңгәмәләшеү кеүек практик дәрестәр ҙә бар. Уҡыу һәр йәкшәмбе үткәрелә, унда балалар ҙа, өлкәндәр ҙә йөрөй.

– Хәҙер дәрестәргә 30 кеше – 15 бала, 15 өлкән кеше – килә. Ҡайһы саҡта бынан күпкә артыҡ бала йыйыла, тотош ғаилә менән килеүселәр бар. Тәүҙә башҡортса бөтөнләй һөйләшмәгән балаларҙың үҙ-ара туған телдә аралашҡанын күҙәтеү ҡыҙыҡ. Улар хәҙер олатай-өләсәйҙәре менән рәхәтләнеп башҡортса аралаша ала.

Проектты тормошҡа ашырыу буйынса Ханты-Манси автономиялы округының алты ҡала-ҡасабаһында булыу ҡаралған: Сорғот, Когалым, Лянтор, Түбәнге Сартым, Лангепас, Совет ҡасабаһы. Маҡсат – проект менән таныштырыу, был урындарҙа ла башҡорт теле курстарын асыу.

10 майға ҡәҙәр коммерцияға ҡарамаған ойошмаларҙың Башҡортостандың дәүләт һәм туған телдәрен һаҡлау һәм үҫтереүгә бирелгән республика Башлығы гранттарына конкурста ҡатнашыу мөмкинлеге бар. Тулы мәғлүмәт Фондтың рәсми сайтында: грантыглавы102.рф. Конкурста Башҡортостанда теркәлгән ойошмалар, шулай уҡ, әгәр ҙә проекттары башҡорт телен Башҡортостандан ситтә һаҡлау һәм үҫтереүгә йүнәлтелгән икән, Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендәгеләр ҙә ҡатнаша ала.

# Опера яратыусылар өсөн байрам

Билдәле башҡорт опера йырсыһы Әлфиә Кәримованың ижад кисәһе үтте



**Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында Башҡортостандың халыҡ артисы Әлфиә Кәримованың бенефисы уҙҙы. Опера йырсыһы ижади эшмәкәрлегенә 20 йыл тулыуҙы билдәләнә. Сәхнәлә төрлө әҫәрҙәр яңғыраны, улар артистың күп ҡырлы талантын күрһәтергә ярҙам итте.**

Театрлаштырылған тамашала Асҡар Абдразаҡов, Санкт-Петербург ҡунағы – һирәк осраған контртенор тауышлы Артем Крутько, Екатеринбургтан Михаил Мищенко (фортепиано), Илһам Вәлиев, Артур Ҡәйепҡолов, Илнур Хәйруллин һәм башҡалар ҡатнашты. Концертта музыка һөйөүселәр яратып тыңлаған опера, оперетта, мюзиклдарҙан өҙөктәр, башҡа сығыштар яңғыраны. Симфония оркестры, хор, театрҙың балет труппаһы ҡатнашҡан юғары сәнғәт кисәһе тамашасыларға оҙаҡ онотолмаҫ тәьҫораттар бүләк итте.


О. Меньков фотолары.

**Туպланманы Рәүилә ҒАТАУЛЛИНА әҙерләне.**

## Котлайбыҙ!

Көйөргәҙе районының Ҡотлоюл ауылында йәшәүсе тормош иптәшем, атайыбыҙ, олатайыбыҙ **Фәткулла Ғайса улы АҠҺАРОВты 75 йәшлек юбилейы менән** ихлас ҡотлайбыҙ.

Ул 1948 йылдың 23 апрелендә ғаиләлә дүртенсе бала булып донъяға килә. Әрме сафтарында хәрби бурысын үтәп ҡайтҡас, туған колхозында хеҙмәт юлын башлай. Ситтән тороп Стәрлетамаҡ совхоз-техникумын тамамлай. Оҙаҡ йылдар “Искра” ауыл хужалығының Ҡотлоюл һөтсөлөк фермаһында мөдир булып эшләй. Хаҡлы ялға сыҡҡансы арымай-талмай шунда намыҫлы хеҙмәт итә ул.

Ҡәҙерлебеҙҙе юбилейы менән тәбрик итеп, иң изге теләктәребеҙҙе ятҡан гәзите аша еткерәбеҙ. Алдағы көндәренең яҡты, бәхет-шатлыҡҡа мул булыуын, ҡоростай һаулыҡ, ғүмерҙең ҡояшҡа тиң оҙонон, өмөт-теләктәренең һәр саҡ тормошҡа ашыуын теләйбеҙ.



Артабан да балаларыңдың, ейән-ейәнсәрҙәреңдең, яҡындарыңдың, туғандарыңдың хөрмәтен, ихтирамын тойоп, барыбыҙға ла терәк-таяныс булып, әсәйебеҙ, өләсәйебеҙ менән бәхеткә төрөнөп кенә йәшә!

*Донъя мәшәҡәтен еңә килдең,*
*Бирешмәнең ҡырыҫ елдәргә.*
*Тырышлығың, эшкә ихласлығың*
*Һүрелмәне ғүмер-ғүмергә.*

*Беҙҙең өсөн мәңге ҡәҙерле һин,*
*Хоҙай ҡушһын оҙаҡ йәшәргә.*
*Ер йөҙөндә күпме кеше йәшәй,*
*Иң яҡыны беҙгә һин генә.*

**Иң изге теләктәр менән ҡатының, улың Азамат, киленең Гөлфиә, кейәүең Роберт, ейәнсәрең Глүзә, ейәндәрең Рөстәм, Айрат, Айсар һәм бүләсәрең Ралина.**

* * *

Өфө ҡалаһында йәшәгән һылыуыбыҙ **Алина Салауат ҡыҙы БУРАНҒОЛОВАны матур ғүмер байрамы – 20 йәше менән** ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ.

Тормошоңдоң иң йәмле сағы – йәшлек дәрте ташып тора, күңелеңдә яҙ һулышы, йөрәгең мөхәббәткә сорналған. Янында һине ятҡан һәм аңлаған яҡындарың – атай-әсәйең, өләсәйең, һеңлең, туғандарың. Хоҙай Тәғәлә ғүмереңбуйы ошо бәхеттән айырмаһын һине. Һәр ваҡыт арҡалы, һаҡлаулы бул. Барлыҡ хыялдарың тормошҡа ашһын. Сәләмәтлек, рухи көс, күңел сафлығы теләйбеҙ һиңә, һылыу.

*Бөгөнгөләй һөйкөмлө бул!*
*Бөгөнгөләй бәхетле бул:*



*Йәй гөлдәр үҫкәндә лә,*
*Яҙ япраҡтар ярғанда ла,*
*Көҙ елдәре иҫкәндә лә,*
*Ергә ҡарҙар яуғанда ла!*

**Иң изге теләктәр менән яҡындарың.**